# БАЛАЛАР ФОЛЬКЛОРЫ



ББК 84 Баш
Б 11

*Яуаплы мөхәррире* филология фәндәре докторы
И. Ғ. Ғәләүетдинов

*Төҙөүселәре* Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов,
Миҙхәт Мәмбәтов, Рәсимә Урактсина
*Рәссамы* Искәндәр Ниғмәтйәнов

**Ғәләүетдинов И. Ғ. һ. б.**

Б 11 Балалар фольклоры: Бала саҡ — уйнап-көлөп үҫер саҡ.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1994.— 160 бит.

ISBN 5-295-01280-8

Б $\frac{4803110400-173}{М\ 121(03)-94}$ 78—94 ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01280-8

© Төҙөү-туплау: Ғәләүетдинов И., Мәмбәтов М., Урактсина Р., 1994
© Ниғмәтйәнов И. һүрәттәре, 1994

## БАШ ҺҮҘ

*Балалар фольклоры, ололар һәм кескәйҙәр тарафынан ижад ителеп, күп төрлө жанрҙарҙы үҙ эсенә ала һәм халыҡ ижадының мөһим бер тармағын тәшкил итә. Ул халыҡ педагогикаһы менән тығыҙ бәйләнгән.*

*Балалар фольклорын өс ҙур төркөмгә бүлергә мөмкин: 1. Әсәләр поэзияһы. 2. Балалар ауыҙ-тел ижады. 3. Уйын фольклоры.*

*Әсәләр поэзияһы үҙе тыуыр балаға һәм бала тыуғас әйтелгән теләк-юрауҙарға, бишек йырҙарына, әүрәткестәргә (баланы мунса индергәндә, бармаҡтар менән уйнағанда әйтелгән һүҙҙәр һ. б.), һөйгөстәргә, арбау-имләүҙәргә (күҙ тейеүҙән, ҡурҡыуҙан, төрлө сирҙәрҙән һаҡлау маҡсатында әйтелгән һүҙҙәр), бейеү таҡмаҡтарына, ҡурҡытҡыстарға һәм бала фажиғәһенә бәйле ҡайғылы йырҙарға төркөмләнә.*

*Балалар ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре халыҡ тормошона, тәбиғәт күренештәренә, үҫемлектәргә, хайуандарға, ҡоштарға һәм бөжәктәргә бәйле өндәшмәктәрҙе, әйтенмәктәрҙе, оҡшатҡыстарҙы (мәҫәлән, ҡош булып һайрауҙарҙы), телмәрҙе камиллаштырыуға ҡоролған тел төҙәткестәрҙе, ике кеше йәки төркөмдәр һәм хатта ауылдар араһында сыҡҡан үсекләшеүҙәрҙе, ҡара-ҡаршы әйтешмәктәрҙе, көйһөҙ-моңһоҙ рифмалы теҙмә юлдарҙан торған таҡмазаларҙы һәм кескәйҙәр тарафынан тыуҙырылған әкиәттәрҙе, көләмәстәрҙе, йырҙарҙы, таҡмаҡтарҙы үҙ эсенә ала.*

*Уйын фольклоры уйнаусыларҙы ике тигеҙ яҡҡа бүлгән йәки сираттарҙы билдәләгән һанашмаҡтарҙан, йырлы, һүҙле драмалы (сюжетлы) һәм ҡағиҙәләргә ҡоролған хәрәкәтле уйындарҙан, уйын тәртибен боҙғандарҙы язалау төрҙәренән ғибәрәт.*

*Башҡорт балалар фольклоры үрнәктәре электән ентекләп йыйып алынмаған һәм тейешенсә өйрәнелмәгән. Шуға күрә был мөһим һәм ҙур эште хәҙер башлап ебәрергә булдыҡ.*

*«Балалар фольклоры» биш китаптан торасаҡ. Тәҡдим ителгән беренсе китапҡа, йыйылған материалдарҙан сығып, ололар тарафынан балалар өсөн тыуҙырылған ауыҙ-тел ижады үрнәктәре һәм балаларҙың үҙҙәре ижад иткән бер килке әҫәрҙәре индерелде. Үрнәктәрҙең ҡайҙан, кемдән алыныуы «Аңлатмалар» бүлегендә бирелде һәм китапта һөйләш үҙенсәлектәре урыны менән шул көйө ҡалдырылды.*

*Ә хәҙер, ҡәҙерле уҡыусым, китаптың сираттағы биттәрен асып, рәхим ит күңелеңдән мәңге юйылмаҫ бала сағыңдың уйынкөлкө мәжлесенә, мауыҡтырғыс сихри балалар донъяһына! Яҡшы китап һүҙе — йән аҙығы. Унда нигеҙендә халҡыбыҙҙың үткәне, тормош-көнкүреше ятҡан һәм бер ҡасан да иҫкермәгән балалар фольклорының ынйылары тупланған. Һин уларҙы һис шикһеҙ ихлас уҡырһың, күңелеңә һеңдерерһең һәм башҡаларға ла өйрәтерһең, тип уйлайбыҙ. Сөнки һауаһыҙ йәшәп булмағандай, тормошоңдо уйындарһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Уйын һинең өсөн тормош мәктәбе, хеҙмәткә әҙерләнеү сараһы һәм халҡыңдың изге ғөрөф-ғәҙәттәрендә һәйбәт тәрбиә алыуҙың аҫыл сығанағы. Халыҡ ижады һуты менән һуғарылып үҫкән бала ғына киләсәктә рухи яҡтан бай, физик яҡтан көслө була. Нисек матур уйнаһаң, ҙурайғас, шулай матур йәшәйәсәкһең дә. Шуның өсөн һине, йәш дуҫым, халыҡ ижады шиғриәтенең баҙыҡ «туҡымаһы» сабый саҡтан уҡ белеп алһын һәм бер ҡасан да ташламаһын. Хәйерле һәм изге юл һиңә, кескәй уҡыусым!*

**Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов**

*Эй, балам, уйна ла көл,*
*Бейе, йырла.*
*Тормош йәме ошоларҙа,*
*Тиеп уйла.*

# БАЛАЛАР ӨСӨН ОЛОЛАР ТАРАФЫНАН ТЫУҘЫРЫЛҒАН АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ ҮРНӘКТӘРЕ.



# ТЫУЫР БАЛАҒА ҺӘМ БАЛА ТЫУҒАС ӘЙТЕЛГӘН ТЕЛӘКТӘР, ЮРАУҘАР

## Кендек әбейе әйтемдәре

Әлли-бәлли, һин ҡайҙа
Әйҙә миңә, мин бында.
Шатлыҡ-бәхет был ерҙә,
Барын ауыҙ ит әйҙә[1].

* * *

Ипләп кенә кил тыуымға,
Атаң китте инсе мал һуйырға.
Әсәкәйеңде интектермә,
Әбекәйеңде бик тилмертмә,
Үрле-ҡырлы йүгертмә[2].

* * *

Ҡояш сығыр,
Бәпәй тыуыр.
Атаһына, әсәһенә
Ҙур байрам, шатлыҡ булыр[3].

* * *

Алла, алла, тәнәйем,
Үҙ юлыңды юлла, бәпкәйем.
Ырыҫ килтер йортоңа,
Биҙәк булһын халҡыңа[4].

## Бала һатып алыу

Әгәр ҙә балалары үлеп торһа, әсә менән ата өйгә инмәй, баланы тәҙрә аша һатып ала. Баланы «һатыусы» былай тип әйтә: «Еленем бар ҙа һөтөм юҡ. Бына ошо баланы һатам, кем ала?» Әсә менән ата берәй нәмә (кәзә, һарыҡ, күлдәк һ. б.) әйтеп, баланы һатып ала[5].

* * *

Элегерәк кешенең балаһы торманы. Ҡайһы берәүҙең ун-ун бер балаһы булып үлер ине. Бала тыуһа, иҙәнгә бесән түшәгәндәр. Кендек инәһе баланы ҡабул итеп алғанда уҡ:

Инәнән тыуғас, бирмәйем,
Әсәһенә лә, атаһына ла.
Ҡайҙан килгәнен белмәйем,
Шайтан елкәмә атланһа ла.

Кендек инәһе баланы икенсе кешегә биреп ебәрә. Кемгә бирергә алдан һөйләшелгән була. Баланы алған кеше, ата-әсәһе янына килеп өндәшә:

— Алаһыңмы?

— Алам. Бала минеке. Бала һеҙҙеке түгел.

Хаҡын килешә алмаған булып, баланы күтәргән кеше, тағы сығып китеп, урап инә.

— Был бала минеке. Исеме... Табып алғайным, һатам.

Ул, баланы алып, тағы сығып йөрөп килә.

Баланың ата-әсәһе:

— Кендек хаҡы бер күлдәк,

Һатылмышына һарыҡ,— ти.

Ике яҡ шулай килешә. Баланы өйгә тәҙрә аша алып инәләр. Баланы әсәһе эргәһенә һалалар. Кендек әбейе теләк теләй: «Оҙон ғүмерле бул, бәхетле бул, тәүфиҡле бул, ата-әсәңә шәфҡәтле бул, уларҙы зарлатма»[6].

### Бала тыуғас теләгән теләктәр

Кеше артты донъяла, ризығың менән, төклө аяғың менән. Бәхетле, сәләмәт бул, тәүфиғең, аҡылың үҙеңдә булһын, әсәйеңә ярҙамсы, атайыңа иш бул, уҡып ҙур кеше бул, кешеләргә изгелекле, игелекле бул[7].

* * *

Ырыҫ-бәхетең, төклө аяғың менән, сабыйым, ата-әсәле бул, үҙ бәхетең менән үҫ, бал-май эсендә йөҙөп йәшә, тырыш бул, сапсан бул, эш тигәндә ал бирмә[8].

* * *

Миһырбанлы, аҡыллы, изгелекле бул, әсәйең менән атайыңа терәк бул, ярҙамсыл, игелекле бул[9].

* * *

Иҫән-һау йөрө, бәлә-ҡазанан һаҡ бул, дошмандарға бирешмә, юҡҡа-барға ирешмә, бәхетле бул, эштәреңдә тәхетле бул, яҡшыға ла — яҡшы, шаҡшыға ла яҡшы бул[10].

* * *

Боҫло ашты бора баҫма, юлың булыр асыҡ таҫма, ҡурҡмайынса алға атла, аш менән атҡанға таш менән атма, яуызлыҡҡа —

яманға батма, дан өсөн дуҫтарыңды һатма, һынауҙар килһә, һынатма[11].

* * *

Дүрт күҙ араһында үҫергә яҙһын балаларға[12].

* * *

Балам, балам бал ғына,
Үҫер әле яй ғына.
Ризыҡтары менән тыуҙы,
Ашаһын гел май ғына[13].

* * *

Балам оҙон сәсле тыуған,
Ғүмере оҙоң булһын.
Бөҙрә генә сәсле тыуҙы,
Әсәһе өҙөлөп торһон[14].

* * *

Балам бик тыпырсына,
Балыҡтай йөҙөр әле.
Бейеүсе булыр әле,
Дандары сығыр әле[15].

**Баланы йыуындырғанда, майлағанда**

Балда, майҙа йөҙөп йәшә,
Бал ҡап, май ҡап.
Һүҙең, тормошоң яҡшы булһын,
Май ҡап, май ҡап.
Ҡылған эшең яҡшы булһын,
Бал ҡап, бал ҡап.
Ата-әсәңә алмашсы бул,
Бал ҡап, май ҡап[16].

* * *

Һалҡын һыу, тәмле һыу
Минең биттәремде йыу,
Минең күҙҙәремде йыу,
Биттәрем алһыуланһын,
Күҙҙәрем ялҡынланһын,
Ҡулдарым таҙа булһын[1]

**Бишек туйы**

Балаларҙың тыуыуына ҡырҡ көн тулғас, тәғәйенләнгән ир бала менән ҡыҙ балаға бишек туйы үткәрәләр. Ҡиәмәтлек ата ме-

нән әсә һайлана. Улар, балалар ятҡан бишек янына килеп, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтергә тейеш:

Әй уҙаман, ир, ҡатын,
Бала тигән ҙур алтын.
Көйһәң, көйөк асыр ул,
Һөйһәң, күңел асыр ул.
Алтын бишек ҡуҙғатып,
Әңгә-әңгә, тип илай.
Әсә, йөрәген һыҙлатып,
Бәпесем-бәпесем, тип һөйләй.
Әсә ала ҡулына
Күрһәтергә иренә.
Ире алдында маһайып,
Имсәк бирә үҙенә.
Бына хәҙер балалар
Берәү түгел, йоп ҡына.
Береһе ҡыҙыҡай, береһе малай,
Бер-беренә тиң генә.
Ата-әсәләре тағы
Тәүге бишек күрәләр,
Көн итешә икеһе лә,
Бер-беренә тиң улар.

Балаларҙы ҡиәмәтлек аталар алалар. Балаларға ҡарата һамаҡлау дауам итә:

Ир бала ла ирәбә,
Атаһынан ҡот ейгән.
Ҡыҙ бала ла ирәбә,
Әсәһенән һөт имгән.
Ҡырҡ көн былар тыуғанға,
Яҡты донъя күргәнгә.
Ата-әсәһе, йә хоҙай, тип,
Етек бала күргәнгә.
Бына хәҙер ата-әсәләр
Туй яһайҙар, шатлыҡ, тип,
Ике бишек балаһын
Башлы-күҙле итәм, тип.

Ҡиәмәтлек аталар, балаларҙың исемдәрен әйтеп, ҡиәмәтлек әсәләргә бирәләр. Ҡиәмәтлек әсәләр үҙ сиратында:

Собхан алла, маша алла.
Яман күҙҙән һаҡлаһын.
Яман артаҡтан һиҫкәнмәй,
Батырҙарса йоҡлаһын.
Собхан алла, маша алла,
Әлми аты ҡот булһын.

Асау эйәртеп, һаҙаҡ атып,
Илде яуҙан һаҡлаһын.
Собхан алла, маша алла,
Биби аты түл йәйһен,
Һис һыҡтамай, кәйеп баҫып,
Ирен яуға оҙатһын.

Ҡиәмәтлек әсәләр аталарҙан алған балаларҙы бер бишеккә һалалар.

Алтын бишек тибрәтеп,
Бына ята ҡуш мунсаҡ.
Иркә генә уҡырыланған,
Гүйә, бәләкәй ҡолонсаҡ.
Атаһы ла, әсәһе
Күкрәк киреп, маһайып,
Яуҙа еңгән батырҙай,
Таяныс, тип торасаҡ.
Беҙ ҡиәмәт әсәләр,
Төп яратҡан әсә беҙ.
Көсөк күлдәк ташлатып,
Яңы күлдәк бесәбеҙ[18].

### Ҡолаҡ тешләтеү

Ана бер ҡайын,
Бына бер имән.
Ҡайын менән имән
Ҡалай пар килгән.
Ҡайын, имәндәр,
Йәле ауыҙ ит!
Ғүмереӊ буйы
Бәхетле иш ит!
Имән, йә әле
Ҡайынға эйел.
Һәр көн һыуыҡтан,
Буран, ямғырҙан
Һаҡлап, гел бөгөл,
Ишеӊә эйел[19].

### Юрауҙар

Ҡыҙ бала ҡысҡырып көлһә, илгәҙәк булыр[20].

* * *

Ир бала иртә һөйләшһә, иркә телле булыр[21].

* * *

Баланы соҡор ергә һалһаң, кәкре була, тигеҙ ергә һалһаң, тура була[22].

* * *

Бала һикереп торһа, сос була[23].

* * *

Ҡыҙ бала — атаһына, ир бала әсәһенә оҡшаһа, бәхетле була[24].

* * *

Түшәккә һалып, баланың күҙен асмайһың. Бите ябыулы булырға тейеш. Асһаң, ҡартайғас булһа ла һуҡыр була[25].

* * *

Баланы түшәккә һалһаң, йоҡосо була, ауыр була[26].

* * *

Бала яҫтыҡҡа ятһа, ҡоштай сос була[27].



*Әлли-бәлли итәр ул,*
*Йоҡоларға китәр ул.*
*Бишектәрҙән үҫеп сыҡҡас,*
*Мәктәптәргә китәр ул.*

## БИШЕК ЙЫРҘАРЫ

### Һандуғасым, аҫыл ҡошом
(Ҡыҙ баланы йоҡлатҡанда.)

Һандуғасым, аҫыл ҡошом,
Йоҡла, бәғерем.
Йоҡла, иркәм, йоҡла, бәпкәм,
Бәүкәй бәлли бәү.
Алма кеүек матурланып,
Бешкән, тулғанһың.
Шул сағыңда һин тағы ла
Сибәр булғанһың.
Алмаҡайым, аппаҡайым,
Йоҡла, гөлкәйем.
Йоҡла, иркәм, йоҡла, бәпкәм,
Бәүкәй бәлли бәү.
Йылғырһың шул, етеҙһең,
Күп тә уйнайһың.
Ал гөлдәрҙе, сәскәләрҙе
Өҙмәй ҡуймайһың.
Кил, гөлкәйем, сибәркәйем,
Йоҡла, бәпкәйем.

Бәүкәй бәлли бәү[1].

* * *

Әлли ҙә бәлли, бәү-бәү,
Бәғерем йоҡлай дәү-дәү.
Көтөү ҡайтты, ҡошсоғом,
Һыйыр мөңрәй, һәү-һәү.
Һыйыр бирер һиңә һөт,
Уны ҡыуып үҫеп ет.
Үҫеп матур ҡыҙ булғас,
Өфөләргә барып ет.

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ ғынам,
Йоҡла, балам, наҙ ғынам.
Киләсәктә бер булыр,
Уңған, сибәр, аҙ ғынам[2].

* * *

Әлли-бәлли итәр ул,
Үҫеп буйға етәр ул,
Үҫеп буйға еткәс тә
Уҡыуҙарға китәр ул,
Ғалимә булып китәр ул.
Илгә хеҙмәт итәр ул,
Үҫеп буйға еткәс тә
Кейәүҙәргә китәр ул[3].

* * *

Йоҡла, ҡыҙым, йоҡла, ҡыҙым,
Йоҡла, йоҡла, йом күҙең.
Үҫеп матур ҡыҙ булғас,
Кейәү табырһың үҙең[4].

* * *

Бәй-бәй, бәю, бәй,
Йоҡла, ҡыҙым, йом күҙеңде,
Ҡаштарың ҡарлуғас ҡанаты,
Күҙҙәрең һынташтың күле,
Керпектәрең унық ҡамышы,
Йоҡла, балам,һылыуым,
Бәю-бәю, бәй-бәй-бәй[5].

* * *

Аллаһыу, аллаһыу,
Кәзәләрҙе тауға ҡыу, тауға ҡыу.
Тауҙан килһә, һыуға ҡыу, һыуға ҡыу.
Аллаһыу, аллаһыу,
Һыуҙан килһә, һау ҙа ҡуй, һау ҙа ҡуй[6].

* * *

Әлли-бәлли бишеге,
Бал ялаған ҡашығы,
Имеккәндә имеҙе,
Һыуһағанда ҡымыҙы,
Арғы яҡта бер бала,
Ай-һай, яҡты йоҡоһо.

* * *

Әлли-бәлли, бәлли-бәү,
Гүзәл йоҡлап китәр ул.
Гүзәл йоҡлап китмәһә,
Ҡуян алып китәр ул[7].

* * *

Ҡыҙым, ҡыҙым-ҡарлуғас,
Ос ояңдан ай тулғас.
Ҡәҙер-хөрмәт күрерһең,
Кейәүкәйең бай булғас[8].

* * *

Дим өҫтөнән ярһып аҡтарылып,
Аға икән ҡалын боҙҙары.
Сәскә кеүек булып, матурланып,
Үҫә икән кемдең ҡыҙҙары[9].

* * *

Йом-йом күҙең, йондоҙом,
Минең бәләкәй ҡыҙым.
Йоҡла тыныс, былбылым,
Йоҡла рәхәт, күҙ нурым[10].

* * *

Ә-ә-ә-әй итә,
Рәйсә йоҡоға китә.
Әсәһе эшкә китә,
Әлли-бәлли, бәү итә[11].

**Йоҡла, улым, йондоҙом**
(Ир баланы йоҡлатҡанда)

Әлли-бәлли итәр ул,
Өфөләргә китәр ул.
Төҙөүсегә уҡыр ул,
Кеше булып китәр ул.

Әлли-бәлли итәр ул,
Бейек йорттар һалыр ул.
Кешеләрҙе шат итеп,
Мәңге телдә ҡалыр ул.
Минең йөрәк бәғерем ул,
Ғәзизем ул, бер генәм.
Ҡыуанысым, шатлығым,
Бәү-бәү, минең йән генәм.
Йоҡла, улым, йом күҙең,
Йом-йом күҙең, йондоҙом,
Кисен тыныс йоҡлаһаң,
Уйнап үтер көндөҙөң.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү[12].

* * *

Бәү-бәү, тимен, йоҡла, тимен,
Ыласыным, бөркөтөм,
Йәш шоңҡарым, ҡарлуғасым,
Йом күҙеңде, етте төн.
Бөркөттәр ҙә йоҡлағандар
Урманда,
Кәкре ҡойроҡ эттәр генә
Урамда.
Бәү-бәү, йом күҙеңде,
Йоҡла, балам, йондоҙом[13].

* * *

Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡоларға китәр ул.
«Ығы» итеп, күҙ йомоп,
Иҙрәп йоҡлап китәр ул.
Алма кеүек тәгәрәп,
Үҫеп буйға етәр ул.
Ағайҙары артынан
Ил һаҡларға китәр ул.
Армиянан ҡайтҡас та
Илгә хеҙмәт итәр ул.
Бик тырышып эшләгәс,
Герой булып китәр ул.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Йоҡла, балам, дәү-дәү...[14]

* * *

Йоҡла, улым, йом күҙең,
Йом күҙеңде, йондоҙом,
Йоҡламай һаҡлап торор
Һинең бәхет йондоҙоң.

Шул йондоҙоң янында,
Бик яҡында, яҡында,
Йәшәй ҡәҙерле бабайың,
Уйлай һинең хаҡында[15].

* * *

Әлли-бәлли, күҙ нурым,
Һандуғасым, былбылым.
Әсәйең ҡайтһа, туҡ булырһың,
Сабыр итеп тор, улым[16].

* * *

Әллүк-әллүк итә ул,
Йоҡлап ҡына китә ул.
Үҫеп буйға еткәс тә,
Армияға китә ул[17].

* * *

Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡоларға китәр ул.
Бәү-бәү итеп, күҙ йомоп,
Тирләп, йоҡлап китәр ул.
Алма кеүек тәгәрәп,
Үҫеп буйға етәр ул.
Ағайҙары артынан
Армияға китәр ул[18].

* * *

Әлли-бәлли итәр ул,
Бәлликигә китәр ул.
Бәлликиҙән ҡайтҡас ул,
Ил һаҡларға китәр ул[19].

* * *

Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли-бәлли итә ул.
Ҡыҙыл армия сафына,
Үҙе теләп китә ул[20].

* * *

Әлли-бәлли, бәү, бәү,
Минең бәпкәм дәү-дәү.
Космонавт та булыр ул,
Илде гөлгә күмер ул.

Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Йоҡо килә дәү, дәү.
Әҙрәк серем итәйек,
Әсәйгә ял бирәйек[21].

* * *

Аллаһыу, аллаһыу,
Кәзәләрҙе тауға ҡыу.
Кәзә талды кимерһен,
Ҡыҙҙар һиңә тилмерһен[22].

* * *

Ай, был малай, маллы бул,
Йорт-ҡураңа терәк бул.
Тәпәй баҫып, атлағас,
Йомош-юлға кәрәк бул[23].

* * *

Әлли-бәлли итәр ул,
Ғалим булып китәр ул,
Ғалим булып киткәстен
Аҡ салмалар салыр ул,
Йәшел сапан кейәр ул,
Оҫтабикә кәрәк тиеп,
Бер бай ҡыҙын һорар был.
Йәлләмәйсә бирерҙәр,
Ҡоҙасалар килерҙәр,
Ғалим менән оҫтабикә
Бәхетле булһын, тиәрҙәр[24].

* * *

Аллаһыу, аллаһыу,
Бәрәстәрҙе тауға ҡыу.
Тауҙа үлән утлаһын,
Улым рәхәт йоҡлаһын.
Аллаһыу, аллаһыу
Бәрәстәрҙе тауға ҡыу,
Тауҙан ҡайтһа, һыуға ҡыу,
Һыуҙан ҡайтһа, һуй ҙа ҡуй[25].

**Бишек йырҙарының ир**
**һәм ҡыҙ балаға әйтелгәне**

Йоҡла-йоҡла һин, балам,
Һине бишеккә һалам.
Һин йоҡоға киткәнсе,
Үҙем янында ҡалам.
Сеү-сеү инде, йоҡласы,

Мине эшһеҙ тотмасы.
Йортом тулы мәшәҡәт,
Эшемде ҡалдырмасы[26].

* * *

Йоҡла, балам, йоҡла, балам,
Тәүфиҡ бирһен үҙеңә.
Бәхет килһен өйөңә,
Бәхетлеләр ҡәҙерле.
Аҙғын бала йәберҙә, әлли-бәү.
Нур һибелһен йөҙөңә,
Асҡыс бирһен телеңә,
Отҡорлоҡ бир зиһенеңә.
Уҡығанда алда бул,
Күп ғилемгә эйә бул.
Дуҫтарыңа һуҙ ҡулың, әлли-бәү,
Улар ҙа һуҙыр ҡулын.
Юлдарың асыҡ булыр, әлли-бәү.
Кәртәләр ватыҡ булыр, әлли-бәү[27].

* * *

Бәү, бәү, бәпәйем,
Хәҙер килер әсәйең,
Унан килер атайың,
Һине бәүетә йәш бала —
Кинйәбикә апайың.
Бәү, бәү, бәлли бәү...
Йомсо, йомсо, йом күҙең,
Минең матур аҡҡошом,
Минең һүнмәҫ йондоҙом,
Бәлли-бәү, бәлли-бәү...[28].

* * *

Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли-бәлли-бәү.
Мин һаман да һинең янда
Әлли-бәлли-бәү!
Әлли бишек, бәлли бишек,
Ник тирбәлә был бишек?
Бәхетле яҡтарға ҡарап,
Асылһын инде ишек!
Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡоларға китәр ул.
Бишектәрҙән үҫеп сыҡҡас,
Мәктәптәргә китәр ул[29].

* * *

Аллыһыу, баллыһыу,
Кәзәләрҙе тауға ҡыу.
Тауҙан ҡайтҡас, һыуға ҡыу,
Һыуҙан ҡайтҡас, һуй ҙа ҡуй,
Аллыһыу, баллыһыу![30]

* * *

Матур йырҙар һайланым,
Төнөң тыныс үтһен тип,
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү!
Уйнай-көлә көн үтте,
Йоҡлар ваҡытың етте.
Ҡояш та батты инде,
Көтөү ҙә ҡайтты инде.
Бәрәскәйҙәр ҙә күптән
Йоҡларға ятты инде.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү!
Баш осонда әсәйең,
Һыйпай йомшаҡ сәскәйең.
Балам йоҡлап китһен тип,
Төнө тыныс үтһен тип,
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү!
Тышта хәҙер төн генә,
Йоҡламайһың һин генә.
Тәмле төштәр күрерһең,
Көндөҙгөләй йөрөрһөң.
Күҙҙәреңде йом әле,
Ни булғанын белерһең.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Әлли-бәлли, бәү-бәү![31]

* * *

Уйнаның, бейенең,
Булғандыр күңелең.
Хәҙер бына урын һалам,
Ял итерһең, ҡурсағым.
Бәүетәм үҙеңде,
Тыңла һин һүҙемде,
Әлли-бәлли, бәү-бәү![32]

* * *

Тышта ел дә тынған инде,
Ҡоштар күптән йоҡлаған.
Йоҡла, балам, алһыу алмам,
Ҙур үҫерһең, йоҡлаһаң.
Ай ҙа йоҡлай һине; күрмәй,
Йоҡла, балам, йөрәгем,
Уйнап ярһып бөттөң инде,
Берҙән-берем, терәгем.
Алтыным — һин, бәхетем — һин,
Минең һүнмәҫ күҙ нурым,
Һин йоҡлаһаң, тынысланам,
Минең бәхет йондоҙом[33].

* * *

Хәтфә үлән, йәшел бәрхәт
Барыр юлдарың.
Бишек кейек һинең өсөн
Минең ҡулдарым.
Йоҡла, балам, йом күҙеңде,
Әлли-бәлли, бәү,
Һөйөп йоҡлатам үҙеңде
Әлли-бәлли, бәү[34].

* * *

Бик бәхетле был бала
Тыуған совет илендә.
Игелеге — иленә,
Аҡыл уйы — күҙенә[35].

* * *

Кәзәләрҙе тауға ҡыу,
Тау япрағын ашаһын.
Беҙҙең бәпәй йоҡлаһын,
Бәү-бәү, бәү-бәү, бәү-бәү![36].

* * *

Әлли-бәлли, бәү,
Йоҡла, балам, күҙ нурым,
Әлли-бәлли, бәү,
Һин йоҡлап торғансы,
Бешерәйем мин күмәс.
Әлли-бәлли, бәү![37]

* * *

Әлли-бәлли, һин ҡайҙа?
Әйҙә миңә, мин бында.
Шатлыҡ-бәхет был ерҙә,
Барын ауыҙ ит, әйҙә![38]

* * *

Бәү-бәү, бәүҙәргән,
Башлығын сысҡан ауҙарған.
Алма кеүек бәпескәй,
Йоҡоһонда ҡыҙарған[39].

* * *

Бәү-бәү, бауырым,
Йоҡла, балам, күҙ нурым.
Кисен йоҡоң ҡала ла,
Илап үтә көндөҙөң.
Бәү-бәү, бауырым![40]

## Өләсәйҙең әйткәндәре

Бәү-бәү итәйем,
Туҙ бишеккә һалайым,
Төлкө туны ябайым,
Бәү-бәү, бәү-бәү!
Өйҙә юҡ әсәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Хәҙер ҡайта әсәһе,
Әлли-бәлли, бәпәйем,
Йоҡлап ҡына кит инде.
Һине ҡарап бәүетеп,
Арып бөттөм бит инде.
Беләһең бит эшем күп:
Әсәйеңә булышам,
Әсәйеңә булышам да
Ҡашыҡ-аяҡ йыуышам.
Бәү-бәү, бәү-бәү![41]

* * *

Бәү-бәү бәпкәһе,
Ҡайҙа бының әсәһе?
Ҡайҙан эҙләп табаһы,
Туҙ бишеккә һалаһы?
Әлли итәр был бала,
Бәлли итәр был бала.

Үҫеп еткәс, тыуған илгә
Хеҙмәт итәр был бала.
Әлли-бәлли бәү итәр,
Тыныс йоҡоға китәр.
Тыныс йоҡоға китәр ҙә
Әсәһе килеп етәр[42].

* * *

Бәү-бәү бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Бәү-бәү бәпкәһе,
Атаһынан утын һорай,
Әсәһенән бал һорай.
Бәү-бәү бишеге,
Бәү-бәү бишеге.
Атаһынан ат һорай,
Әсәһенән тун һорай,
Бер шиҡандаҡ еңгәһе бар,
Бер һалмалыҡ он һорай.
Бәү-бәү бәпкәһе[43].

* * *

Әлли-бәлли бәпкәһе,
Эшкә киткән әсәһе.
Ҡайтыр әле, ҡайтыр әле,
Иламаһын бәпкәһе.
Ҡайтып килә, ҡайтып килә,
Эшкә киткән әсәһе.
Иламай ҙа, мыжымай ҙа
Йоҡлап ята бәпкәһе[44].

* * *

Әлли-бәлли бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Ҡайынлыҡҡа еләккә,
Ҡәҙриәгә бүләккә.
Әлли-бәлли итә ул,
Хәҙер йоҡлап китә ул[45].

* * *

Әлли-бәлли көйҙәрем,
Хикәйәләр һөйләрмен,
Һиңә теләк теләрмен,
Бәхетле бул, тиәрмен[46].

* * *

Иркәләй әсәкәйең,
Иркәләй атаҡайың,
Һинң гәүһәрем, былбылым,
Зөбәржәтем, күҙ нурым.
Әлли-бәлли ит, ҡыҙым,
Йом күҙеңде, йондоҙом.
Күгәрсен дә балаларын
Йоҡлатҡан күптән.
Һинең бишегеңде наҙлап,
Ай йөҙә күктә.
Әлли-бәлли, бәү[47].

* * *

Әүәй-әүәй,
Атаң — Шәүәй.
Әсәң — Нәстә,
Ағаң — Йосоп,
Йөрөй боҫоп:
Апаң — мыҙыу,
Йөрөй мыжып,
Әүәй-әүәй...[48]

* * *

Әлли итер был бала;
Бәлли итер был бала.
Был баланы баға-баға,
Башым булды бумала[49].

* * *

Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар.
Әсәң өйҙә булмаһа,
Һыйыр һауған ергә бар.
Унан күбек ялаһың,
Ҡалағыңды тотоп бар[50].

* * *

Әлли-бәлли иткәндәр,
Биш тараҡан еккәндәр.
Әсәһе өйҙә юҡта
Бәпесте алып киткәндәр[51].

* * *

Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Ғафур, йоҡла ла ҡуй,
Атаһы — Ғәлимйән,
Әсәһе — Миңъямал,
Апаһы — Нурия,
Ағаһы — Зөфәр,
Үҙе — Ғафур.
Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Ғафур йоҡла ла ҡуй,
Йоҡла ла ҡуй![52]

* * *

Атаң кәсеп итәлер,
Мәкәрйәгә китәлер.
Атаңдың тапҡан малдары,
Тәрбиәңә етәлер.
Әлли-бәлли, бәү-бәү![53]

* * *

Әлли-бәлли итергә
Ал бишеге бар уның.
Алдына алып йоҡлатырға
Үҙ әсәһе бар уның.
Ал бишеге бар уның,
Гөл бишеге бар уның.
Өҙгөләнеп һөйөргә
Үҙ әсәһе бар уның[54].

* * *

Әлли-бәлли бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе?
Иламаһын, йоҡлаһын,
Фәрештәләр һаҡлаһын.
Әлли-бәлли, бәү-бәү![55]

* * *

Әлли-бәлли, бәү-бәү,
Теләйем тәүфиҡ балаға.
Ата-әсәң ярлыҡа,
Мәҡбүр була һәр доға[56].

* * *

Алла тигән бән алла,
Ҡабул ҡушҡан бән алла,
Һәү-һәү, алла, һәү-һәү, алла.

* * *

Әлли-бәлли бәүкәйем,
Йән йөрәгем, бәпкәйем,
Бәү-бәү итеп күҙ йомоп,
Йоҡлап китә ул ойоп.
Атаһы ҡайтыр — ҡуй һуяр,
Бер ботон һиңә ҡуяр.
Әсәһе ҡайтыр — май бирер,
Ул майҙарға туярһың,
Илауыңды ҡуярһың.
Ағаң ҡайтыр — тай бирер,
Шул тайҡайға менәрһең,
Ҡуй ҡойроғон имәрһең.
Олатаң ҡайтыр — бал бирер,
Бал ҡашығын яларһың,
Йоҡоларға туярһың.
Апаң ҡайтыр — тал бирер,
Тал сыбығын менәрһең,
Бәлликәйгә китәрһең.
Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡоларға китәр ул![57]



*Тор, тор балам, тор, балам,*
*Тор-торҙарҙан хәбәр килгән...*

## УЯТКЫСТАР

Таң, таң ата, таң ата,
Һағышлы ай ҙа бата.
Ҡояш нурына күмелеп,
Бәпкәйем йоҡлап ята[1].

* * *

Уян, балам, тиҙ уян,
Ҡасып китте төн — ҡуян.
Йомшаҡ ҡына сәстәреңдән
Һөйөп, иркәләп ҡуям[2].

* * *

Төн пәрҙәһе асылды,
Яҡты нурҙар сәселде.

Тор, балаҡай, битең йыу,
Тараһ алсы сәсеңде[3].

* * *

Алтын, алтын, алтыным,
Минең йөрәк ялҡыным.
Уян, бәпкәм, күҙ нурым,
Ҡояш булып балҡырмын[4].

* * *

Үтеп китте ҡара төн,
Алда яҡты, матур көн.
Бәхетле булһын таңың,
Әйҙә, балам, уйнап-көл[5].

* * *

Ҡояш менән бергә тор,
Ялҡау булма, уңған бул.
Ҡояш нурҙары менән
Эшең бөтөрөп ҡуйған бул[6].

* * *

Тор, бәпесем, алтыным,
Йөрәгемдең аҫылы.
Ҡояш нурҙары менән
Бәхеттәрең асылһын[7].

* * *

Сәстәрең ҡамыш булһын,
Кәүҙәләрең зифа тал.
Ҡояш менән бәхет килә,
Таң нурҙарын күреп ҡал[8].

* * *

Ҡояш менән бергә тор,
Ҡояштан да асыҡ бул.
Елпелдәп йөрө елдәй,
Бәхетең булһын күлдәй[9].

* * *

Үҫә-үҫә, бәпкәйем,
Үҫә-үҫә ҙур була.
Ҡояш кеүек һөйкөмлө,
Үҙе һүҙгә йор була[10].

* * *

Ҡояш сыҡты, ай байыны;
Уянырға ваҡыт етте.
Уян, бәпкәм, уян, бәпкәм,
Уянырға ваҡыт етте[11].

* * *

Тор, тор, балам, тор, балам,
Тор-торҙарҙан хәбәр килгән,
Суҡ-суҡ һиңә хәбәр килгән,
Тор, тор, балам, тор, балам[12].

* * *

Тор, тор, балам, тор, балам,
Торайыҡ, торайыҡ торналар.
Тау башында юрғалар.
Тор, тор, балам, тор, балам,
Тор-торҙан хәбәр килгән,
Йоҡоноң мағаһы тейгән[13].

* * *

Тор, тор, балам, тор инде,
Ҡояш күптән ҙур инде.
Осто, китте йоҡоһо,
Шулай уның тоҡомо,
Ҡыты, ҡыты, ҡыты![14]

* * *

Тор, тор, турғай,
Таң ата буғай.
Турғай, кил, сыпсыҡ, сыҡ,
Сырыҡ, сырыҡ, сырыҡ![15].

* * *

Тор инде, турғай,
Таң ата буғай.
Моңая сыйырсыҡ,
Йыр һалды сыпсыҡ,
Сырыҡ, сырыҡ, сырыҡ[16].

* * *

Йоҡо, йоҡо, йоҡо, ҡас,
Бәхетлегә юлың ас![17]

* * *

Ас, Мәрйәмкәй күҙеңде,
Яратайым үҙеңде[18].

* * *

Ғәзиз балам, тор инде,
Йоҡоң туйғандыр инде,
Бөтә балалар мәктәпкә
Барып тулғандыр инде.
Атаң киткән баҙарға
Хәләл малдар алырға.
Балам, һин дә тиҙ өйрән
Дәхи уҡып-яҙырға[19].

* * *

Ҡояш алтын алҡа таға
Тәҙрәм быялаһына.
Тәҙрәләргә ҡарап йылмай
Йоҡонан уянғанда[20].

* * *

Әғүҙиһи бисмилла,
Тор, бәпәйем, Хөснулла.
Еңгәң ҡоймаҡ бешергән,
Ағаң ашап бөтөргән[21].

* * *

**Бала ата-әсәһен уятҡанда**

Ҡояш ҡалҡты, нур балҡты,
Тәҙрәнән өйгә арҡыры.
Уян, әсәй, уян, атай,
Уянырға ваҡыт етте.
Атайҙар, мәктәп һалығыҙ,
Беҙҙе бер аҙ ҡыҙғаныгыҙ,
Ваҡыт етте — ҡуҙғалығыҙ.
Уҡытығыҙ беҙ йәштәрҙе,
Уҡығандар һауа осар,
Уҡығандар һыуҙа йөҙәр,
Уҡығандар кеше булыр,
Уҡығандар әҙәм сафы,
Уҡымаған эттән һаҫы,
Уҡытығыҙ беҙ — йәштәрҙе[22].



*Һәтес-һәтес һәтес тә,*
*Бәләкәй генә бәпес тә.*

## ҺӨЙГӨСТӘР, ҺИКЕРТКЕСТӘР

### Һөйгөстәр

Бәпес-бәпес, бәпестәй,
Бәләкәй генә бәпестәй.
Бәпелдәтеп һөйөргә,
Арҡалары йәтештәй[1].

* * *

Минең балам бал кеүек,
Һығылып торған тал кеүек.
Ауыҙ-мороно уймаҡтай,
Өҫтө ултырған ҡаймаҡтай[2].

* * *

Сәпәк-сәпәк, сәпәктәй,
Майға бешкән әпәкәй.

Үҙе бигерәк бәләкәй,
Алһыу битле бәпескәй[3].

* * *

Сәпәкәй-сәпәкәй-сәпәкәй,
Майға бешкән әпәкәй.
Үҙе йомро йомғаҡтай,
Йомшаҡ ҡына себештәй[4].

* * *

Дөңгөл-дөңгөл, дәнәйем,
Дөңгөлдәтеп һөйәйем.
Атаң мәмәй алып килһә,
Уны һиңә бүләйем.
Әсәң һыйыр һауған ергә
Сеүәтәңде тотоп бар.
Күбек һалып бирер ул,
Уны эсеп бөтмәһәң,
Артыңа сыбыҡ бирер ул[5].

* * *

Дың-дың, дыңайым,
Дыңҡылдатып һөйәйем.
Атаһына ай кеүек,
Инәһенә көн кеүек,
Килеп китһә ҡунаҡҡа,
Ҡараңғы төндә ай кеүек[6].

* * *

Тыңғыл-тыңғыл, тәнәйем,
Тыңғылдатып һөйәйем.
Ултырған ере ҡот булһын,
Баҫҡан ере ут булһын![7].

* * *

Тыңғыл-тыңғыл, тәнәйем,
Тыңғылдатып һөйәйем.
Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар.
Һыйыр һауған ҡашҡа бар,
Күбек һөҙөп бирәйем.
Шул күбекте эсмәһәң,
Артыңа сыбыҡ бирәйем[8].

* * *

Тыңғыл-тыңғыл, дыңғылсаҡ,
Минең ҡыҙым бер ҡосаҡ.
— Өй артында нимә бар?
— Өй артында бүре бар.
— Бүренең һуң keme бар?
— Гүзәл тигән ҡыҙы бар,
Ырғып уйнар тубы бар[9].

* * *

Бәхетле булғыры,
Тәүфиҡле булғыры,
Белемле булғыры,
Аталы-әсәле үҫкере[10].

* * *

Алтын ашыҡтарымды, көмөш ашыҡтарымды.

* * *

Йөрәк емешем, һандуғастарым, йөрәк майҙарым[11].

* * *

Баламдың балаһы,
Йөрәгемдең яраһы[12].

* * *

Бәпес, бәпес, бәпесем,
Тиҙ үҫеп китһәң икән.
Ҡасан арҡаларына
Ҡулдарым һыйыр икән[13].

* * *

Байназарым бай кеүек,
Өйрәнмәгән тай кеүек.
Мөхәммәтем — йөрәк майым,
Йомарлаған май кеүек[14].

**Һикерткестәр**

Ҡыҙым, ҡыҙым — ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешегә бирмәмен —
Алып китер бер кеше.

Һай, һай, һай ғына,
Менгән атым тай ғына.
Менгән атым тай ғына ла
Китеп бара яй ғына.
Тира-тира, тиратай,
Кәләш алып бир, атай.
Һинең киленең булыр ҙа
Минең күңелем булыр.
Һәтес-һәтес, һәтес тә,
Бәләкәй генә бәпес тә,
Ҡашы ҡара, күҙе ҡара
Ҡойоп ҡуйған кәртешкә![15]

* * *

Һәпес, һәпес кенәһе,
Кемдең бәпес кенәһе.
Кемдең булһын, ҡулдарында
Бейетеп тора әсәһе.
Ҡара, ҡара, атаһы,
Ҡара, нисек һикерә.
Йылмайып та, көлдөрөп тә
Үҙәгеңде өҙҙөрә[16].

* * *

Һәпес-һәпес-һәпес тә,
Бигерәк матур бәпес тә,
Тиҙҙән үҫеп етәр ул,
Ил һаҡларға китәр ул,
Тоғро хеҙмәт итәр ул,
Һәпес-һәпес-һәпес тә![17]

* * *

Һәтес-тәтес-тәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә.
Ҡайҙа ҡуяйым икән?
Ергә һалайым микән?
Күккә сөйәйем микән?
Ергә һалһам, ҡорт тейә,
Күккә сөйһәм, ҡош тибә,
Ҡайҙа ҡуяйым икән?[18]

* * *

Һәтес-һәтес-тәтес тә,
Ҡыҙҙар эстә, беҙ тышта.
Һәтес-тәтес-тәтес тә,
Тәҙрә ҡағабыҙ тышта[19].

* * *

Һәт-һәт, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә.
Ҡашы ҡара, буйы зифа,
Ҡойоп ҡуйған кәртешкә[20].

* * *

Һәтес тә, һәтес тә,
Бәләкәй генә бәпес тә.
Үҫер әле, ҙурайыр,
Бына тигән ҡыҙ булыр.
Бына тигән ҡыҙ алыр (ир балаға)[21].

* * *

Һәпес-һәпес-һәпес тә,
Алтын ғына бәпкәмде,
Аҡҡош ҡына баламды,
Һәпес-һәпес-һәпес тә[22].

* * *

Һәтес-һәтес-һәтес тә,
Бәләкәй генә бәпес тә.
Ғыж-ғыж, гөлләлә,
Бигерәк матур көлә лә[23].

* * *

Һоп, һоп, һоп итә,
Хәҙер Балҡанға етә.
Мәккәгә лә ул китә,
Матур кәләшкә етә[24].

* * *

Һоп-һоп, һоп-һоп,
Үҫ, бәпесем, ҙур үҫһен.
Аяҡтары нығынһын,
Үҫһен, үҫһен, ҙур үҫһен![25]

* * *

Һай, һай, һай ғына,
Меңгән аты тай ғына.
Меңгән аты тай ғына ла
Китеп бара яй ғына[26].

* * *

Һайт итәр, һайт итәр,
Йәшел талды ат итәр.

Йәшел талды ат итәр ҙә,
Менеп сабыр ҙа китәр[27].

* * *

Һайт итә, һайт итә,
Бәләкәй тайҙы ат итә.
Бәләкәй тайҙы ат итә лә,
Һуғып сыға ла китә[28].

* * *

Үҫеп буйға етәр ул,
Ғалим булып китәр ул,
Үҙенең тыуған иленә
Тырышып хеҙмәт итәр ул.
Һәп, һәп, һәп![29].

* * *

Үҫә-үҫә һикерһен,
Ҡаймаҡ ашап кикерһен.
Әсәһе магазиндан
Бер уйынсыҡ килтерһен;
Һоп, һоп, һоп![30]

* * *

Үҫә-үҫә ҙур булыр,
Бигерәк матур ҡыҙ булыр.
Илдә-ерҙә бер булыр,
Бер тип әйткән ул булыр![31].

* * *

Самауырым еҙ генә
Ҡайнар микән тиҙ генә.
Ағаҡайым ҡайтыр микән
Әрмиәнән тиҙ генә?
Һоп, һоп, һоп![32]

* * *

Айт, малай, тайт, малай,
Атҡа менеп сап, малай.
Атҡа менеп сапмаһаң,
Һиңә кәләш юҡ, малай[33].

* * *

Малай, малай бит әле,
Шәп ир булып кит әле.
Ҡаршы килгән дошмандарҙы
Уңлы-һуллы һелтәле.
Һоп, һоп, һоп![34]

* * *

Малай, малай, маллы бул,
Ҡурҡаҡ булма, батыр бул.
Дошмандарға ҡаршы бар,
Йәйәү булма, атлы бул.
Һоп, һоп, һоп![35]

* * *

Атлап бара, атлап бара.
(Яйлап ҡына һикертеү.)
Юртып бара, юртып бара.
(Һикертеүҙе көсәйтеү.)
Сапты, сапты, сапты, ти,
Сапты, сапты, сапты, ти[36].

* * *

Баҫыр, баҫыр, баҫыр ул,
Тып-тып йөрөп баҫыр ул.
Бейеп тора, ырғып тора,
Булыр бигерәк батыр ул (малайҙарға).
Көлөп тора, бейеп тора,
Булыр бигерәк матур ул (ҡыҙҙарға)[37].

* * *

Улым, улым, уҙаман,
Улыма мин һылыу алам.
Уның күңеле була,
Минең килеңем була.
Һоп, һоп, һоп![38]

* * *

Һәттәй-тәттәй, һәттей ҙә
Бәләкәй генә бәпәй ҙә.
Өйҙә, ерҙә бер мин тип,
Өҫкә һикергән тәпей ҙә.

Үҫеп китермен әле,
Айға етәрмен әле.
Космонавт булып алһам,
Шунда көләрһең әле[39].

* * *

Һәттитә, тиритә,
Хәсән сапҡан кәритә.
Хәсән китте — сәй бөттө,
Хәсән килде — сәй булды,
Һәттитә, тиритә...[40]

Ҡыҙым, ҡыҙым — ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешенең береһен
Һайлап алыр ҡыҙ кеше[41].

* * *

Ҡыҙы барҙың наҙы бар,
Маңлайында таҙы бар.
Үҫә-үҫә ҙур булыр.
Бигерәк матур ҡыҙ булыр.
Һоп, һоп, һоп![42].

* * *

Түҙек-түҙек түҙ ала,
Атай миңә ҡыҙ ала.
Яҙ алмаһа, көҙ ала,
Һалдаттан ҡайтҡас ала[43].

* * *

Улым, улым — ул кеше,
Ҙур булып үҫер кеше.
Илдә-ерҙә бер булып,
Бер тип әйтер ул булыр[44].

* * *

Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк (әкрен бәүелтеү).

Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк (шәп итеп бәүелтеү).

Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк... (бик шәп итеп аяҡта һикертеү)[45].

**Баланы аяҡ йөҙөнә баҫтырып һикерткәндә**

Һоп-һоп, һоп итә,
Илһөйәр үҫеп китә.
Аяҡтары нығынғас,
Тыпырлап бейеп китә[46].

Гөлгәҙек, Гөлгәҙек — биле нәҙек,
Гөлгәҙектең биле нәҙек,
Кейә алтын беләҙек.
Гөлдәрем сәскәһе,
Хәҙерге матур тормоштоң
Күңелле киләсәге[47].

Бала сиҡаҡлағанда ҡуш ҡуллап һикертәләр һәм һамаҡлайҙар:

Хәсән китте — сәй бөттө,
Хәсән килде — сәй булды.
Талда минең оям бар,
Ике бөртөк балам бар.
Сиҡ-сиҡ, сиҡиҡиҡ, сиҡиҡиҡ![48].



*Тәпәй-тәпәй итә ул,*
*Минең янға етә ул,*
*Шунан үтеп китә ул.*

## ӘҮРӘТКЕСТӘР, ЙЫУАТҠЫСТАР, ШАЯРТҠЫСТАР

### Әүрәткестәр

Әлли-лән, бәллилән,
Айыу бейей белмәгән.
Һап иткән дә ҡолаған,
Килеп алмай тормаған,
Әү-әү итеп илаған[1].

Бала ҡулын ишеккә ҡыҫып ауырттырғанда:

Бесәй-бесәй, бесәйем,
Келәтемә инмә, тинем,
Майымды ашама, тинем,
Ҡойроғоңдо ҡыҫайым, ҡыҫайым,—

тип сабыйҙы, ауыртҡан ҡулынан һыйпап, әүрәтәләр[2].

* * *

Ө-ө, ө-ө итәйем,
Ебәк һата китәйем.
Атаһына ебәк биреп,
Ҡыҙын алып китәйем[3].

* * *

Тир-тир-тир, атай,
Мине кейәүгә бир, атай.
Мине кейәүгә бирмәһәң,
Бер балталыҡ тимерҙән
Ҡумыҙ һуғып бир, атай[4].

* * *

Эй, әҙ киткән, әҙ киткән,
Оя артынан ҡыҙ киткән.
Күрмәнеңме киткәнен,
Йылтан-һалтан иткәнен[5].

* * *

Ҡыҙым, ҡыҙым — ҡыҙ кеше,
Ҡурсаҡ кеүек кейенгән.
Йүгереп йөрөп һыу ташый,
Эй, әсәһе һөйөнгән[6].

**Баланы мунса индергәндә**

Сап, сап, мунса сап,
Мунса ташы,
Бүрәнә башы.
Атаң-әсәң балаһы.
Атаң киҫкән утын түгел,
Әсәң барған һыу түгел.
Сап, сап, мунса сап![1]

* * *

Тәмле-татлы телле бул!
Атаң ташы түгел —
Мунса ташы!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә-Батман ҡулы!
Минең телем түгел,
Иҙел кискән инәкәләр теле!
Кәбеҫтәгә һыу һалдым,
Һыуы һарҡыһын!
Үҙе ҡалҡынһын!
Ят та йоҡла,
Тор ҙа уйна![2]

* * *

Һап, һап, һап,
Мунса ташы,
Бүрәнә башы.
Атайың килтергән утын түгел,
Әсәйең яҡҡан мунса түгел.
Олоно оло тип бел,
Кесене кесе тип бел,
Илеңә, халҡыңа тоғро бул!
Һап, һап, һап![3]

* * *

Һап-һап, мунса ташы,
Һап-һап, бүрәнә башы.
Ябалаҡтан йөн ал,
Бүҙәнәнән май ал,
Ҡарсығанан ҡан ал.
Һап, һап, һап![4]

* * *

Һап, һап, һап!
Мунса ташы, бүрәнә башы.
Әбейҙе «әбей» тип әйт,
Бабайҙы «бабай» тип әйт.
Айыу балаһы,
Бүре балаһы.
Татлы табан бул,
Алабуға бул,
Һыуҙан таҙа бул,
Һөлөктәй бала бул!
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә-Фатима ҡулы!
Һап, һап, һап![5]

* * *

Атаң киҫкән утын түгел,
Әсәң яҡҡан мунса түгел,
Айыуҙай ағай бул,
Бүреләй ажар бул,
Айыу балаһы,
Бүре балаһы.
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Ҡартты күрһәң, «бабай» тип әйт,
Ҡортҡа күрһәң,«инәй» тип әйт,
Йәште күрһәң, «ағай», «еңгәй» тип әйт.

Тәмле-татлы телле бул,
Атаң ташы түгел,—
Мунса ташы.
Минең ҡулым түгел,
Хәтимә инәйең ҡулы!
Минең телем түгел,
Ағиҙелдә йөҙгән инәйеңдәр теле!
Кәбеҫтәгә һыу һалдым,
Һыуы һарҡһын!
Үҙе ҡалҡһын!
Ят та йоҡла,
Тор ҙа уйна![6]

* * *

Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Ят та йоҡла,
Тор ҙа уйна!
Әбейҙе — әбей тиген,
Бабайҙы — бабай тиген.
Тәмле-татлы
Телле бул!
Минең балам
Түгел әле,
Айыу-бүре балаһы.
Сәп! Сәп! Сәп![7]

* * *

Һап-һоп,
Минең балам түгел,
Мунса ташы, бүрәнә башы,
Айыу-бүре балаһы.
Минең ҡулым түгел,
Ғәйшә-Фатима ҡулы.
Һап-һоп![8]

* * *

Мунса ташы, бүрәнә башы.
Сәп, сәп, сәп!
Әсәйҙе күрһәң, «әсәй» тип әйт,
Атайҙы күрһәң, «атай» тип әйт,
Ағайҙы күрһәң, «ағай» тип әйт,
Апайҙы күрһәң, «апай» тип әйт,
Туғанды күрһәң, «туған» тип әйт.
Сәп, сәп, сәп!
Төлкөнән хәйләкәр бул,
Арыҫландан көслө бул,

Елдән етеҙерәк бул,
Сәп, сәп, сәп![9]

* * *

Атаң киҫкән утын түгел,
Әсәң яҡҡан мунса түгел,
Айыуҙай аға бул,
Бүреләй бөгә бул,
Айыу балаһы,
Бүре балаһы,
Мунса ташы,
Бүрәнә башы.
Ҡартты күрһәң, «бабай» тиген!
Ҡарсыҡты күрһәң, «әбей» тиген!
Һап-һап-һап![10]

* * *

Сап-сап сабына,
Сәп-сәп итеп йыуына,
Ҡап-ҡоп итеп ҡойона,
Һөп-һөп итеп һөртөнә,
Кип-кип итеп кибенә,
— Шундай кеше кем була?
— Минең алтынсәс була[11].

* * *

Сап-сап сабына,
Матур итеп йыуына.
Ҡап та ҡоп ҡойона,
Матур итеп кейенә[12].

* * *

Атаң киҫкән утын юҡ,
Инәң яҡҡан мунса юҡ,
Айыу бүкәй балаһы,
Бүре бүкәй балаһы,
Бүрәнә башы, мунса ташы,
Күҙ тейҙермәй үҫә башла!
Һәстүки![13]

* * *

Кәбеҫтәгә һыу һалдым,
Һыуы һарҡһын,
Үҙе ҡалҡһын,
Имәндәй таҙа булһын![14]

* * *

Ҡаҙҙар ҡанат бирһен,
Торналар аяҡ бирһен,
Бүҙәнәләр май бирһен,
Ябалаҡтар йөн бирһен,
Балам ҙур үçһен,
Үç-үç-ç-ç![15]

* * *

Ябалаҡтан йөн ал,
Бүҙәнәнән май,
Кәбеçтәнән аҡлыҡ,
Һыуҙан паклыҡ,
Баламдан килер
Донъяға шатлыҡ![16]

* * *

Кәбеçтәгә һыу һалдым,
Һыуы һарҡһын.
Үҙе ҡалҡһын,
Имәндәй таҙа булһын,
Үҙәктәй оҙон булһын![17]

* * *

Һаумыһығыҙ һеҙҙәргә,
Бесәй күҙҙәргә,
Һуғанлап, борослап,
Сәләм ҡундырам.
Сәләм хат башы,
Ҡарт кәзә башы,
Иçке мунса ташы[18].

* * *

Аллаһыу, һыу, һыу,
Һыу тигәнең хаҡ минең,
Һыу тигәндә, һис мораҙым күп минең,
Һыу, һыу, һыу[19].

**Бала тәпәй баçҡанда**

Әйҙә, балам, ҡалаҡай баç,
Ҡыл-ғыл-ғыл-ғыл,
Ҡыл-ғыл-ғыл-ғыл.
Ҡалаҡай баçа, ҡалаҡай баçа,
Тәтәй була, тәтәй була.
Ҡыл-ғыл-ғыл-ғыл...[1]

* * *

Ай-һай, ай-һай,
Ана килә тауҙай.
Хәҙер килеп етер ул,
Мине ҡыуып етер ул.
Һоп, әйҙә, һоп![2]

* * *

Тәпәй-тәпәй килә ул,
Минең янға етә ул.
Тәп-тәп йөрөп, ҙур үҫкәс,
Мәктәптәргә китә ул[3].

* * *

Тәпәй-тәпәй йөрөһөн,
Дегәнәк уға теймәһен.
Күп кешеләр уны һөйһөн,
Тик күҙҙәре теймәһен[4].

* * *

Кәзә, кәзә, мә, кәзә.
Әрәмәгә бар, кәзә.
Һауыр инем ултырып,
Туҫтағымды тултырып,
Йөрөр инем ҡотороп,
Талдан талға тотоноп[5].

* * *

Тәпәй-тәпәй итә ул,
Минең янға етә ул,
Шунан үтеп китә ул[6].

* * *

Эт балығы ҡайҙа?
Эт балығы ҡайҙа?
Эт балығы һыуҙа[7].

* * *

Кил әле, кил әле,
Килә алаһың микән?
Ҡамыт аяҡтарың менән
Баҫа алаһың микән?[8]

* * *

Бәләкәй генә, ҡыуаҡ ҡына,
Ҡыуаҡ аҫты һаҙ ғына,
Бөҙрә сәсле ҡыҙ ғына,
Кил уйнайыҡ аҙ ғына![9]

* * *

Тыпыр-тыпыр, ҡарлуғас,
Ҡунаҡ килһә, ҡаҙан аҫ,
Ҡунаҡ яңғыҙ ашамаҫ,
Үҙемдең дә ҡарыным ас[10].

* * *

Йүгереп китерҙәй булдым,
Иҙәндең арғы башына
Барып етерҙәй булдым[11].

* * *

Имгәкләү туйҙырғандыр,
Тороп баҫты бөгөн бала.
Күрәләрме тигән кеүек,
Тирә-яҡҡа ҡарап ала.
Күҙкәйҙәре уттай яна,
Бәхет иле асҡанмы ни,
Тормошона ғорурланыу —
Айға менеп баҫҡанмы ни?
Был урында башлана бит
Маҡсатыңа илтер юлың:
Терәк булһын тыуған ерең,
Ныҡ баҫып тор, әйҙә, улым![12]

## Баланы кейендергәндә

Ҡайтам-ҡайтам,
Ҡайҙа минең пәлтәм?
Ҡайҙа минең бейәләйем,
Кемдәргә әйәләйем?[1]

* * *

Ҡайҙа минең ҡатам?
Килтерегеҙ, ҡайтам!
Ҡайҙа минең бейәләйем,
Кемдәргә әйәрәйем?![2]

* * *

Аҡ ҡына бейәләй,
Күк кенә бейәләй.
Ҙур үҫкәс тә сығып китеп,
Әллә кемгә эйәләй[3].

* * *

Әйҙә-әйҙә, барабыҙ,
Кәпәсте лә алабыҙ.
Быйманы ла кейәйек,
Төймәләрҙе эләйек[4].

## Баланың телен асырғанда

Ат, атай, тип әйт,
Әтәс ҡойроғо бирәм.
Әс, әсәй, тип әйт,
Әтәс кикереге бирәм.
Әб, әбей, тип әйт,
Әфлисун бирәм.
Ап, апай, тип әйт,
Ал алма бирәм.
Тешеңә йомшаҡ булыр[1].

* * *

Егете егет икәндер,
Бүрке бәрхәт икәндер,
Был егеттең берҙер һүҙе
Шәкәр-шәрбәт икәндер[2].

* * *

Сәп-сәп ит, бала, сәп-сәп ит,
Сәп-сәп иткәс, үҫеп кит,
Сәп-сәп ит тә йөрөп кит,
Белгәнеңде һөйләп кит![3]

## Бармаҡтар менән уйнағанда

Ҡарға килгән — ҡаҙан аҫҡан,
Сыпсыҡ килгән — бәрәңге әрсегән,
Торна килгән — ҡамыр баҫҡан.
Боғор-боғор аш бешкән.
Сыйырсыҡ килгән — аш бушатҡан,
Төйләгән килгән — бүлгән,
Быға (баш бармаҡҡа) биргән,
Быға (имән бармаҡҡа) биргән,

Быға (урта бармаҡҡа) биргән,
Быға (атһыҙ бармаҡҡа) биргән,
Ә быға (сәтәкәй бармаҡҡа) бирмәй ҡалдырған.
Кетер, кетер, кетер,
Ҡаҙан төбөн кимер...[1]

* * *

Һәр бармаҡты бөгөп:
Баш бармаҡ бау ишә,
Имән бармаҡ имән киҫә,
Урта бармаҡ утын яра,
Атһыҙ бармаҡ ат ҡыуа,
Сәтәкәй бармаҡ сәй эсә[2].

* * *

Һәр һүҙҙе бер бармаҡҡа тура килтереп:
— Бер, тинем ике, тинем, өс,
Өстән алып дүрт, тинем, биш.
Ниңә улай бармаҡтарың бишәү генә?
Бала бармаҡтарын үҙе һанай — ун килеп сыға[3].

* * *

Бут-бут, бутырған,
Илнур бутҡа бешергән.
Эсенә сысҡан төшөргән;
Уны алайым тигәнсе,
Биш бармағын бешергән.

Һәр бармаҡ, ғаилә ағзаларына арналып, бөгөлә:

— Быныһы — олатайға, быныһы — өләсәйгә, быныһы — атайға, быныһы — әсәйгә, быныһы — ағайға, быныһы—апайға...

Баланың усы йомола.

— Ҡайҙа ҡаҙан төбөн ҡырып ашайым, кетер-кетер-кетер,— тип ҡытыҡлап, баланың усын астыралар.

Бала: «Әсәй, быҙауға барам»,— ти.

Әсәй: «Зәп-зәп, зәп-зәп...» — тип, баланың ҡулы буйлап ҡултыҡ аҫтына табан бармаҡтарын йүгертә һәм ҡытыҡлай.

Варианты: Һәр бармаҡ ғаилә ағзаларына арналып бөгөлгәс, түбәндәгесә лә әйтәләр:

«Ә Илнурға тигәне ҡыты-ҡыты, инеп киткән. Тот, тот, тот!»[4].

* * *

Баш бармаҡ: «Бутҡа бешерәйек»,— ти.
Имән бармаҡ: «Ярма ҡайҙан алайыҡ?» — ти.
Урта бармаҡ: «Үтескә алып торайыҡ»,— ти.
Исемһеҙ бармаҡ: «Уны ҡасан түләрбеҙ?» — ти.
Кескәй бармаҡ: «Ашайыҡ та ҡасайыҡ»,— ти[5].

* * *

Баш бармаҡ: «Бөгәм дә бөгәм».
Күрһәткес: «Сүгәм дә сүгәм».
Урта бармаҡ: «Сигәм дә сигәм».
Бәпес бармаҡ: «Арағыҙҙа тик бер үҙем интегәм»[6].

* * *

Баш бармаҡ башҡа сыҡҡан,
Имән бармаҡ ир булған,
Сығанаҡ бармаҡ сығып ҡасҡан,
Һуҡ бармаҡ өҙә һуҡҡан,
Сәтәкәй бармаҡ сәпәкәй иткән[7].

* * *

Баш бармаҡ баш ҡашый,
Имән бармаҡ имән ташый,
Урта бармаҡ утын яра,
Атһыҙ бармаҡ ат ҡыуа,
Сәнсә бармаҡ сәй эсә[8].

* * *

Баш бармаҡ — урта тирәк,
Сорағай өйрәк, бәләкәс кенә бәпәй.
Бынауында бер бот, бынауында бер бот.
(бармаҡтарын берәм-берәм тотоп бөкләйҙәр)[9].

* * *

Бер тинек — бөрмәк,
Ике тинек — икмәк,
Өс тинек — өсмәк,
Дүрт тинек — дүртмәк,
Биш тинек — бишмәк,
Алты тинек — алмаҡ,
Ете тинек — етмәк,
Һигеҙ тинек — һигеҙмәк,
Туғыҙ тинек — туғыҙмаҡ,
Ун тинек — уймаҡ.

Ул уймаҡты ҡаҙға бирҙем. Ҡаҙ миңә йомортҡа бирҙе. Ул йомортҡаны утҡа һалдым. Ул шатыр-шотор яна ҡалды. Үҙем киттем Әтнәгә. Ҡаҡтым-һуҡтым, биш бармағым йәнселде. Кете-кете-кете...[10].

* * *

— Биш бармаҡ, балан үрҙәк,
— Төрлө термәк, серле сермәк,
— Бына май бар ине, кем ашаған?
— Бесәй ашаған.
— Бесәй ҡайҙа киткән?

— Бесәй һалам аҫтына кереп киткән.
— Һалам ҡайҙа киткән?
— Үгеҙ ашаған.
— Үгеҙ ҡайҙа киткән?
— Һыу эсергә киткән.
— Һыу ҡайҙа киткән?
— Һыу тирмәнсегә киткән.
— Тирмәнсе ҡайҙа киткән?
— Тирмәнсе тимерсегә киткән.
— Тимерсе ҡайҙа киткән?
— Тимерсе күмерсегә киткән.
— Күмерсе ҡайҙа киткән?
— Күмерсе көл булып осҡан да киткән[11].

* * *

Әбей бутҡа бешергән,
Эсенә сысҡан төшөргән,
Уны алам тигәнсе
Биш бармағын бешергән
(бармаҡтарҙы берәмләп бөкләп),
Атаһына, әсәһенә, ағаһына,
апаһына, һеңлеһенә.
Үҙе быҙау ҡыуа киткән.
Безәү, безәү, безәү.
Ҡайтҡан да, әсәһенә:
— Әсәй, миңә бутҡа һалдыңмы?
Әсәһе: «Ҡалды, ана, ҡаҙан төбөндә,
ҡыр», — тигән.

Был ҡаҙан төбөн ҡыра башлаған. Ҙур сысҡан килеп сыҡҡан да йүгереп киткән: «Ҡытый-ҡытый, ҡытый-ҡытый», — тигән. (Баланы ҡытыҡлайҙар)[12].

* * *

Бытыр-бытыр бутҡа бешә,
Уртаһына май төшә,
Килгән ҡунаҡ беҙгә төшә,
Беҙгә төшмәй кемгә төшһөн,
Беҙҙә майлы бутҡа бешә.
Әбей бутҡа бешерә,
Бабай ашап бөтөрә,
Һап! һап! һап![13]

* * *

Баланың ҡулын усыңа һалып, һыйпап һамаҡлайһың:
Бесәй, бесәй! К(е)ләткә инмә, һөттө эсмә, бал ашама, май ашама, балды урлама, брыс! — тип баланың ҡулына һуғаһың, «брыс» тигәс, бала тиҙ генә ҡулын тартып алып өлгөрөргә тейеш![14]

* * *

Бесәйем, бесәйем, бесәйем (ҡулының һыртын
иркәләп кенә һыйпайһың).
Һөттәреңде урлап эсәйем (баланың
ҡулына иплэп кенә һуғаһың, ул алып өлгөрөргә тырыша)[15].

* * *

— Әлли-бәлли, семтесәле,
Ултырғандар санаға,
— Әлли-бәлли төшөп ҡалған —
Кем ултырған санаға?
— Семтесәле, семтесәле (семтейҙәр).
— Әлли-бәлли, әлли-бәлли (баланың башын
ике яҡҡа сайҡайҙар)[16].

* * *

Баланы арҡаға һалып уйнағанда:
Та-уа-ар, та-уа-ар, тауар,
Ба-ҙа-ар, ба-ҙа-ар, баҙар,
Кит-те-ем, кит-те-ем, киттем.
А-ла-ам, а-ла-ам, алам.
— Нимә алаһың?
— Баҙарҙан тауар алам.
— Ниңә алаһың?
— Күлдәк тегәм, ыштан тегәм...[17]

* * *

Ҡарға, ҡарға!
Ҡара, ҡарға,
Аҡ ҡарға.
Ҡара ҡарға һикереп уйнай,
Аҡ ҡарға ырғып уйнай[18].

* * *

Ҡарға, ҡарға,
Ҡара ҡарға.
Аҡ ҡарға, ҡара ҡарға,
Шул ҡарғаны тотор өсөн
Тәгәрә, әйҙә, ҡарҙа![19]



*Әпсен-төпсөн,*
*Бесәй үпһен...*

## АРБАУҘАР, ИМЛӘҮҘӘР

### Күҙ тейеүҙән

Яман күҙ кире кит,
Сиреңде алып кит.
Йәненә янау бир,
Әжәлгә дарыу бир,
Ауырыуға сихәт бир[1].

* * *

Тфү-тфү, күҙ тейһә, сығып осһон,
Баламдан сығып ҡасһын[2].

* * *

Һәр йәш бала күҙ тейеп илаһа, уны мышар менән ыҫлайҙар:
Күҙҙәренең ағыуҙары китһен,
Күҙҙәренең ағыуҙары китһен[3].

**Бала сирләһә**

Яман сир ҡас, ҡас,
Килтер ҙур тас.
Мин һине ярайым,
Уттарға һалайым.
Баламды азат ит,
Йортомдо ташлап кит[4].

* * *

Иҫке ауыҙ, яңы аш,
Яман ауырыу минән ҡас[5].

* * *

Бәниәте шифа булһын,
Шайтандарға яфа булһын[6].

* * *

Ашап ултырғанда эс ауыртып китһә:
— Эсем, эсем ауыртма,
Бер һыйпайым, ике һыйпайым[7].

* * *

Аяҡты бәргәндә:
— Аяғымды ташҡа бәрҙем,
Инна-анна, кати-катика[8].

* * *

Йығылғанда шул ерҙе аяҡ менән өс тапҡыр баҫып:
— Тфү-тфү-тфү,
Шайтан миңә ҡағылма,
Ана, елгә ҡағыл[9].

* * *

Әпсен-төпсөн,
Бүрәнә ҡыҫһын,
Ҡаны сыҡһын,
Ныгыраҡ ауыртһын,
Тфү-тфү-тфү![10]

* * *

Тфү-тфү-тфү,
Ергә ауырлыҡ,
Миңә еңеллек[11].

**Ҡурҡыуҙан. Ҡот ҡойоу**

Аҡ ҡурғашты алалар ҙа, бер һауытҡа һалып иретәләр, шунан һыуыҡ һыуға ирегән ҡурғашты һалалар. Һыуыҡ һыуҙа аҡ ҡурғаш бер рәүешкә әйләнә, мәҫәлән, бесәй йәки эт, һыйырға оҡшарға мөмкин. Шунан, бала ошонан ҡурҡҡан, тип әйтәләр[12].

* * *

Алпамыша — минең улым,
Алпан-толпан килә ул.
Ҡуш йөрәкле бала ул,
Ҡурҡыуға ҡаршы бара ул[13].

* * *

Айыу китте, ҡара айыу китте,
Минең улым килде.
Батырлыкты алды,
Илендә даны ҡалды[14].

* * *

Ҡуш йөрәк, бул терәк,
Ҡурҡаҡ йәнде ҡыу йыраҡ[15].

* * *

Ҡуш йөрәк, урың ал,
Ҡурҡаҡ йөрәк, ситкә юл ал![16]

* * *

Тәнемде һыу һаҡлаһын,
Йәнемде иманым һаҡлаһын[17].

* * *

Йөрәкте, күкрәк менән арҡанан бер юлы ҡуш ҡуллап һапылдатып ҡағалар һәм түбәндәгесә һамаҡлайҙар:

Йөрәгең менән тоя бел,
Йөрәгең менән һиҙә бел,
Йөрәгең менән күрә бел,
Йөрәгең менән һөйә бел
Илеңде, халҡыңды, һыуыңды —
Һап, һап, һап, һап![18]

* * *

Ҡуй, алама,
Бүре йыҡҡыр,
Айыу ҡырғыр[19].

Һары майҙы алайыҡ,
Бәпкәйемде һылайыҡ[20].

Беренсе тапҡыр һыу ингәндә:

Һыу мине тотма,
Ана ошо епте тот (күлдәк, яулыҡтарҙан һүреп алып, һүрентене ағыҙып ебәрәләр)[21].

## Һөйәлде арбау

Ай, ҡайҙа һинең сөйәлең?
Бына минең сөйәлем[22].

* * *

Һап, һоп, һап, һоп,
Ай нуры, мине йот.
Инде мин юҡ[23].

* * *

Ай, һинең тәтәйең бармы?
Минең бар.
Һиңә лә кәрәкме?— тип, төнөн кәмеп барған айға күрһәтәләр[24].

* * *

Ай, ҡайҙа һинең тәтәйең?
Бына минең тәтәйем.
Һинең тәтәйең булмаһа,
Мә, ал, минең тәтәйем[25].

* * *

Бармаҡтағы сөйәлгә ҡарата:

— Ай, һинең тәтәйең бармы?
Минең тәтәйем бар (3 тапҡыр әйтелә)[26].

* * *

Һөйәл сөрөккә сыҡһын,
Сөрөк дүңгәккә сыҡһын!
Һөйәл сөрөккә сыҡһын,
Сөрөк дүңгәккә сыҡһын![27].

* * *

Им-им, имрәлин,
Имләмәһәң, мөһрәмин.
Им-им, имрәлин,
Имләмәһәң, мөһрәмин[28].

* * *

**Арпа тертеү**

Күҙгә арпа сыҡҡанда; арбайҙар:

Арпа тертәм, ни тертәм,
Арпа тертәм, ни тертәм.
Арпа-керпә, минән еркә,
Арпа-керпә, минән еркә.
Һин тирһегән булһаң,
Мин ирһегән!
Ай ҙа бетә, һин дә бет,
Ай ҙа бетә, һин дә бет,
Ай ҙа бетә, һин дә бет![29]

* * *

Арпа-керкә,
Минән еркә.
Мә, һиңә, мә һиңә,— тип терткесләйҙәр[30].

* * *

Арпа-тарпа, ҡоронан ҡурҡа[31].

* * *

Арпа, мәмәлек,
Ҡайҙан килдең шунда кит.
Һейле-һейле тауҙарға кит,
Һыйыр имсәкле ҡыҙҙарға кит,
Һыуҙың ағышына кит,
Ҡояштың батышына кит.
Ҡайҙан килдең шунда кит[32].

* * *

Әпсен-тепсен,
Бесәй үпһен.

* * *

Арпа мәлек, мә мәлек,
Арпа мәмеш, мә мәмеш,
Арпа мәнеш, мә күкеш[33].

* * *

Эткә сыҡ,
Эткә лә сыҡмаһаң,
Кене-тене йоҡлаған
Бесәйгә сыҡ![34].

### Тимерәүгә әйтеү

Им-им имрәмү,
Фәһеннәмү тимрәмү.
Им-им имрәмү,
Фәһеннәмү тимрәмү[35].

### Теш ҡортона өндәшкәне

Баланың теше һыҙлаһа, ололар уны алдына һалып, яңағынан һыйпай-һыйпай, шулай тип һамаҡлайҙар:

Төш, төш, теш ҡортом,
Төш, төш, теш ҡортом!
Айыры ҡойроҡ атаһы,
Ҡуйы саллы инәһе
Төш, төш, теш ҡортом!

Бала теше һыҙлауын онотоп, рәхәтләнеп ойоп йоҡлап китә[36].



*Баç, баç эҙенә,*
*Күҙ теймәһен үҙенә.*
*Йәшел сиҙәм үçеп бара*
*Аяҡ баçҡан эҙенә.*

## БЕЙЕҮ ТАҠМАҠТАРЫ

### Баланы сәпәкәй иттергәндә

Деңки-деңки дең һары,
Атаһы кеүек һап-һары.
Һары булһа һандуғас,
Ҡара була ҡарлуғас.
Ғалим килһә, ишек ас,
Наҙан килһә, сығып ҡас!
Ғалимдарҙың ҡулында
Ҡәләм менән хат булыр.
Наҙандарҙың ҡулында
Көрәк менән сүп булыр[1].

* * *

Атаһына ай кеүек,
Әсәһенә көн кеүек,
Апаһына гөл кеүек,
Бабаһына туп кеүек,
Килеп-киткән кешеләргә,
Сүп ҡәҙәр ҙә юҡ кеүек[2].

* * *

— Бабаһының кеме был?
— Тауға менәр таяғы.
— Әбейенең кеме был?
— Һөт өҫтөндә ҡаймағы[3].

* * *

Осоп бара бер себен, сәп!
Ҡасып бара бер себен, сәп!
Бында бер серәкәй,
Бында бер күгәүен,
Ләпәк, ләпәк,
Сәп, сәп, сәп[4].

* * *

Сәпәкәй ҡағыр ҡыҙҙары,
Ауыртмаһын ҡулдары.
Билдәренә таянып,
Бейеп китәр улдары.
Ауыртһа ла ауыртһын,
Ҡул сапҡандың ҡулдары[5].

* * *

Сәпәк, сәпәк, сәпәкәй,
Бейетеп тора әсәһе,
Таҡмаҡ әйтә апаһы,
Өҙөлөп тора атаһы[6].

* * *

Сәптиләк, сәптиләк,
Сәптиләккә, кем кәрәк?
Атаһы бар, әсәһе бар,
Шунан башҡа кем кәрәк.

Сәп-сәп, сәпәкәй,
Майға бешкән әпәкәй.
Бик тә етеҙ, бик тә сос
Бейей икән сәтәкәй[7].

* * *

Сәпәк-сәпәк, сәптеки,
Түбән ауыл Әптеки.
Әптекиҙең ҡыҙылыр,
Суҡлы балаҡ Ҡәтенки.
Сәпәк-сәпәк атаһы,
Бейетеп тора әсәһе.

Ошоға ҡәнәғәт булып,
Сәпәкәй итә бәпкәһе[8].

* * *

Әлли ит, бәлли ит,
Әлеш-бәлеш!
Ҡандалаға һалма,
Ҡыҙыма алтын алма[9].

## Бейеү таҡмаҡтары

Әттә түҙер түҙәле,
Гармунсығыҙ өйҙәме?
Өйҙә булһа, килһен әле,
Бейетеп китһен әле[10].

* * *

Бейеһәнә, бейеһәнә,
Бейеүҙәрең күңелле.
Һин күңелле бейегәнгә,
Таҡмаҡ әйтәм түгелме?

* * *

Бейеһәнә, бейеһәнә,
Бейеүҙәрең килешә.
Һинең кеүек зифа, матур
Мораҙына ирешә.

* * *

Һип, һип һуғанға,
Теймә беҙҙең туғанға.
Беҙҙең туған матур булған
Ҡашы ҡара булғанға.

* * *

Баҫ, баҫ эҙенә
Һүҙ теймәһен үҙенә.
Йәшел сирәм үҫеп бара
Аяҡ баҫҡан эҙенә[11].

* * *

Баҫ, ҡыҙым, Әпипә,
Һин баҫмаһаң, мин баҫам.
Һинең баҫҡан эҙҙәреңә
Мин дә килтереп баҫам[12].

* * *

Баҫ, ҡыҙым, Хәтифә,
Һындыр иҙән таҡтаһын.
Һындырһаң иҙән таҡтаһын,
Кейәү түләр аҡсаһын[13].

* * *

Селтәр икән яғаһы,
Бигерәк матур тәңкәһе,
Аҡҡош микән, былбыл микән,
Уны тапҡан әсәһе[14].

* * *

Минең ҡыҙым бик иркә
Баштарында кәсинкә.
Күлмәге лә сәрпинкә,
Аяғында бәтинкә,
Алтын сәсле, зәңгәр күҙле
Ҡойоп ҡуйған кәртинкә[15].

* * *

Атаһы дегет силәге,
Әсәһе күмер силәге,
Унан тыуған балаһы
Бешкән ҡурай еләге[16].

* * *

Балам бейей, ҡарағыҙ,
Кеҫәгеҙҙе ҡағығыҙ.
Кәнфитегеҙ булмаһа,
Магазиндан алығыҙ.

Тыпыр-тыпыр бейейҙер,
Аяғы ергә теймәйҙер.
Осҡан ҡоштай талпына,
Ҡанаттарын ҡағына,
Һәйт, һәйт, һәйт![17]

* * *

Тикер-тикер йөрөһөн,
Дегәнәк тә теймәһен.
Күп кешеләр быны һөйһөн,
Күҙ ҙә уға теймәһен[18].

* * *

Ҡыҙҙары ҡыҙыл аҡса;
Малайҙар яры тоҡса.
Кәртә тулы мал булһын,
Кеҫәлә тулы аҡса[19].

* * *

Тыпыр-тыпыр бейейҙер,
Аяғы ергә теймәйҙер.

Осҡан ҡоштай талпынып,
Ҡанаттарын ҡағынып,
Һып, һып, һып![20]

* * *

Алабуға бей балыҡ,
Ҡайҙа икән суртаны?
Бейеп йөрөй Бикәһе,
Ҡайҙа икән Солтаны[21].

* * *

Деңке-деңке ҡыҙым бар,
Алты баҫма ебем бар.
Яусы килһә, миңә килһен,
Бөҙрә сәсле ҡыҙым бар[22].

* * *

Бейетәбеҙ беҙ аны,
Бейетәбеҙ беҙ аны.
Үҙебеҙҙең ауылға
Килен итәбеҙ аны[23].

* * *

Ала болан балаһы,
Ҡола болан балаһы.
Әллә кейәүгә китәһе
Әллә бында ҡалаһы[24].

* * *

Бейе ҡыҙым, бейе ҡыҙым,
Бейеүсегә бирермен.
Бейемәһәң, бәпескәйем,
Көтөүсегә бирермен[25].

* * *

Бейе-бейе, бейе ҡыҙым,
Бейеүсегә бирермен.
Һоро бесәй тиреһенән
Ҡата тегеп бирермен[26].

* * *

Ҡулдар сабып алҡышларға,
Дуҫтар, булығыҙ әҙер.
Бына тигән бейеүсебеҙ,
Бейергә төшә хәҙер.

* * *

Тарт ҡурайың, уйнаһын,
Ҡан тамырҙар буйлаһын.
Дәрте барҙар бойоҡмаһын,
Бейеп-йырлап уйнаһын.

* * *

Бейей белгән ҡыҙҙарҙы
Алмағастан яһаған.
Бейей белмәгәндәрен
Йүкә ағасынан яһаған.

* * *

Ишектән инеү генәһе,
Бейеп китеү генәһе.
Ҡулъяулығын ҡулына тотоп,
Хөрмәт итеү генәһе.

* * *

Бейе, бейе тигән була,
Бейеп булыр тиһеңме?
Аяҡ ҡыҙып алды ниһә,
Ҡуйып булыр тиһеңме?

* * *

Аҡ ҡуяндың балаһы,
Ебәрегеҙ, уйнаһын.
Уйнап-бейеп йөрөгәнде
Ғәйепләүсе булмаһын.

* * *

Баҫ, баҫ, баҫ эҙенә,
Күҙ теймәһен үҙенә.
Фәрештәләр ҡанат йәйә
Һинең баҫҡан эҙеңә.

Әйҙә йырла, әйҙә бейе,
Матур бейеп күңел ас.
Ниңә беҙгә шатланмаҫҡа
Тормош күңелле булғас.

* * *

Бибикамал, Гөльямал,
Миңлебикә, Миңъямал.
Әйҙә беҙгә дүртәү-бишәү,
Дөбөрләтеп бейеп ал[27].

* * *

Зилем, Зилем, Зиләйлүк,
Зилдәр итә Зиләйлүк.
Зиләйлүктең биле нәҙек,
Ҡулдарында беләҙек[28].

* * *

Аҡ май, һары май,
Беҙҙең ҡыҙҙар арымай.
Беҙҙең ҡыҙҙар арыр ине,
Ашағаны һары май[29].

* * *

Наза, Наза,
Наза матур ҡыҙ бала.
Наза бейей, Наза көлә,
Наза матур ҡыҙ бала.

* * *

Иҙәнегеҙ түңәрәк,
Оса һары күбәләк.
Иҙәндәрҙә бейеп йөрөй
Алма кеүек тәгәрәп[30].

* * *

Әллә кемдең ҡыҙ ғынаһы
Бейеп йөрөгән була.
Йөҙө-башы, һынылышы
Көлөп йөрөгән була[31].

* * *

Баҫ, баҫ, баҫ әле,
Һығылһын иҙәндәре.
Һинән матур бейегәнде
Юҡ әле күргәндәре[32].

* * *

Бейеүсенең итәгенә
Дегәнәктәр йәбешкән.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Яңы бейергә төшкән[33].

* * *

Бейеүсенең итәгенә
Алма биҙәге төшкән.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Яңы бейергә төшкән[34].

3 Заказ 605

* * *

Тәҙри ритти-риттәрәм,
Һәҙри риттә-риттәрәм.
Тәҙри риттә-риттә-риттә,
Һәҙри риттә-риттәрәм.

* * *

Титтеү тәрә, титтеү тәрә,
Тәрә, тәрә, тәрә титтеү.
Титтеү, титтеү, тәрә титтеү,
Тәрә, тәрә, тәрә титтеү[35].

* * *

Ай иләүе, иләүе,
Ҡырмыҫҡаның иләүе.
Тыпырлатып баҫып килә
Әллә кемдең кейәүе?[36]

* * *

Бейе, бейе, бейе, Дәүләт,
Бер бейеүең бер дәүләт.
Яңғыҙ бейеү яйһыҙ булһа,
Әйҙә төштөк икәүләп[37].

* * *

Бейе, егет, бейе, егет,
Итектәрең туҙмаһын.
Эшлә егет, бейе егет,
Ғүмерең әрәм уҙмаһын.

* * *

Эй, бейеүсе, бейеүсе,
Дағалы итек кейеүсе.
Дағалы итек кейеүсене
Барҙыр әле һөйөүсе.

* * *

Бейе, бейе, Хәйбулла,
Бейегән кеше бай була.
Бейегән кеше бай булһа ла
Кеҫә яғы һай була[38].

* * *

Улым, улым, уламан,
Улыма мин ҡыҙ алам.
Уның күңеле була ла
Минең киленем була[39].

* * *

Был кем улы, кем улы?
Яғалары ҡайыулы.
Торһа, урыны йыйыулы,
Ятһа — урыны йәйеүле,
Кесәһендә ҡулдары.
Тау аҫтында юлдары,
Шул юлдарҙан үткәндә,
Ҡарап ҡала ҡыҙҙары[40].

* * *

Бейеһен дә, бейеһен дә,
Бейек тауға менһен дә.
Нәҙек итек кейһен дә,
Ҡыҙҙар уны һөйһөн дә![41]

* * *

Деңке-деңке деңләһен,
Быны ҡыҙҙар өндәһен.
Был бармаһын, наҙланһын,
Ҡыҙҙар эсе ут янһын[42].

* * *

Улдары, улдары,
Гармун уйнар ҡулдары.
Әсәләре һөймәһә лә,
Һөйөр әле ҡыҙҙары[43].

* * *

Деңки-деңки деңләһен,
Ҡыҙҙар һине өндәһен.
Был бармаһын, наҙланһын,
Ҡыҙҙар күңеле ут янһын[44].

* * *

Һалдат итеп алһалар ҙа
Быуҙырма билдәреңде.
Ҡара сәсең ағарһа ла
Онотма илдәреңде[45].

* * *

Баҫ, баҫ, өҙә баҫ,
Иҙәндәре һелкенһен.
Йоҡларға уйлағандарҙың
Йөрәктәре елкенһен[46].

* * *

Баҫ, баҫ, һындыра баҫ,
Һындыра баҫ таҡтаһын.
Һындыра баҫһаң таҡтаһын,
Атаң түләр аҡсаһын[47].

* * *

Бейе әйҙә, бейе әйҙә,
Бейеүеңә бер тауыҡ.
Ул да булһа һауым тауыҡ —
Һөтөн эсәрһең һауып[48].

* * *

Уртала баҫып торағыҙ,
Әйләнмәйме башығыҙ?
Әйләнһә лә башығыҙ,
Бейей-бейей баҫығыҙ[49].

* * *

Балам бейей, бағығыҙ,
Кеҫәгеҙҙе ҡағығыҙ.
Кәнфитегеҙ булмаһа,
Магазиндан алығыҙ[50].

* * *

Шыу, шыу, шыу, аяҡ,
Шыуып китте был аяҡ.
Шыуып-шыуып йөрөй торғас,
Бейеп китте был аяҡ[51].

* * *

Тырышһаң, һин табырһың,
Ташҡа ҡаҙаҡ ҡағырһың.
Тырыш әле, и балам,
Ҡара көндәр ағарһын[52].

* * *

Бейеүселәр, бейегеҙ,
Матур беҙҙең көйөбөҙ.
Бейегеҙ ҙә бейегеҙ,
Матур беҙҙең көйөбөҙ[53].

* * *

Әйҙә баҫайыҡ әле,
Бергә баҫайыҡ әле.
Бейейек тә йырлайыҡ,
Күңел асайыҡ әле[54].

* * *

Бейе эйҙә, бейе эйҙә,
Бейегәнең юҡ әле.
Бейегәнең булмаһа ла
Оҫта баҫаһың әле[55].

* * *

Бейе, бейе, бейеүсе,
Иҙән буйлап йөрөүсе.
Бейеүсегә һүҙ әйтмәгеҙ,
Бейеүсе шәп — беренсе![56]

* * *

Тау башында тары,
Яп(ы)рағы һары.
Төш тә бейе, төш тә бейе,
Таҡмаҡ әйтербеҙ тағы[57].

* * *

Анда баҫа бейеүсе,
Бында баҫа бейеүсе.
Беҙҙең бейеү көйҙәренә
Өҙә баҫа бейеүсе[58].

* * *

Шипа тауышы килә,
Шипа тауышы килә.
Быйма кейеп бейеһә лә
Итек тауышы килә[59].

* * *

Тыпыр-тыпыр ҡарлуғас,
Ҡунаҡ килһә, ҡаҙан аҫ.
Ҡунаҡ яңғыҙ ашамай,
Үҙемдең дә ҡарыным ас[60].

* * *

Таянабыҙ бөйөргә,
Тотонабыҙ бейергә.
Тыпыр-тыпыр тыпырлашып,
Әйләнәбеҙ бит бергә[61].

* * *

Ары ҡайыш кибете,
Бире ҡайыш кибете.
Ана шулай оҫта була
Бай ауылы егете[62].



*Бәхетле, тәүфиҡле, оҙон ғүмерле бул!*

## ҠОТЛАУҘАР

Ғүмерең оҙон булһын,
Ебе көйләрәк булһын![1]

* * *

Ҡотло булһын күлдәгең,
Йылы тәнеңдә туҙһын.
Күлдәгең көйрәк булһын,
Ғүмерең оҙон булһын.
Бешеме? (Семтеп ҡарай.)[2]

* * *

Хәйерле булһын күлдәгең,
Ата-әсәле бул,
Бәхетле, тәүфиҡле,
Оҙон ғүмерле бул.

* * *

Ғүмерең оҙон булһын,
Кейемең көйрәк булһын,
Оҙон ғүмерле, мөхәббәтле,
Бәхетле, тәүфиҡле бул.

* * *

Хәйерле булһын күлдәгең.
Күлдәгең сүплек башына,
Үҙең кейәү ҡаршына[3].

* * *

Ҡотло булһын бейәләй,
Бар бабайға эйәләй,
Юҡ бабайға эйәрмәй.

* * *

Ҡотло булһын сабатаң,
Сабатала шәп атлаң.

* * *

Ҡотло булһын итегең,
Кейеп йөрө ике көн (икегөн)[4].

### Ҡыҙ бала көйәнтә алғанда

Сәскә атты минең гөләм,
Үҫеп ҡыҙ булып етте.
Инде хәҙер көйәнтә алып,
Тормош юлына баҫты.
Йәшел үлән, йәймә бул!
Һин, көйәнтә, йәйғор бул!
Ҡыҙым, ҡыҙсығым,
Донъя һылыуы бул!
Тирә-йүнгә нур һип!
Ата-инәңә ҡот һип![5]

### Уҡыусы балаларға

Күптән көтә башланым,
Һыуынып бөттө аштарым.
Баланы көтәм үҙем,
Мәктәп юлында күҙем.

Һабаҡтарын белһәләр,
Һуң ҡайтһа ла юҡ һүҙем.
Бер нәмә белмәй, тиерҙәр,
Эшкә төшөнмәй, тиерҙәр.

Өйөңә ҡайтып кит, тиерҙәр,
Уҡыуыңды бел, балам![6]

* * *

Эй, балалар, күрегеҙ,
Асыҡ булһа күҙегеҙ.
Мәктәпкә кереп килгәс,
Нисек булды күбегеҙ.
Ваҡыт үтеп еткәнсе
Тырышығыҙ үҙегеҙ.
Уҡып ғалим булһағыҙ,
Алтын булыр һүҙегеҙ.
Мәктәптәге ауырлыҡтың
Һәр ҡайһына түҙегеҙ,
Донъяға сығып киткәс,
Нурлы булыр йөҙөгөҙ[7].

*Ҡаҙ ҡанаты аҡ була,*
*Ир ҡанаты ат була.*
*Бала ҡанатланыр саҡ —*
*Мәктәп уҡыр саҡ була.*

# БАЛАЛАРҘЫҢ АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ ҮРНӘКТӘРЕНӘН



## ТЕЛ ТӨҘӘТКЕСТӘР

**Ижектәр уйнатып, шиғыр юлдары яһау**

Ва-ва-ва — тәгәрәй икән арба,
Ма-ма-ма — арбаға яҡын барма.
Һы-һы-һы — бигерәк матур арбаһы,
Лап-лап-лап — тыңғыр-тыңғыр йыр йырлап,
Һы-һы-һы — бараһы ла бараһы[1].

* * *

Ға-ға-ға — ҡарға килгән ҡарғаға,
Ға-ға-ға — ҡарғаларын ҡарарға.
Ға-ға-ға — киткән былар баҙарға,
Ға-ға-ға — майлы ҡалъя алырға,
Ға-ға-ға — ҡарғаларға һалырға,
Ға-ға-ға — ҡарға ҡарап ҡалырға.
Ға-ға-ға — алған улар ҡабырға,
Ға-ға-ға — етмәгән бер ҡабырға.
Ға-ға-ға — ҡарға ҡунған ҡарғаға,
Нан-нан-нан — һөйәк ҡалған ҡалъянан,
Ған-ған-ған — береһен-береһе ҡарғаған,
Лар-лар-лар — асыуланып ҡарғалар,
Ған-ған-ған — бер-береһенә бармаған[2].

* * *

Ға-ға-ға — әйҙә киттек урманға,
Шә-шә-шә — урманда еләк бешә.
Ле-ле-ле — ауыҙ итәйек әле,
Ге-ге-ге — ҡалай тәмле еләге[3].

* * *

Гә-гә-гә — кәзә килгән кәзәгә,
Ға-ға-ға — әләктем тим ҡазаға.
Ҙа-ҙа-ҙа — ҡойроҡ ҡалды ҡаҙауҙа,
Ға-ға-ға — ҡаҙау ҡалһын язаға.
Гә-гә-гә — әләктереп мөгөҙгә,
Гә-гә-гә — кәстә туккәндәр бергә.
Гә-гә-гә — мөгөҙ тейгән мөгөҙгә,
Гә-гә-гә — тәкмәс атҡандар ергә.

Ған-ған-ған — шартлап мөгөҙҙәр һынған,
Ған-ған-ған — тағы ла ҡаза булған.
Ған-ған-ған — кәрәк өсөн ҡағылған,
Ған-ған-ған — ҡаҙау һаман тик торған.
Мә-мә-мә — ҡысҡырғандар «мә-ә» лә «мә-ә»,
Мә-мә-мә — кәзә кеүек йөрөмә.
Мә-мә-мә — йөрөр булһаң күренмә,
Мә-мә-мә — бүтән минең күҙемә[4].

* * *

Да-да-да — ҡуян саба урманда,
Ды-ды-ды — иңләп-буйлап урманды.
Дә-дә-дә — барса бөжәк үләндә,
Ды-ды-ды — ҡуян күреп ҡыуанды[5].

* * *

Ҙа-ҙа-ҙа — ҡыҙҙар ҡиткән һуң ҡайҙа?
Ҙы-ҙы-ҙы — ҡаҙҙар йылғаға барҙы.
Ҙә-ҙә-ҙә — рәхәтләнеп эй йөҙә,
Ҙы-ҙы-ҙы — ҡыумағыҙсы ҡаҙҙарҙы[6].

* * *

Кәк-күк, кәк-күк — саҡыра кәкүк,
Рүк-рүк-рүк-рүк — туҡтама берүк.
Рәк-рәк-рәк-рәк — саҡыр шәберәк,
Кәк-күк, кәк-күк — ниндәй аяҙ күк[7].

* * *

Лы-лы-лы — соҡорло ла саҡырлы,
Ле-ле-ле-ле — урамдарың (э)Стәрле.
Лы-лы-лы — баш әйләнә, аҫмалы,
Ле-ле-ле — күперҙәрең селтәрле[8].

* * *

Ме-ме-ме — һеҙҙең быҙау һөҙәмә?
Ма-ма-ма — һөҙә икән алама.
Мы-мы-мы — көтөүгә ул барамы?
Мы-мы-мы — әллә өйҙә ҡаламы?
Ме-ме-ме — һине лә ул һөҙәме?
Мы-мы-мы — киреләнеп торамы?
Мө-мө-мө — мөгөҙҙәре бөтөнмө?
Мы-мы-мы — ҡойроҡ сәнсеп торамы?
Мы-мы-мы — юлын өйгә борамы?[9]

* * *

Ңө-ңө-ңө — ана айыуҙың өңө,
Нө-нө-нө — үкерә көнө-төнө.
Ңы-ңы-ңы — өңө уның өр-яңы.

Нө-нө-нө — тығылырмы икән өнө?
Нә-нә-нә — япраҡ өйә өйөнә.
Ңы-ңы-ңы — етер уянмаҫ таңы.
Нә-нә-нә — һунарсының күҙенә
Ғы-ғы-ғы — күренмәй йоҡлар тағы[10].

* * *

Өп-өп-өп — эттәр сабыша өрөп,
Өп-өп-өп — төндәр буйына йөрөп.
Эп-эп-эп — хужаһы еткән килеп,
Эп-эп-эп — эте икәнен белеп[11].

* * *

Рә-рә-рә — урман буйлап йүгерә,
Ра-ра-ра — ҡулын болғап саҡыра.
Рө-рө-рө — япраҡ ярған бөрө,
Рө-рө-рө — урманда тыныс йөрө[12].

* * *

Са-са-са — был бит беҙҙең Миңниса,
Се-се-се — Миңниса, ярҙам итсе.
Сә-сә-сә — әсәйең шалҡан сәсә,
Се-се-се — орлоҡтарҙы бирһәңсе[13].

* * *

Ҫа-ҫа-ҫа — ҡайһылай матур баҫа,
Са-са-са — тыпырлап күңел аса,
Са-са-са — дәртләндерәм: «Их, ас-са!»
Са-са-са — бейей шулай башҡортса[14].

* * *

Та-та-та — Талип тауыҡ ашата,
Ти-ти-ти — саҡыра, ти-ти-ти-ти.
Тә-тә-тә — күршенекен өркөтә,
Ти-ти-ти — йөрөмә бында, кит, ти.
Ты-ты-ты — күрше тауығы ҡурҡты,
Тө-тө-тө — кәртәнән осоп төштө.
Те-те-те — Талип тағы ем һипте,
Тө-тө-тө — Талиптың еме бөттө[15].

* * *

Уа-уа-уа — хуш еҫ бөркә яҙын һауа,
Уы-уы-уы — татлы шул шишмә һыуы.
Уа-уа-уа — үҙе инде бер дауа,
Уы-уы-уы — ялан буйлап атлауы[16].

* * *

Фа-фа-фа — тырышып яҙа Сафа,
Фе-фе-фе — кәкре-бөкрө хәрефе.

Фа-фа-фа — матур яҙыу бер яфа,
Фе-фе-фе — килә уның хәүефе.
Ҫа-ҫа-ҫа — ручканы ул баҫа,
Са-са-са — хәрефтәр унан ҡаса,
Фа-фа-фа — һаман тырыша Сафа.
Фе-фе-фе — матур сыҡты хәрефе,
Фе-фе-фе — күтәрелде кәйефе[17].

* * *

Ха-ха-ха — шаян инде Салиха,
Хи-хи-хи — көлә гел хи-хи, хи-хи.
Их-их-их — уға ҡушыла Салих,
Ха-ха-ха — тәгәрәп китә Фатиха,
Мәт-мәт-мәт — эсен тота Рәхмәт.
Мит-мит-мит — күҙҙәрен һөртә Хәмит,
Ха-ха-ха — улар көлә ха-ха-ха,
Мит-мит-мит — булды инде бер кәмит[18].

* * *

Һа-һа-һа — Һәҙиә айға осһа,
Һә-һә-һә — ракетала ул елһә,
Һы-һы-һы — бар бит кире ҡайтаһы,
Һе-һе-һе — ҡыуанысты бүләһе.
Һө-һө-һө — йыйылырҙар көлләһө,
Һе-һе-һе — ҡотлай башлар һәр береһе,
Һа-һа-һа — шунда байрам башланһа,
Һы-һы-һы — дуҫтарҙың һәр ҡайһыһы,
Һа-һа-һа — бар күңелдән шатланһа,
Һө-һө-һө — айға осҡандай булыр көлләһө[19].

* * *

Һең-һең-һең — ҡайҙан ҡайтып киләһең,
Һаң-һаң-һаң — ял итеп ал арыһаң.
Һәң-һәң-һәң — дәртле баҫып йөрөһәң,
Һәң-һәң-һәң — бөтә эшкә өлгөрһәң,
Һең-һең-һең — моратыңа етерһең[20].

* * *

Һы-һы-һы — был Һиҙиәт ҡустыһы,
Һе-һе-һе — кемдеке һуң бирәүһе.
Һен-һен-һен — танып алдым икәүһен,
Һөн-һөн-һөн — саҡырығыҙ өсөһөн,
Һе-һе-һе — нисә булды бөтәһе?[21]

* * *

Ша-ша-ша — Шакир шарға талаша,
Шы-шы-шы — ҡыҙыу уйын барышы.
Шә-шә-шә — малайҙар шар бәрешә,
Ше-ше-ше — уйнай ала һәр кеше[22].

* * *

Ыж-ыж-ыж — һыуыҡ әйтә: «Ыж-ыж-ыж»,
Аж-аж-аж — йүгереп йөрө, Ғилаж.
Жыу-жыу-жыу — елдәр әйтә: «Жыу-жыу-жыу»,
Шыу-шыу-шыу — Ғилаж, тауҙан шыу ҙа шыу,
шыу ҙа шыу[23].

## Һүҙҙәр менән уйнау

Бер үк өндән башланған һөйләмдәр уйлау:
Алмалар бешә. Ағастар япраҡ ҡоя.
Атайым эшкә бара. Ағайым армияла.
Ап-аҡ сәскәләр үҫә. Алтын ҡырҙар
йәйелгән. Аҡҡоштар китте[24].

* * *

Балалар баҡсаға бара. Бөтәһе лә бик шат. Бейәләй бик матур. Бәләкәс быйма аяҡты ҡыҫа. Бабайым быйыл пенсияға сыҡты. Бәпкәләр һыу буйына китте[25].

* * *

Бер һүҙҙе шәп ҡабатлап, икенсе һүҙҙе ишеттереү: абхаз — хазаб, аймаҡ - маҡай, айыу — йыуа, аҡбаш — башаҡ, алабута — бутала, артым — тымар, ауыл — ылау, йоҡо — ҡойо, ойоҡ — йоҡо, баҡа — ҡаба, майһыҙ — һыҙмай, кәнсә — сәкән, арба — бар, баҡса — сабаҡ, урам — амур, ем бирә — бирәйем, өйөр — йөрөй, май баҫ — баҫмай, ағай — аяҡ, торма — матур, алма — мал, ат ҡара — ҡарағат, тапар — парта, Байдәүләт — Дәүләтбай, сурман — Мансур, һәргәү — Гәүһәр, бертро — Роберт, симәнә — Нәсимә, һирта — Таһир һ. б.[26].

## Серле телдә һөйләшеү

Бөфөгөфөн һифен ҡафайҙафа бафарафаң? Мифен стәфәрлефәгә бафарафам.
Асҡысы: Бөгөн һин ҡайҙа бараң?
Мин Стәрлегә барам[27].

* * *

Һипин нипиндәпәй кипитапап упуҡыпыныпың?
— Мипин бипик ҡыпыҙыҡлыпы кипитапап апалдыпым.
Асҡысы: Һин ниндәй китап уҡының?
— Мин бик ҡыҙыҡлы китап алдым[28].

* * *

— Кифоға фафа фифкә фәфә фафаһыңмы фыфы?
—Һефлем фефе фофлағас фафа фафам фафа.
Асҡысы: — Киноға кискә бараһыңмы?
— Һеңлем йоҡлағас, барам[29].

* * *

— Бөфөн фөфө уфынға фафа сыфаһыңмы фыфы?
— Дәфесемде фефе әферләп фәфә бөфкәс фәфә сыфам фафа.
Асҡысы:
— Бөгөн уйынға сығаһыңмы?
— Дәресемде әҙерләп бөткәс, сығам[30].

* * *

— Һыудырмыш инергәндермеш ҡасандырмыш барабыҙҙырмыш?
— Ҡустымдырмыш әү(е)рәтендермеш йоҡлатҡандырмыш.
Асҡысы:
— Һыу инергә ҡасан барабыҙ?
— Ҡустымды әү(е)рәтеп йоҡлатҡас[31].

* * *

Бимин бибөбигөн биабуыілбиға биҡайбитып бикибитәм (Мин бөгөн ауылға ҡайтып китәм).

Бибөпитәпибеҙпиҙә пиборпигәпиләп пикиписен пиклубылҡа писыпиғырпибыҙ (Бөтәбеҙ ҙә бергәләп кисен клубҡа сығырбыҙ)[32].

### Рифмалап һүҙен тап

Егәрле —
Атың ҡайҙа, ек әле.
Күбәләк —
Әйләнәһең түңәрәк.
Әңгәмә —
Һөйләй күрмә еңгәмә.
Хәстәрле —
Китәм инде Эстәрле.
Ҡарағат —
Сәпкә төҙәп, ҡарап ат.
Ҡарлуғас —
Ҡайтырға сыҡ ҡар булғас.
Сыйырсыҡ —
Һә, тигәнсе осоп сыҡ.
Бураҙна —
Ашлығыңды ур аҙна.
Уҡыусы —
Булырһың һин туҡыусы.
Уйнаусы —
Төрлө төҫкә буяусы.
Балыҡсы —

. . . . . . . . . . . . . . . . . . .

Ҡурайсы —

. . . . . . . . . . . . . . . . . . .

Күгәрсен —

. . . . . . . . . . . . . . . . . . .[33]

* * *

— Был нимә?
— Шешә — иртәгә ҡулың шешә.
Суйын — иртәгә һинең туйың.
Һаумы — әллә һин быҙаумы?
Ҡуян — иртәгә кәзә һуям.
Ун ике — иң матур ҡыҙ минеке.
Иртәгә —... сыҡҡан кәртәгә.
Таба — иртәгә бала таба.
Шәпме — әллә һин ишәкме?[34]

* * *

Ҡайҙа? — Ҡайын башында,
Ҡайҙа? — Ҡая ташында,
Ҡайҙа? — Һинең башыңда,
Ҡайҙа? — Ҡасма ташында,
Ҡайҙа? — Ана ҡаршыңда,
Ҡайҙа? — Ҡыйғас ҡашыңда[35].

* * *

Нимә? — Икмәккә һылай торған нәмә.
Ҡайҙа киттең? — Ҡайын башына ҡаймаҡ ашарға.
Кем? — Кемдең үҙе, маңлайында дүрт күҙе[36].

* * *

Шунан? — Ултырған да шыуған,
Ҡайҙа? — Олотау аръяғында.
Кисә? — Кисәгесә.
Ҡасан? — Ҡасып тиҙәккә таянғанда[37].

* * *

Ҡуян — ботоңдан аҫып ҡуям,
Һөт — танауыңды һөрт.
Һалам — иртәгә баҙға һалам.
Шкаф — иртәгә һиңә штраф.
Наил — һин миңә надаил.
Ғаяз — буламы көн аяҙ?[38].

* * *

Кем? — Ҡойроҡло ен.
Ҡасан? — Баш ҡапҡаңды асам.
Кемдә? — Ҡойроҡло ендә.
Өйҙә? — Эленеп тора сөйҙә?[39].

* * *

— Һөйөнсө!
— Һөйөнсөһөнә уң ҡолағың үҙеңә.

— Һөйөнсө!
— Шатлыҡ тулы бер сеүәтә көйөнсә.
— Һөйөнсө!
— Бәхетең үсһен өйөңсә.
— Һөйөнсө!
— Һөйөнсөгә бер күлдәк,
Һөйөнөсөң әйт тиҙерәк[40].

* * *

— Туйҙым.
— Туйғаныңды ҡайҙан белдең?
— Ҡорһағымды күҙгә элдең?
— Нисек элдең?
— Күҙемә дүрт булып күренәһең,
Үҙең кәбәндәй күбенәһең[41].

* * *

— Туйҙым.
— Ашағаныңды ҡайҙа ҡуйҙың?
— Ҡайҙа тиеп һорап тора,
Әллә миңә кәзә һуйҙың?[42]

* * *

— Ниңә?
— Сәләм әйт ҡарт инәңә.
— Ниңә?
— Һимеҙ бото миңә.
— Ниңә?
— Ҡупырышың иңеңә.
— Ниңә?
— Әтәсте тауыҡ еңә.
— Ниңә?... Буялған еңеңә[43].

* * *

— Шулаймы?
— Ҡолағың урман булып шаулаймы?
— Былаймы?
— Әбейең бөгөн һыйлаймы?
— Тегеләйме?
— Күҙ йәшең түгелмәйме?
— Ошолаймы?
— Балаң бүреләй олоймо?
— Анаумы?
— Әллә маңҡа танаумы?[44]

* * *

— Мин уны беләм.
— Һин белгәнде ағайың киптереп элгән.

— Мин беләм.
— Икмәк телә үтмәҫ бысаҡ менән.
— Беләм.
— Беләгеңә тоҙ эләм.
— Беләм.
— Баҫа торған келәм.
— Беләм.
— Һынды ишек келәм[45].

* * *

— Шунан?
— Ултырған да шыуған.
— Шунан?
— Санаһы тишек булған.
— Шунан?
— Шыҡырлап туңған.
— Шунан?
— Кишер менән һуған.
— Шунан?
— Дыу килә ике бер туған[46].

* * *

— Ғәфү итегеҙ!
— Ғәфү итегеҙ менән үҙегеҙ һатыу итегеҙ.
— Ғәфү итегеҙ!
— Бешмәнеме итегеҙ?
— Ғәфү итегеҙ!
— Өрөп сыға этегеҙ[47].

## Өлгөр яуап табышыу

Ҡарап-ҡарап торған да
Әйткән, ти, урмансы:
— Бушатайым лутсы.
— Шунан.
— Ултырған да шыуған.

* * *

— Ни өсөн ер түңәрәк?
Ер түңәрәк шуның өсөн
Кешеләр йүгереп-йүгереп әйләнһендәр,
йөрөһөндәр, ситенә етеп ҡолап
төшһөндәр өсөн[48].

* * *

Ярамай — ярамайға ҡарамай.
Шунан — ултырған да шыуған.

торған дарыу Баймаҡта бөткән булған. Бөҙрә баш Барый Баймаҡтан ҡайтҡас, билсәнде бөтөрәм тип, баҡсаһына барған. Бөгөлөп-һығылып, бар белемен биреп, билсәнде ботарлай башлаған, бер бөгөлөп, бер эйелеп йөрөй торғас, бахыр Барый билен бөтөргән, билсәнде бөтөрөргә булыш тип, Баныуҙы саҡырған. Барый менән Баныу бөтөрөлөп-бөтөрөлөп билсән утағандар. Билсәнде бөтөрөрлөк булмаған. Бөҙрә баш Барый, бахыр Баныу был тиклем бөтөрөлгәнсе тип, бил яҙлыҡтырырға булған. Барыйҙың да, Баныуҙың да билдәре ҡатҡан, билһеҙ булып былар бөкрәйеп бер сәғәт ятҡан[15].

Һеҙҙең Зөфәр бөҙрә булһа,
Беҙҙең Зөһрә бөҙрә[16].

Беҙҙең үгеҙебеҙ үҙебеҙҙеке, мөгөҙө үгеҙебеҙҙеке. Һеҙҙең үгеҙегеҙ үҙегеҙҙекеме, мөгөҙө үгеҙегеҙҙекеме?[17]

Килгән Ғата, кейгән ҡата,
Урам буйлап ләстит һата,
Инде хәҙер көтөү ҡайта[18].

Ҡарға әйтә: ҡар-ҡар-ҡар,
Бында eләк бар-бар-бар,
Тик яланы тар-тар-тар,
Eләк өҫтө ҡар-ҡар-ҡар[19].

Аҡ ҡарға, ҡара ҡарға,
Ҡарға йыйылған ҡарға.
Аттым ҡарға, төштө ҡарға,
Аҡ ҡарға, ҡара ҡарға.
Шул ҡарғаны ҡарар өсөн
Ҡарға йыйылған ҡарға[20].

Ҡарамалылағы ҡара ҡашлы Ҡарағол ҡарттың ҡап-ҡара ҡаҙы ҡайҙалыр ҡасҡан[21].

Ҡарға, ҡарға, осоп кил, беҙгә яҙҙы алып кил. Бергәләшеп йөрөрбөҙ, тәмле бутҡа бирербеҙ. Уртаһына төшөп кенә май булып та ирербеҙ[22].

Ҡарамалы ауылы ҡара Ҡарағолға сана ҡарамалатырға биргәйнем. Ҡарамаланымы икән, ҡарамаламаны микән. Ҡарамалаһа ла, ҡарамаламаһа ла, ҡарамаламауына, ҡарамалауына ҡарамайынса ҡарап ҡына алып ҡайт әле[23].

Ҡара ҡарға ҡороған ҡарағайға ҡунды, ҡара ҡарғаның, ҡарға ҡарағас, ҡапыл ҡобараһы осоп, ҡороған ҡарағастың ҡап-ҡара ботағынан ап-аҡ ҡарға ҡап-ҡара ҡарға ҡоланы[24].

Мейес башында биш бесәй,
Биш бесәйҙең биш башы,

Биш бесәйҙең биш башына,
Емерелмәһен мейес башы[25].

Ҡап-ҡара ҡарағат ҡаптым, ҡап-ҡара ҡуңыҙҙан ҡотом ҡойолоп, ҡап-ҡара ҡарағат ҡыуағы аҫтына ҡастым, ҡарағат ҡыуаҡтары артынан ҡояшҡа ҡарап ҡаттым[26].

Ҡара ағай ҡарағай ҡырҡа,
Ҡырҡалаша ҡарағай.
Ҡырҡма, ҡара, йөҙөң ҡара
Ҡайт ҡалаңа, ҡара ағай[27].

Ҡаҙҙар ҡаңғылдашып
Ҡанат ҡағынды.
Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға
Ҡайтты тағы ла[28].

Ҡар-р-р, ҡар-р-р, ҡар-р-р!
Ниндәй ҡайғы бар? Бар?[29]

Күпер башында күк күркә,
Күк күркәгә кәрәк күп көрпә[30].

Күрше күркә Ҡәйүм күҙҙәрен ҡыҫа-ҡыҫа, ҡулын ҡаҡ маңлайына ҡуйып, күккә ҡарай-ҡарай ҡояштың ҡыҙарып күтәрелеүен, ҡып-ҡыҙыл нурға күмелеп ҡырҙарға ҡалҡыуын күҙ ҡабағы аҫтынан күҙәтте[31].

Ҡарға ҡарғағанға ҡарап, ҡар яумай тормаҫ[32].

Ҡапҡан таптым, ҡапҡанға ҡаптым[33].

Таҡта ҡаҡма, ҡапҡа ҡаҡ!
Ҡапҡа ҡаҡма, тотҡа ҡаҡ![34]

Ҡара ҡарға ҡарға ҡарағанда ҡара, ҡарға ҡарағанда ҡара ҡарға ҡара[35].

Ҡараңғыла ҡара ҡарғаға ҡараным,
Ҡара ҡарға ҡараңғыла ҡараһаң да,
Ҡарамаһаң да ҡара ҡарғаға ҡарағанда
Ҡара ҡараҫҡыға оҡшап тора[36].

Килгеләштергеләштергеләп йөрөгөлә, ултырғылаштырғылаштырғылап торорбоҙ[37].

Ҡарамалылағы бер ҡартҡа ҡараманан сана ҡарамаларға биргәйнем. Ҡарамаланы микән, ҡарамаламаны микән? Ҡарамалаһа ла, ҡарамаламаһа ла, ҡарамалағанына, ҡарамаламағанына ҡа-

рамайынса үҙең барып алып ҡайт. Ул ҡарамаламаһа, үҙем ҡарамалармын. Ҡараманан сана ҡарамалау — борондан килгән һөнәр[38].

Ары ла лап-лап, бире лә лап-лап, һөңгө һаплап, кейеҙ ҡаплап, лап-лап-лап[39].

Мышлаған-мышлаған,
Мейес башында ҡышлаған.
Тирләмәгән, бешмәгән,
Белмәһә лә үҫмәгән[40].

Мәкәримов Мирсаяф Мирғәли малайы машина майы менән маңлайын майлаған да мендәренә менеп мендәрҙе майлаған[41].

Әйттем таҡмаҡ таҡмаҡлап,
Һин дә миңә тап таҡмаҡ[42].

Мин бейермен — тап таҡмаҡ,
Таҡмаҡ тапмаған — ахмаҡ[43].

Төлкө, өтөләп-өтөләп, өйрәк өйрәһен, өрпөлдәтеп-өрпөлдәтеп һемерҙе. Көндә өтөләп-өтөләп өйрәк өйрәһен өрпөлдәткән төлкө, әйтергә көлкө, өскил булып, өйрәктән һимерҙе[44].

Соҡалының соҡорон сыҡҡан саҡта Сәмәрәнең силәге сатнаған[45].

Һиҙиәт һыйырға, һарыҡҡа һалам һалғанда һәнәгеп һындырып, һәнәгенең һабын Һәҙиәгә һикһән һигеҙ һумға һатҡан[46].

Өйгә ингән сыпсыҡ,
Осоп йөрөй сыпсыҡ,
Сып-сыҡ, сып-сыҡ,
Сыҡ, сыпсыҡ,
Осоп сыҡ, сыпсыҡ,
сыҡ, ҡошсоҡ,
Сыҡ, сыҡ, ҡошсоҡ,
осоп сыҡ![47]

Һәҙиә һыйырына һуҡыранып, һәнәгенең һабын һындырғансы һуҡты[48].

Серәкәй себенде себендәк, ти,
Себен серәкәйҙе серелдәк, ти[49].

Һары Сабираға һары сандали,
Һары сандалиға һары Сабира.

Һары Сабираны һары сандали,
Һап-һоп итеп сейәгә апара[50].

Һыуыҡ һыу һалҡын була,
Һыуыҡ килһә, һыу туңа[51].

Һонтор Нәзиә һалам эшләпәһен һалпылдатып, һалмаҡ баҫып һыуһынға һыуға килә[52].

Һонтор Һәҙиә һалам эшләпәһен һапылдатып, һалмаҡ баҫып һыуһынға һыуға килә[53].

Һарыҡ, һап-һап баҫып, һыйырға һыйланырға килгән. Һыйыр, һәмгелдәп йөрөй-йөрөй, һармаҡ һарыҡты һап-һары һалам менән һыйлаған[54].

Сибәр, Сәймә һәм Сәлимә
Сәй эсәләр өсәүләп.
Сулпан ситтә сәсәй-сәсәй
Сәй көтә был өсәүҙән[55].

Һалмауыр Һаҙыев Һәҙи һауын һыйырҙарға, һарыҡтарға һалбыр һалам һалғанда һалмаҡ һәнәк һабын һындырған.
Һәҙи! Һыйырҙарға, һарыҡтарға һоло һаламы һал![54]

Оҙон епте һаплама ла, ыҫмалалама ла, үҙем һабын һаплап, үҙем ыҫмалаһын ыҫмалаlармын[57].

Шакирҙың шары шарт-шорт шартланы, Шакир шуға шаңҡып, шып-шым ғына шаҡ ҡатты[58].

Шыуа-шыуа шыуғалаҡ,
Шып-шыма ялтыр ҡалаҡ[59].

Әсмәнең әсәһенең әсәһе Әсмәнең сәсенә сәскә сәнсте. Сите сәскәле сынаяҡҡа сәк-сәк сәсте. Әсмә сынаяҡтағы сәк-сәкте, сәнскегә сәнсеп, сәйнәй-сәйнәй сәпелдәй[60].

Шыпыр-шыпыр, шыптыр-шыптыр, ҡыптыр-ҡыптыр, мейес артында, мейес аҫтында, шыптырлағыс шыптырлай[61].

Хәсрәттең тоҡсайының ҡапсығының ауыҙын бәйләгән бауының ебенең һүрендеһенең осо[62].

Дарыу менән өс шешә,
Шешә бауын теш сисә,
Шешә сисһәм, теш шешә[63].

Үрмәксе, үрмәксенән күрмәксе, үргә үрелеп-үрелеп үтеп-һүтеүселәрҙе үҙенең үрмәле-үрмәле үрҙә үрелгән үрмәһенә үткәреп, үтеп, эләгеп үрһәләнеүселәрҙе үсәп-үсәп, үҙҙәре үлгәнсә көтөп, үтен эсте[64].

Эт башындай эшемде этләнеп-этләнеп эш итә алмағас, эштә күргән этлектәрҙән этләнеп эткә әйләнә яҙҙым[65].

Ыңғыр-ыңғыр ыңғырсаҡ,
Ҡайҙа минең бала саҡ?
Үтеп китте уйнар саҡ,
Килеп етте һыңғырсаҡ[66].

Әхәт этәсләнеп Әнисәне әрләне. Әхәткә Әнисә сәрелдәй-сәрелдәй ә-ә-ә тип әрләште[67].

Ыңғыр-ңыңғыр ыңғырсаҡ,
Әңгер-мөңгөр ҡыңғыр саҡ.
Беҙҙең хәҙер йырлар саҡ,
Ғыр-ғыр гармун уйнар саҡ[68].

* * *

Әрһеҙ кеше — ғәрһеҙ кеше,
Һәр бер ғәрһеҙ ғәмәлһеҙ,
Ғәмәлһеҙ кеше әмәлһеҙ[69].

* * *

Килгән Ғата, кейгән ҡата,
Уң аяҡта һул ҡата.
Ҡатала түгел хата,
Ҡата кейелгән хата[70].

**Һаҡау балаларҙың теленән**

Иәйсә апайымдай койкий уйамында тойайай[1]. (Рәйсә апайымдар Горький урамында торалар.)

* * *

Әбеййән ағайым атайымның
тийаҡтойын, ҡойоп ҡайғый,
ҡойоғол, асты, тапты, әп итте[2].
(Әмирйән ағайым атайымдың тракторын,
ҡороп ҡалғыр, ҡороғор, асты, тапты,
алып китте.)

* * *

Һаҡлау һайыҡ
Башы яйыҡ,
Һуйай инем
Бик ябыҡ[3].
(Һаҡау һарыҡ,
Башы ярыҡ,
Һуяр инем,
Бик ябыҡ.)

* * *

Тышта ҡар яуа. Әлфиә:
— Ҡай яуа.
— Юҡ ҡай яумай, ҡал яуа,— тип
Уны төҙәтә Юлай[4].

* * *

Күрше ағайға барып:
— Иф! Иф ағай, тәләстем
боҙолдо ла ҡуйҙы. Тәләстене
үнәтелгә тимесывыҡ ҡоҡо?
— тип һорай[5].

(Риф! Риф ағай, тәгәрмәсем
боҙолдо ла ҡуйҙы. Тәгәрмәсте йү-
нәтергә тимерсыбыҡ юҡмы?)

* * *

Бер һаҡау малайҙың әсәһенең исеме Шәрәфисә булған. Кешеләр: «Әсәйеңдең исеме кем?» — тип һорағандар.

— Шәп бисә,— тип яуап ҡайтара икән һаҡау малай. Кешеләр ҡыҙыҡ күреп һаман да һорашалар, ти. «Эй, йетәй инде. Лация бис тапҡый ҡабатламай»,— тигән, ти, теге малай. (Эй, етәр инде. Радио биш тапҡыр ҡабатламай.)[6]



*Гәрәй, Гәрәй*
*Тау башынан тәгәрәй.*

## ҮСЕКЛӘШЕҮҘӘР

### Кеше исемдәренә бәйле үсекләшеүҙәр

Ҡойма буйында кесерткән үҫкән,
Унда Азамат йығылып төшкән.
Азамат, Азамат,
Һине йығып ҡасҡан ат[1].

Айрат — айғыр ат,
Осоп китә, ҡуйһаң ҡанат[2].

Бикмәт, Бикмәт,
Бикмәт — ярты икмәк.

Әсәй, ҡара әле Бибисараны,
Түкте минең ҡараны[3].

Вәскә, Вәскә,
Урмандағы сәскә.
Вәскәләргә барғайным,
Үлә яҙҙым асҡа[4].

Гөлбикә апай, ялбырбаш,
Сыҡма урамға ялан баш.
Сыҡһаң урамға ялан баш,
Кейәү һиңә ҡарамаҫ[5].

Гөлсөм, Гөлсөм, бында торма,
күлгә сум[6].

Гәрәй, тау башынан тәгәрәй[7].

Гөлшат, Гөлшат — ватылмаған көршәк[8].

Ғаяз бабай
Ыштан ямай,
Бер тишеген ҡалдырмай[9].

Сиң-сиң, сиңерткә
Ситән араһында.
Һары мыйыҡ Ғәйзулла
Ҡыҙҙар араһында[10].

Гөлғәйшә, Гөлғәйшә,
Ҡыйыш ботинкаһын кейеп,
Бағанаға йәбешә[11].

Ғәйфулла — мулла,
Сәғит — сәкмән,
Әсҡәт — әтәс,
Йәүҙәт — йәтәс,
Һаҙый — һәүкәш,
Ибраһим — брай,
Тоҙ ялай ҙа һыу һорай[12].

Дауыт, Дауыт,
Көл һалынған һауыт[13].

Динә, Динә — көнә буйы һыу инә[14].

Зөһрә, Зөһрә,
Тау битенән йүгерә.
Мунса күрһә, сабына,
Сыбыҡ күрһә, абына[15].

Зәкей, бөкөй,
Кәзәһе төкөй.
Урамға сыҡһа,
Ҡаҙ суҡый[16].

Зәйнәп балыҡ бешергән,
Баныу бәреп төшөргән,
Раҡыяһы йыя-йыя
Биш бармағын бешергән[17].

Иштуған — ҡыш тыуған,
Ҡышҡыһын сана шыуған.

Иштуған — ҡыш тыуған,
Ишек төбөндә туңған[18].

Искәндәр иләк иштергән,
Сабатаһын тиштергән[19].

Ишбулды, Ишбулды,
Сәғәт биш булды[20].

Ишбулат, Ишләй,
Мейес башынан төшмәй,
Мейес башынан төшмәй,
Нисек тәне бешмәй[21].

Ильяс илаҡ, илле ҡолаҡ[22].

Ибрай бура бурай,
Сәйҙәһе ҡурай уйнай.
Мейес башында балалары
Серек бәрәңге һорай[23].

Ибрай!
Тауыҡтарға һип бойҙай,
Ашаһын да кикерһен,
Беҙгә күкәй килтерһен[24].

Ирек батыр йоҡлап ятыр,
Сәсен йөнгә сыбалтыр.
Асы-сөсө йоҡоһонда
Ҡыҙҙар килеп уятыр[25].

Ҡунаҡбай, Ҡунаҡбай,
Тау башында уйнаҡлай[26].

Ҡәһәрмән, Ҡәһәрмән,
Яҡ-яғыңды һәрмән.
Сыҡмаҫ микән бер билмән[27].

Ләүзиә, ләүек,
Өрмә әле, бирән тауыҡ[28].

Миңлебай, Миңлебай,
Аҡсаһы юҡ, миңгә бай.
Муҫа-Муҫа-Муҫамай,
Бәрәңгеһен утамай.
Бәрәңгеһен утаһа,
Төн буйына йоҡламай[29].

Һап-һа Мостафа,
Һағыҙ сәйнәп көн итә.
Сабатаға тауыҡ егеп,
Илап ҡайта ла китә[30].

Мусин, Мусин, Мусинка,
Төбө тишек сусинка[31].

Марат, Марат, ат тиҙәген тарат,
Марат, Марат московский сепарат[32].

Мөҙөр-Мөҙөр, Мөҙәрис,
Мөҙөр-мөҙөр, мәҙәкә.
Ике кәзә, бер тәкә.
Мөҙөр-мөҙөр Мөҙәрис
Ике сысҡан, бер терпе[33].

Сиң-сиң, сиңерткә,
Ситән араһында.
Маңҡа танау Миңнулла
Ҡыҙҙар араһында[34].

Мырҙабай, Мырҙабай,
Аҡсаһы юҡ, буйға бай[35].

Деңке-деңке, деңнекәй,
Өйҙә микән Миңлекәй?
Өйҙә булһа Миңлекәй,
Тик ултырһын,
Трубкаһын тултырһын[36].

**Үсекләшеүҙәр**

Нур һата, нур һата,
Урындыҡта тик ята.
Әсәйемдән туҡмалам тип,
Уйындан илап ҡайта[37].

Насырай, Насырай,
Ике тауыҡ аҫ(ы)рай[38].

Насип!
Тауыҡтарға ярма һип,
Унда һипмә, бында һип!
Таҡыр ерҙе ҡарап һип![39].

Рәһшу, Ревмир — эремсек,
Өйөгөҙгә инеп сыҡ.
Атайығыҙ өйҙә микән,
Шуны ла һин белеп сыҡ![40].

Килеп инде Сафа — үҙенә күрә яфа.
Йәмил йәмкә — утыҙ ике бәпкә.
Асия асыҡҡан — майлы бутҡа ашаған.
Тәслимә барабан — сәсен майлап тараған[41].

Сабыр Сапай сапҡан,
Мейескә иңеп ятҡан,
Мейескә инеп йылынмаған,
Кәкрәйеп ҡатҡан[42].

Саф-Саф, Сафура,
Сафа мулла саҡыра![43].

Салауат, Салауат
Ике ботло карауат.
Ике ботло карауаттан
Ҡолап төшкән Салауат[44].

Урал, Урал, ураған
Өйөн ҡыйыш бураған.
Сәлимәне алам тип,
Ултырған да илаған[45].

Уйылдан, Уйылдан,
Тәгәрәп төшкән муйылдан.
Әсәһенән һуйылған,
Күҙе-башы уйылған[46].

Хөсәйен, Хөсәйен,
Һөтөңдө урлап эсәйем[47].

Хәйбул-Хабыш,
Аяғы-ҡулы салыш,
Буйы-һыны бер ҡарыш,
Тәмәкеһе биш ҡарыш[48].

Хәсән,
Һабан туйы ҡасан?
Бөгөн түгел иртәгә,
Хәсән менгән кәртәгә,
Кәртә башы ишелгән,
Хәсән башы тишелгән[49].

Әйлүкәй, бәйлүкәй,
Шакир һаман борсаҡтай.
Бармаҡ менән тейһәң дә
Атаһына ошаҡлай[50].

Шәфҡәт — шәпәк, әпәк,
Майға бешкән әпәк[51].

Әҡсән, Әҡсән,
Зифа буйлы матур итеп,
Үҫтергән бит әсәң[52].

Әнисә, Әнисә,
Әнисә беҙҙә нисә?
Бер самауыр сәй эсә,
Урынынан саҡ күсә[53].

Юлай, Юлай,
Ат өҫтөндә тулай[54].

Юлай, Юлай,
Юрған аҫтында тулай[55].

Ямалый, Ямалый,
Ҡырҙа ҡуян балалай,
Балаһына йөн сыҡҡан,
Ялай-ялай төн сыҡҡан,
Ялай торғас, тонсоҡҡан[56].

Емеш, Йәнеш, килмешәк,
Килгән ереңә кит, ишәк.
Гөлйемеш түгел, Емеш,
Емеш бер һөлдә имеш![57].

Бибеш, Йәнеш, Гөлйемеш!
Гөлйемеш шаҙра имеш.
Гөлйемеш илаҡ имеш,
Гөлйемеш телһеҙ имеш[58].

**Илаҡ балаларҙы үсекләү**

Илаҡ-илаҡ,
Илле ҡолаҡ,
Ҡолаҡтарын йыумаған,
Күҙ йәштәрен тыймаған[1].

Илаҡ-илаҡ,
Илле ҡолаҡ,
Алтмыш тояҡ,
Етмеш аяҡ[2].

Илаҡ, илаҡ, илле ҡолаҡ,
Аҡыра ла баҡыра,
Һәүкәштәрен саҡыра[3].

Илаҡ-илаҡ, ялҡытҡан,
Илап кеше ҡурҡытҡан[4].

4 Заказ 605

Әй, Әнисә, Әнисә,
Әнисә беҙҙә нисә?
Әнисә берәү генә,
Белгәне илау ғына[5].

— Илаҡ — бәлеш, сабата,
Һине кемдәр ярата?
— Мине әсәй ярата,
Мине атай ярата,
Мине ағай ярата[6].

Илаҡ, илаҡ,
Йылҡы ҡолаҡ,
Йомарла ла
Мейескә яҡ[7].

Илаҡ, илаҡ,
Һалпы ҡолаҡ,
Ҡарама таяҡ,
Ҡарт әтәс[8].

Илтын илаҡ,
Ҡарама таяҡ,
Суҡлы балаҡ,
Ауыҙың алап,
Торма озлап,
Ҡуйырмын тоҙлап![9]

Илаҡ-илаҡ, илле ҡолаҡ,
Ҡарама таяҡ, ҡамыш ҡолаҡ,
Ултыра буҙлап[10].

**Малайҙарҙы үсекләү**

Малай-малай,
Башы ялтыр-ҡалай.
Малай, малай,
Биҙрә төбөн ялай...[1]

Мансур ҡыҙ булған,
Һыуға барған.
Һыу алам тиеп,
Ҡом һоҫоп алған[2].

Ҡара башлы турғай,
Ҡарындыҡты ҡуймай.
Һин дә егет, мин дә егет
Кәләш алып булмай[3].

Кәзә менгән алмағасҡа,
Ҡойроғон болғап һайрай.
Бот буйындай маңҡа малай
Күршеләренән ҡыҙ һайлай[4].

Ағиҙелгә баҫма һалдым,
Баҫһаң һынырға тора.
Беҙҙең класс малайҙары
Төртһәң иларға тора[5].

Һеҙҙең ауыл урамдары
Ике яҡтан ҡамаулы.
Һеҙҙең ауыл малайҙары
Скрипка танаулы[6].

Малайҙар, малайҙар,
Сүплектәге ҡалайҙар.
Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар,
Һауалағы йондоҙҙар[7].

Беҙҙең ҡапҡа тимерҙән,
Уны сысҡан кимергән.
Күршенең малайҙары
Сусҡа кеүек һимергән[8].

Бөгөн йыуған керемде
Ямғыр яуып сылатҡан.
Күрше ауыл малайҙарын
Серәкәй талап илатҡан[9].

### Тәмәкеселәрҙе үсекләү

Әй, Әпкәләй, Әпкәләй,
Тартма, тиһәң, үпкәләй.
Аяғы балта һабылай,
Бүреге ҡуян ҡабылай.
Унда барып төкөргән,
Бында килеп төкөргән.
Әллә күпме өлгөргән,
Тәмәкеһен бөтөргән.
Үҙен күрһә, эт өргән,
Башын алмай усаҡтан,
Еңдәренә ут ҡапҡан.
Тығынсылар күргәндәр,
Һиптергес тотоп килгәндәр.
Һыу һипкәндәр үткәнсе,
Ләж йығылып* киткәнсе.
Әй, Әпкәләй, Әпкәләй,
Тартма, тиһәң, үпкәләй,

* Ләж йығылыу — тора алмай ятыу.

4*

Ярҙырған, ти, таҡта,
Яһатҡан, ти, ҡапҡа,
Ҡапҡа башы һырлы-һырлы матса, ти,
Ҡапҡа арты бик ҙур баҡса, ти.
Сәстергән, ти, емеш.
Ҡарауыл ҡуйған, ти, имеш.
Шунан, иртә менән тороп ҡараһалар,
Ней булһын батша, ней булһын баҡса,
Ней булһын бер емеш,
Береһе лә юҡ имеш![2].

* * *

Борон-борон заманда,
Кәзә — команда,
Һайыҫҡан — сутник,
Өйрәк — үрәтник,
Баҡа дисәтник булғанда,
Бар ине, ти, бер кеше,
Ауыҙында булған, ти, бары бер теше.
Ашай алмай тонсоҡҡан,
Аптыраған, төн сыҡҡан,
Шунан торған, ти, был иртән,
Тапҡан, ти, бер тишек сабата.
Еккән, ти, уға һуҡыр сысҡан,
Баралар, ти, сабып,
Кешеһе ҡалды, ти, ауып![3]

* * *

Бар ине, ти, борон заманда Бохар шәрифтә
Кәзә менән һуҡыр сыпсыҡ команда.
Һайыҫҡан һатыу иткәндә,
Ҡарға ҡараҡлыҡ ҡылғанда,
Күркә көтөү көткәндә,
Ҡаҙ ҡаҙаҡ ҡаҡҡанда,
Әтәс аҙан әйткәндә,
Был донъяла бер кеше лә юҡ ине, ти.
Уның эсе боша ине, ти.
Ул донъялағы барлыҡ нәмә менән һуғышырға,
Ҡайһы менән ыҙғышырға,
Ҡайһы менән ҡырышырға
Әҙер ине, ти.
Ул уларҙың барыһын да еңде, ти.
Кешенең эше елле, ти![4].

* * *

Бар ине, ти, юҡ ине, ти,
Ас ине, ти, туҡ ине, ти,
Йәйгә сыҡһа, ҡыр тултырып,

Ашлыҡ сәсә ине, ти.
Ҡышҡа керһә, бөкрәйеп,
Ас ултыра ине, ти.
Үҙе таҙа ине, ти,
Таяғы таш ине, ти.
Ашағаны аш ине, ти,
Игенлеге таш ине, ти.
Шулай булһа ла үҙ ҡатынына
Үҙе баш ине, ти[5].

* * *

Иртәгә баҙар,
Баҙарға барам,
Кәзәмде һуям,
Иткә бер туям.
Бер ботон ҡоҙама,
Бер ботон ҡыҙыма,
Бер ботон ҡаҙанға,
Ҡабырғалары баҙарға,
Унда барыу өсөн
Өс тауыҡ өтәм.
Санаға тейәп күстәнәс,
Өйөмә елəм[6].

* * *

Баҙарға барғанда,
Кәзә һатып алғанда,
Байығам, тип торған саҡта,
Килеп керҙе ҡосаҡҡа,
Атып бәрҙем усаҡҡа,
Йылҡылдап торған уҡа.
Айыуҙай ҙур үрмәксе,
Әрмәнденән күрмәксе.
Сығып китте атып,
Тороп ҡалдым ҡатып[7].

* * *

Баҙарға барғанда
Ектем сиңерткә,
Башын һикертә.
Ектем өйрәк,
Китте һөйрәп.
Ектем күркә,
Һәр саҡ өркә[8].

* * *

Баҙарға барғанда
Ектем күгәүен,
Тартмай, игәй игәүен.

Ектем тараҡан,
Эй көсәнгән, аҡты ҡара ҡан.
Егеп ҡуйҙым сиңерткә,
Һуҡҡан һайын артын һикертә.
Эй, киттек соҡор эсенән,
Елдереп дауыл көсөнән.
Һыңар аяғы менән,
Ҡултыҡ таяғы менән,
Әйттереп-типтереп,
Алты сысҡан ектереп,
Ҡаҙаҡ ярым икмәкте
Алты көнгә еткереп[9].

* * *

Баҙарға барҙым,
Ектем өйрәк,
Киттем көйрәп,
Тауға үрләп.
Ектем күркә,
Бағананан өркә.
Ектем сысҡан,
Сайылдай, ҡәһәр һуҡҡан.
Санам ҡабыҡ,
Тейәнем сыбыҡ-сабыҡ,
Барам сабып,
Хәлем бөттө, арып
Киттем ауып.
Тәртәм һалам,
Төшәм дә ҡалам,
Төшәм дә ҡалам,
Нисек ҡайтып етергә —
Аптыраным бит тамам[10].

* * *

Емерек кенә сана,
Ерән ат.
Ултырып ҡына бара
Муса ҡарт[11].

* * *

Санам ҡабыҡ,
Атым арыҡ,
Китте сабып,
Төштөм-ҡалдым,
Санам ауып[12].

* * *

Атайым биштә,
Үҙем ун биштә.
Сығып киттек Бирҙәшкә,

Бер-беребеҙҙе алып серҙәшкә.
Барып еттек бер ауылға,
Килеп индек бер йортҡа,
Унда ултыра бер ҡортҡа.
Һуйған ата күркә,
Шатор-шотор йолҡа.
Үҙе ашарға ҡурҡа.
Ҡулына алды утынды,
Беҙҙе ҡыуырға тотондо.
Алды сыбыҡ,
Киттек сығып,
Әбей ҡалды бер һуғып,
Китте сыбығы һынып...[13]

* * *

Сыҡтыҡ икәү юлға,
Ҡапсыҡ тотоп ҡулға,
Ул тарта уңға,
Мин тартам һулға.
Барып еттек ауылға,
Сыҙап булмай дауылға.
Барып индек урамға —
Сыҙап булмай буранға.
Барып индек өйөнә —
Һаман килмәй көйөнә,
Китәм, тиеп кейенә.
Сығып киттем тигәндә,
Берәү ята иҙәндә,
Бер аяғында ҡата,
Берәүһендә — сабата,
Ләм-мим тимәй, тик ята.
Тартып алдым ҡатаны,
Биш тәңкәгә һатамын,
Тип-тишек сабатаһы,
Уны нисек һатаһы?
Ҡайттым-киттем өйөмә,
Эй, өйөмдә һөйөнәм[14].

* * *

Барҙыҡ борсаҡҡа,
Тейәнек ҡорһаҡҡа.
Килеп сыҡты Ҡотоп,
Алды бит беҙҙе тотоп,
Килеп сыҡты Миргәрәй,
Бына беҙҙе биргәләй.
Килеп сыҡты Әпәләй,
Бына беҙҙе төпәләй.
Килеп сыҡты Шәүәләй,
Бына беҙҙе әүәләй.

Килеп сыҡты Николай,
Бына беҙҙе тапалай,
Ул китте үрәтниккә,
Үрәтник әйтә: «Атам»,— тип,
Беҙ сығып йүгерҙек:
«Ҡайтам»,— тип[15].

* * *

Барҙым борсаҡҡа,
Тейәнем ҡорһаҡҡа,
Килеп сыҡты эйәһе,
Инде нимә тиергә?
Килеп сыҡты Фазлый
Бына мине ҡайыҙлай.
Килеп сыҡты Миргәли,
Бына мине биргәләй.
Килеп сыҡты Әпәләй,
Бына мине тәпәләй.
Килеп сыҡты Йосоп,
Үлтерә яҙҙы ҡыҫып.
Алып китте тотоп,
Ул илтте үрәтниккә,
Үрәтник әйтә: «Атам»,— тип,
Мин сығып йүгерҙем «ҡайтам»,— тип[16].

* * *

Барған инек урманға
Ултыра инек боҫоп,
Килеп сыҡты Йосоп,
Киттек беҙ осоп.
Ике ҡыйыҡ, бер салыш
Юл менән алдылар.
Ике кәкре, бер бөкрө
Ағас кәкреһен ырғытҡандар ине —
Ҡыйыҡ китте.
Бөкрөһөн ырғытҡандар ине —
Теймәне!
Бына, икебеҙ күҙһеҙ ни күрҙе?
Ике аяҡһыҙ салышты ҡыуып етте.
Ике ҡулһыҙ бер сулаҡты тотто ла туҡма

* * *

Таҙ бара урманға,
Башын һалып фурманға,
Таҙ барғансы, таң атҡан,
Башын тырнап ҡанатҡан.
Таҙ бара юл менән,
Ҡыптыр-ҡыптыр тун менән,

Тунын һалып ташлаған,
Башын тырнай башлаған.
Таҙ бара ат алырға,
Кейҙерәлмәй йүгәнен,
Ике таҙҙы бәйләп һалған
Ниндәй батыр күгәүен.
Таҙ менгән тау башына,
Талдан ситән үрәм, тип,
Таҙ ҡысҡыра үләм, тип,
Башыма сеҫәкәй ҡуна, тип.
Таҙ бара урманға
Ҡара ерек киҫәргә,
Таҙ артынан серәкәй бара
Таҙҙың ҡанын эсәргә,
Һыу йыйыла соҡорға,
Күл яһала ҡаҙҙарға,
Ямғыр яуып, серәкәй сыҡһа,
Үлем була таҙҙарға[18].

* * *

Сығып киттем урманға,
Сатыр-сотор йыйырға,
Килеп сыҡты Айыу дуҫ,
Минән һорай папирос.
Мин тартмайым папирос.
Һорама, зинһар, Айыу дуҫ[19].

* * *

Бара инем, бара инем,
Осраны Яҡуп,
Ҡалдым ятып.
Ҡалмаһам ятып,
Үлтерә ине атып.
Үсекләнем Яҡуп-ҡуп,
Ҡупһаң — ҡуп, ҡупмаһаң — юҡ.
Менеп киттем ҡоймаға,
Йәбеште был быймаға.
Емерҙем мин ҡойманы,
Алып ҡалды быйманы,
Кейәм әле тигәнсә,
Бер аяғы һыйманы,
Сак аяғы һынманы.
Бара инем, бара инем,
Осраны Йөсоп,
Ҡалдым боҫоп.
Ҡалмаһам боҫоп,
Үлтерә ине ҡыҫып,
Менеп киттем ситәндән,
Тотоп ҡалды сәкмәндән,

Ҡушылды миңә ҡәйнеше,
Билендә бар ҡайышы.
Ҡайтып инде Хаттап,
Йөрөй икән маҡтап.
Тотондо көйҙө маҡтарға,
Башыма менеп тапарға[24].

* * *

Килеп инде Әйүп,
Ҡоластарын йәйеп,
Килеп инде бабай,
Ҡунаҡ ит, ти, дауай.
Килеп инде Ғамир,
Шартлатып баҫа ҡамыр,
Килеп инде белеш,
Эй бешерә бәлеш.
Килеп инде Талип,
Тауыҡ тотоп арып,
Килеп инде күрше
Аяҡтарын һөйрәп,
Ултырғысы ҡулда,
Ҡултығында өйрәк.
Китте ҡунаҡ, китте туй,
Һин дә бер нәмәнде һуй.
Һуйырға йәлке булһа,
Ни булһа ла илтеп ҡуй[25].

* * *

Һуяр инем өйрәк,
Ҡунаҡтарым күберәк.
Һуяр инем ҡаҙ,
Ҡунаҡтарым аҙ.
Һуяр инем күркә,
Ҡунаҡтарым өркә.
Бешерер инем өйрә,
Ул эсегеҙ ней күрә?
Булмаһа, бешерәйек өйрә,
Ярар, ҡунаҡтарына күрә[26].

* * *

Был минең өй,
Уртаһында сөй.
Кейемеңде эл,
Элгәнеңде бел.
Ултырам өйҙә,
Кәпәсем сөйҙә.
Бер үҙем булғас,
Көйләнмәй көй ҙә.

Килеп инде Иван,
Ултыртты бер диван.
Килеп инде Степан,
Ултыртты бер стакан,
Килеп инде Петр,
Ултыртты бер литр,
Килеп инде Юрий,
Әйҙә, әсәйек, ти, юрый[27].

* * *

Килеп керҙе Йосоп,
Йөн менән осоп.
Килеп керҙе Мөтәл,
Ултыртты бер өҫтәл.
Килеп керҙе Иван,
Ултыртты бер диван,
Ултыртты бер күнәк май,
Килеп керҙе Дауыт,
Ултыртты бер тауыҡ.
Инде ашайыҡ тигәндә,
Килеп керҙе Моталлап,
Ашап бөттө ботарлап[28].

* * *

Килеп индем Ноғманға,
Башын тыҡҡан ҡомғанға.
Башын алғас ҡомғандан —
Ҡурҡып киттем Ноғмандан.
Килеп индем Фатихҡа,
Башын тыҡҡан ҡатыҡҡа.
Башын алғас ҡатыҡтан —
Ҡурҡып киттем Фатихтан.
Килеп индем Ғатаға,
Башын тыҡҡан ҡатаға.
Башын алғас ҡатанан —
Ҡурҡып киттем Ғатанан.
Килеп индем ҡоҙаға,
Башын тыҡҡан буҙаға.
Башын алғас буҙанан —
Ҡурҡып киттем ҡоҙанан.
Килеп индем Сайранға,
Башын тыҡҡан айранға.
Башын алғас айрандан —
Ҡурҡып киттем Сайрандан...

* * *

Булған, ти, бераү,
Ҡуйған, ти, тераү,
Тераүе ысҡынған,
Үҙенә һуҡтырған,
Аяҡтарын ҡыҫтырған,
«Әс-сәй!» тиеп ҡысҡырған[30].

* * *

Мин йәш саҡта,
Атайым ҡарт саҡта,
Ҡар ҡыҙыл саҡта,
Төтөн тәмле саҡта,
Булған, ти, бер өй.
Һыҙҙырған, ти, бер көй,
Ташлаған, ти, бер сөй,
Шуны ал да арҡамды төй[31].

* * *

Бара инем, бара инем,
Ята бер ҡаҙ башы.
Иплэберәк ҡараһам,
Бер ҡыҙ башы.
Тағы ла ентекләп ҡараһам,
Ҡыҙ башы ла түгел, ҡаҙ башы ла түгел,
Ул — таҙ башы[32].

* * *

Йүгерҙем, йүгерҙем,
Бер аҙым китеп өлгөрҙөм.
Йүгерә торғас, арыным,
Бөттө инде һарыуым.
Арығас та һыу эстем,
Һыу эскәс тә ҙур үҫтем,
Ҙур үҫкәс тә йығылдым,
Йығылғанда һығылдым.
Һығылғанда мин үлдем,
Яр аҫтына күмелдем[33].

* * *

Кейеп сыҡтым итек,
Бер ҙә булмай китеп.
Кейеп сыҡтым ҡата,
Аяҡ, эй, ҡарға бата.
Кейгән инем ҡынйыраҡ*,
Юлым китте бик йыраҡ[34].

---

* Ҡынйыраҡ — аттың артҡы бот тиреһенән эшләнгән боронғо ирҙәр аяҡ кейеме.

* * *

Әбей-әбей, әбәнәк,
Әбей минән тәбәнәк.
Әбей менән бара инек,
Әбей китте тәгәрәп[35].

* * *

Әлеп, би, ти, си,
Ана бара бер бесәй.
Ул абыстай төлкөһө.
Беҙгә — уйын-көлкөһө.
Ғайын, ғойон, фи, ҡаф,
Мейес аҫтына тотоп яп!
Уҡый белеп булманы,
Уйнаманы, тыйманы,
— Уҡы! — тиеп ҡыйнаны.
Әлдә, яҡшы, һуҡманы,
Ҡыртыш менән туҡманы.
— Уҡыйбыҙ! — тип ҡоторҙоҡ,
Китап ашап бөтөрҙөк,
Кеше өҫтөнә төкөрҙөк,
Һике аҫтына керҙек,
Аҙбарға ла йүгерҙек,
Маъмай булып та өрҙөк,
Убыр ендәр ҙә күрҙек,
Ҡотоборҙ осоп торҙоҡ.
Әле түгел, йәш саҡта,
Абыстайҙа — босмаҡта,
Ҡурҙыҡ беҙ борсаҡ та
Таба менән усаҡта.
Ҡыҙыҡ ине ул саҡта[36].

Эптер-бе, битер-бе,
Һике аҫтында өтөргө.
Өтөргөнө ала торғас,
Маңлайыма төртөлдө[37].

* * *

«Әлеп»кә юҡ, «би»гә юҡ,
Абыстайҙар өйҙә юҡ,
Ашҡа киткән әбейгә.
Сысҡан төшкән тәбегә,
Бесәй ҡаймаҡты түккән,
Мейес эсендә ут киткән.
Быҙау күлдәк сәйнәгән,
Аш күбеген йыймаған,
Һалманы алып ҡуймаған,

Беҙ ҙә уйнап туймаған,
Өй эсенә һыймаған.
Асыуланмаҫ ҡайтһа ла,
Ул бит беҙҙе һынаған[38].

* * *

Мейес башында бесәй,
Нисек унда бешмәй?
Ашамай ҙа, эсмәй ҙә,
Нисек эсе бошмай?
Ҡайғыһы юҡ, шатлығы юҡ,
Йәп-йәш көйө бирешмәй[39].

* * *

Зыр, зыр, кәзә
Зыр ҡайынға ҡыҫылған.
Ҡыҫылмаһа ни булған.
Уға төлкөләр килгән,
Һаумы, тип сәләм биргән.
Бүре лә бик дуҫ булып,
Эргәһендә өйөрөлгән.
Кәзә бахыр түҙмәгән —
Өҙөп-өҙөп баҡырған.
Ашағыҙ мине, тип саҡырған[40].

* * *

Кәзә, кәзә, мә, кәзә,
Әрәмәгә бар, кәзә.
Һауыр инем ултырып,
Туҫтағымды тултырып,
Йөрөр инем ҡотороп,
Тауҙан тауға һикереп[41].

* * *

Тау башына тары сәстем,
Тартай ашап бөтөргән.
Бәләкәс кенә ҡолономдо
Кәзә һөҙөп үлтергән.
Ҡолонҡайым үкергән,
Бейәләре һикергән,
Айғырҙары кикергән,
Кәртә аша һикергән[42].

* * *

Сәрби әбейҙең кәзәһе
Һигеҙ бәрәс килтергән.
Сәрби әбей шатлығынан
Берәһен тапап үлтергән[43].

* * *

Айт итәм, тайт итәм,
Селдәүсен жарить итәм.
Уртаға тәлмәрйен һалам,
Бешер-бешмәҫтән алам[44].

* * *

Ал итәм, гөл итәм,
Кәзә һауып көн итәм.
Тараҡандың майынан
Бәрәңге жарить итәм[45].

* * *

Әтәс менгән өҫтәлгә
«Ки-ки-ри-кук», итергә.
Әтәскә повестка килгән
Армияға китергә.
Әтәс әйтә: «Бармайым!»
Тауыҡ әйтә: «Ҡалмайым!
Һин китҡәс тә,
Бер күкәй ҙә һалмайым!»[46].

* * *

Әтәс менгән ситәнгә
«Ки-ки-ри-кук!» итергә.
Әтәскә повестка килгән
Армияға китергә.
Әтәс китте армияға
Котелогын күтәреп.
Тауыҡ, бахыр, илап ҡалды
Бағанаға терәлеп[47].

* * *

Иртән тороп тышҡа сыҡһам,
Һыйыр һайрай амбарҙа.
Тауыҡтарға бесән һалдым,
Тоҙ ялаттым ҡаҙҙарға[48].

* * *

Сәлимә әбей йөн тетә,
Урындығын һелкетә.
Әтәс башын ашатмаһаң,
Үпкәләп ҡайтып китә[49].

* * *

Гиҙер-гиҙер гиттәгә,
Ҡаҙ һуябыҙ иртәгә.
Сабатаға сыҫҡан егеп,
Барып алам иртәгә[50].



*Төйләй-төйләй, төйләгән,*
*Атаң-инәң тиләргән...*

## ҠОШТАРҘЫ ҠЫУҒАНДА

### Һайыҫҡанды ҡыуғанда

Һайт-һайт, һайыҫҡан,
Күкәй һытҡан, һайыҫҡан.
Тиҙәклектә тиҙәктә,
Яңғыҙ башың сүплектә.
Һайт-һайт, һайыҫҡан[1].

* * *

Шыҡыр-шыҡыр, һайыҫҡан,
Аяҡтарың тайышҡан.
Һиңә тигән себеште
Әтәс бирмәй талашҡан[2].

### Ҡаҙ бәпкәһе көткәндә

Ҡар-ҡар, ҡарсыға,
Яр аҫтынан яу сыға,
Бәпкә янында өйөрөлһәң,
Яр аҫтына башыңды тығам[3].

Ҡар-ҡар, ҡарға,
Яҡын килмә ярға.
Себейҙәргә тейһәң,
Сәс(е)рәмәй ҡалма[4].

* * *

Ҡар-ҡар, ҡарға,
Атаң-әсәң үлде.
Ҡара ергә күмелде[5].

* * *

Ҡар-р, ҡар-р, ҡарға,
Башын тыҡҡан ярға.
Атаң-инәң үлгән,
Балаң һыуға батҡан,
Көш-көш-шүк![6]

* * *

Туҡ-туҡ, туҡран,
Туҡылдатып ултырам.
Мейестә бәрәмәс бешәме?
Шуны көтөп ултырам[7].

* * *

Төйлөгән, төйлөгән,
Атаң-инәң үлгән,
Бесәй барып күмгән!
Һиңә хәбәр килгән:
Уң күҙеңә япраҡ,
Һул күҙеңә тупраҡ!
Ҡунаҡ атын өркөткән,
Ҡуш ҡанатын елкеткән,
Көш-шәә!..[8]

* * *

Төй-төй, төйлөгән,
Атаң-әсәң үлгән,
Аҡ сепрәккә төрөлгән.
Яр аҫтына күмелгән.
Бер күҙендә япраҡ,
Бер күҙендә туп(ы)раҡ[9].

* * *

Төй-төй, төйлөгән,
Атаң-әсәң үлгән.
Бесәй барып күмгән.
Көш-көш[10].

* * *

Дөй-дөй, дөйләгән,
Атаң-әсәң үлгән.
Дөй-дөй, дөйләгән,
Ер аҫтына күмелгән[11].

* * *

Төйләй-төйләй, төйләгән,
Атаң-инәң тилергән.
Бер бәпкә лә алалмай
Көнө буйы тилмергән[12].

* * *

Һайт-һайт, төйҙөргән,
Ҡанат осон көйҙөргән.
Атаһына, инәһенә
Киндер күлдәк кейҙергән.
Ҡәнәфер менән баҙыянды
Ҡарауылға ҡуйҙырған![13]

* * *

Һайт-һайт, төйҙөргән,
Ҡанат осон көйҙөргән.
Бәпкә алайым тигәнсе,
Башын ситән өҙҙөргән[14].

* * *

Төй-төй, төйләгән,
Атаң, әсәң үлгән.
Ышанмаһаң, ҡайтып ҡара,
Ҡара ҡарға күмгән.
Баҫырау менән баҫтырған,
Хөкөм менән аҫтырған[15].

* * *

Төйләгән, төйләгән,
Ата-әсәң үлгән.
Уңға борол, уңға борол,
Һулға борол, һулға борол[16].

**Ҡоштар булып һайрауҙар**

Ҡоштар булып һайрауҙар халыҡ ижадының бик үҙенсәлекле бер төрөнә ҡарай. Халыҡ уларҙа ҡоштарҙың һайрауын һүҙҙәр менән әйтеп бирергә тырышҡан. Һүҙҙәрҙең, дөрөҫ, мәғәнәһе юҡ, ә әйтелеш матурлығы бар. Уларҙы ҡыҙыу ғына такт менән көйләберәк һөйләһәң, ысынлап та ҡоштарҙың һайрауын хәтерләтә.

## Һандуғас һайрауы

Ғаж-вәж мөхтәләф,
Ғаж-вәж мөхтәләф,
Һәдәрдәнки, һәдәрдәнки,
Әсмәгәнки,
Татлыбай,
На зари,
Тери-ториш,
Сып-сыр, сып-сыр, сып-сыр-р-ри!
Бына минең бәхетем,
Бына минең тәхетем.
Сөләймәндең бәхетен күр-р-р ҙә,
Тәхетен күр-р-р![17]

## Турғай булып һайрауҙар

Сүплә сү бешкенә,
Шаһи лимән сух,
Әрмәтәнки, хөрмәтәнки,
Дәнки-дәнки, сепри пу-пу,
Сепри пырт![18]

* * *

Себей, себеш, беш-беш,
Сип-сипылда бән беш, пеш.
Дәрҙән ҡошы, дәрҙән ҡошы,
Моҡсайлы дәген,
Сәлсәкинә,
Бысаҡина,
Топиһу-трр-пр-р-р!

* * *

Себей-ибей, себешкәнди,
Шәһит ҡылансыҡ,
Шамый ҡолонсаҡ,
Урбаданки,
Сурбадаики,
Данкий-дөңкөй,
Бирауатник!
Хуш ни һайравый![19]

* * *

Әбдел-әбдел әбдәтеңә,
Һәбәҙинә хөттидаз,
Көлмәнеңә көлмә шәкәр муллараз,
Әлепһенә әлбәнейез,
Зобаныйы, былбылы,
Шоңҡар шаһыны,
Ләбәндим,
Сәрхәдәнкем...

Бухдиин, бенекәим,
Энекәим,
Өйөндә генә буламы?
Абызыһы, абзыйы,
Сиб, сибей, сибей, тр-тр-р[20].

### Һабантурғай һайрауы

Чипт сыпаш кәндеһ шаһде,
Дәрхәғи ғәжәп,
Абу мөхтәләбә'одер дәнки,
әрмә дәнки,
Шыйдыр дәнки, ширмә дәнки,
Дәнки, дәнки бәдри пучи,
Киблауи әндер, гәнем буча ғәнем,
Чи-ип, чи-ип, чыр-р, чыр-р,
Тыр-р, тыр-р, мыр-р, мыр-р.

* * *

Сөптер сөпеш кәләш шәһи,
Дәрхәнәһи үәмән шүп,
Өҙөр ҙәнки, сәҙәр ҙәнки,
Сәрии ҙәнки, ҙәнки, ҙәнки,
Вәнәхни ил,
Фәнәүғи ил,
Күршини,
Туҡлауи и,
Күрсәшнәм сыр-сыри,
Һайҙу сип-сипи,
Тыр-тыри,
Фыр-фыри[21]

### Ҡарлуғас һайрауҙары

Мөъминәтен, мөслимәтен,
Кәлимәтен, тәйембәтен,
Әм әҙәнә валләһи[22].

* * *

Мөъминатын, мөслиматын,
Канитатын,
Таибатын,
Ҫаибатын,
Үә абикара[23].

* * *

Мөслимәтин, мөъминәтин,
Ханитатын, ғабиҙатын,
Сәйехатин, сәйебөтин,
Үә бөкәр-рә!

## Сыйырсыҡ һайрауы

Дуҡу-дуҡу,
Фитиә тәкүм,
Һаҙа әллә ди,
Көн-төн,
Биһи тәстәғилжүн![24]



*Бығыр-бығыр бығырлатам,*
*Йөҙ самауыр ҡайнатам.*

## ҺЫУ ИНГӘНДӘ

**Һыу инергә барғанда, йүгереп ярышҡанда**

Алда барған — айғыр.
Урталағы — ҡыйғыр.
Артта ҡалған — ташбаҡа[1].

* * *

Алдағы — мин алтын.
Икенсе — мин көмөш.
Өсөнсө — мин баҡыр[2].

Беренсе тапҡыр һыуға төшкәндә күлдәк һүрендеһен ағыҙалар һәм: «Һыу, мине тотма, бына ошо епте тот»,— тип әйтәләр[3].

Сирҡансыҡ алыу өсөн «батша» һайлана, уны дәртләндереүгә түбәндәге һүҙҙәр әйтелә: «Яр буйында ҡом, ҡом, батша булһаң, сум-сум»[4].

Һыуға иң алда төшкән кеше:
— Майы миңә.
Икенсеһе:
— Миңә ҡаймағы.
Өсөнсөһө:
— Беҙгә һөтө, — тип әйтәләр[5].
Һыуға сумғанда әйтелгән һүҙҙәр:
— Ҡап та ҡоп,
Сатан Яҡуп юҡ[6].

* * *

Бығыр-бығыр бығырлатам,
Йөҙ самауыр ҡайнатам[7].

Һыу инеп бөткәс:
Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа,
Таҙалыҡҡа-байлыҡҡа (башты артҡа ташлап, танауҙы баҫып сумалар, сәс тәртипкә килә)[8].

Бөтәһе һыуҙан сығып бөткәс, кемдер берәү ҡалһа, уға: «Һыу инәһе, сыҡ-сыҡ!» — тип өндәшәләр[9].

Йәки:
Һыу буйында бер баҡа
Ботон күтәреп ята,
Ауыҙында теше юҡ,
Уны белгән кеше юҡ[10].

Һыу инеп, өшөп сыҡҡас, яр буйында һикерешеп, түбәндәгесә һамаҡлайҙар:

Эт ҡояшы ары кит,
Беҙҙең ҡояш бире кил,
Эт ҡояшы ары кит,
Беҙҙең ҡояш бире кил[11].

Ҡояш апай, баҡ-баҡ,
Тәтәй табаҡ бир миңә,
Тәтәй ҡалаҡ бир миңә,
Ҡояш апай, баҡ-баҡ![12].

Гәүһәр апай, ишегеңде шар ас,
Болот бабай, теҙгенеңде ҡыҫып ҡас.
Эт ҡояшы ары кит,
Беҙҙең ҡояш бире кил[13].

Эт ҡояшы ары кит,
Беҙҙең ҡояш бире кил.
Балҡ, балҡ, ҡояшым,

Ҡара тәкә һуяйым,
Башын һиңә ҡуяйым,
Түшен үҙем ашайым,
Балҡ, балҡ, ҡояшым[14].

* * *

Һайт-һайт,
Кейенә һал да тиҙерәк ҡайт[15].

* * *

Б-р-р-р!
Һыуыҡ киткән, йылы бар[16].

* * *

Быр-быр бырылдата,
Тештәрен дерелдәтә[17].

* * *

Алай ит, былай ит,
Айт-вайт, айт-вайт.
Кейенә һал да
Тиҙерәк ҡайт[18].

Һыу ингәндә ҡолаҡҡа һыу керһә, ҡолаҡты ҡулдың усы менән баҫып, һыңар аякта һикерәләр һәм түбәндәгесә һамаҡлайҙар:

Зең-зең, ҡолағым,
Зеңке таш, ҡолағым.
Зең-зең, ҡолағым,
Зеңке таш, ҡолағым[19]...

* * *

Зеңгер-зеңгер зеңкерләй,
Сығам-сығам, тип семерәй[20].

* * *

Селтер-селтер селтерәй,
Шишмә кеүек сылтырлай.
Сығырға тип юл эҙләй[21].

* * *

Һаҡ-һаҡ, ҡолағым,
Яр башынан ҡоланым —
Ике сәғәт иланым[22].

* * *

Аҡ таш, ҡара таш,
Ҡолағымдан һыу төш[23].

* * *

Баҡа һыуы сыҡ, сыҡ,
Баҡа ду-ду-ду[24].

* * *

Баҡа зыңзың-зың,
Баҡа зың-зың-зың[25].

* * *

Урыҫ, сыуаш, татар,
Ҡолағымдан һыу атар[26].

* * *

Әс-бәс,
Ҡойроғондо
Текә сәс![27]

Һыуға йәлпәк таш бәргәндә

Берәү, икәү, өсәү,
Булды унау,
Ҡыйын һанау[28].

**Балыҡ ҡаптырғанда**

Ҡояш болот аҫтына инеп китһә:

Сыуағым минең, баҡ, баҡ, баҡ!
Балыҡ башын бирәм һиңә,
Түш-ҡабырға булһын миңә,
Сыуағым минең, баҡ, баҡ, баҡ!..—
тип ҡояшты арбайҙар.

Ҡармаҡты селәүсенләгәндә:

Селәүсенде бейетәм,
Бишге бирһәң, мин ҡитәм.
Ялмап йот, ялтырап сыҡ!—

тип емләп: «Тфү, тфү, тфү, минең ҡулым түгел, Сәлим-Нәркәстең ҡулы», тип ҡармаҡҡа төкөрәләр:

Төкөрөп һалдым,
Тиҙерәк ҡап!
Яр башында
Ялтырап ят!
Ҡанаттарың
Ҡалтырап ят![1]

* * *

Ҡап-ҡап,
Балығым,
Ауыҙыңа керһен
Ҡармағым!

Ялт-йолт
Итеп кит,
Яр башына
Менеп кит!

* * *

Ҡармаҡ һалдым,
Тиҙерәк ҡап,
Яр башында ялтырап ят,
Ишеңә иш тап[2].

* * *

Төкөрөп һалдым, һикереп ҡап!
Яр башында ялтырап ят!
Ялтырамаһаң, ҡалтырап ҡат!
Сирт, сирт, сирттермә бирәм,
Батыр, батыр, батырғыс бирәм,
Эләк, эләк, элəктермә бирәм,
Ҡап, ҡап, ҡаптырма бирәм[3].

* * *

Бәрҙе, һәрҙе,
Тиҙерәк ҡап!
Яр башында
Ялтырап ят![4]

* * *

Ҡап-ҡап,
Балыҡ, ҡармаҡҡа,
Эреһе — баҙарға,
Вағы — балаларға[5].

* * *

Ҡара балыҡ, ҡап-ҡап,
Ялтыр балыҡ, ҡалҡ, ҡалҡ[6].

* * *

Ҡыҙылғанат, ҡап-ҡап,
Яр башында ят-ят[7].

* * *

Ҡап-ҡап, балыҡ, ҡап,
Атайыңды саҡыр, әсәйеңде саҡыр[8].

* * *

Ҡап, балыҡ, ҡап, балыҡ,
Әсәйемә ҙур балыҡ,
Атайыма ҙур балыҡ,
Биш ҡустыма биш балыҡ[9].

* * *

Ҡап-ҡап, балыҡ, ҡап,
Яр башында ялтырап ят,
Яңы емгә иҫке балыҡ, ҡап-ҡап[10].

* * *

Ҡыҙылғанат, Ғәҙелбанат, әсәйеңде саҡыр, атайыңды саҡыр, апайыңды саҡыр. Саҡыр, ҡап-ҡап! Ҡыҙылғанат, ҡап-ҡап[11].

* * *

Ҡап-ҡап ҡармаҡҡа, әләгерһең бармаҡҡа, әләкмәһәң ҡармаҡҡа, әйләнерһең һармаҡҡа[12].

* * *

Малайҙар балыҡ һөҙгөс эшләйҙәр. Кемдең балығы төшөп китә, шуға: «Ат башындай ҡомшороҡ, Һинең ауыҙың йырыҡ»,— тип үсекләшәләр[13].



*Ҡояш апай сыҡ, сыҡ,*
*Һалҡын ағай, кит, кит.*
*Һимеҙ тәкә һуйырмын,*
*Майын һиңә ҡуйырмын.*

# КӨН ТОРОШОНА БӘЙЛЕ ТЕЛӘКТӘР

## Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ

Ҡояш, сыҡ,
Аяҙ, ас.
Болот, ҡас.
Беҙ уйнарбыҙ йылытҡас[1].

* * *

Сыуаҡ апай, кил, кил.
Һалҡын еҙнәй, кит, кит[2].

* * *

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Атаң-әсәң килгән.
Һыуыҡ ағай, кит, кит,
Атаң-әсәң үлгән[3].

* * *

Һалҡын ағай, кит, кит,
Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ.
Һөтлө һыйыр яланда, яланда,
Майлы бутҡа ҡаҙанда, ҡаҙанда,
Тәтәй ҡалаҡ баҙарҙа, баҙарҙа,
Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ[4].

* * *

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Һалҡын ағай, кит, кит.
Һимеҙ тәкә һуйырмын,
Майын һиңә ҡуйырмын,
Итен үҙем ашармын,
Һөйәген эткә ташлармын[5].

Ҡара кәпәс, кит, кит,
Ҡояш апай, кил, кил,
Бер йылмайып көл, көл[6].

* * *

Ҡояш, сыҡ, сыҡ, сыҡ!
Майлы ҡашыҡ бирермен,
Майлы таба бирермен,
Һимеҙ үгеҙ һуярмын,
Майын һиңә ҡуярмын,
Итен үҙем ашармын,
Һөйәген эткә ташлармын.
Ҡояш, сыҡ, сыҡ, сыҡ[7].

* * *

Сыуаҡ әбей, сыҡ, сыҡ!
Һимеҙ һарыҡ һуярмын,
Майын һиңә ҡуярмын,
Итен үҙем ашармын,
Һөйәген эткә ташлармын,
Сыуаҡ әбей, сыҡ, сыҡ![8]

* * *

Ҡояш апай, кил, кил,
Ҡара кәпәс, кит, кит[9].

* * *

Ҡояш апай, сыҡ, сыҡ,
Майлы бутҡа бирермен,
Ялтыр ҡашыҡ бирермен.
Ялтыр ҡашыҡ баҙарҙа,
Майлы бутҡа ҡаҙанда[10].

**Яу, яу, ямғырым!**

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау-тау.
Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау![1]

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Ямғыр, яу, яу, яу.
Ҡояш апай, кит, кит,
Һалҡын еҙнәй, кил, кил,
Ашлыҡ тулыр келәткә
Буралары ярылып.

Егет китер кәләшкә
Күрәм тиеп, һағынып.
Ямғыр, яу, яу, яу![2]

* * *

Ямғырым, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау.
Икмәк ашағым килә,
Рәхәт йәшәгем килә[3].

* * *

Ямғырҡайым, яу, яу,
Астан халыҡ үлмәһен.
Үләндәр ҙә күп булһын,
Һыйырҙар ҙа туҡ булһын,
Беҙгә эсергә һөт булһын[4].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген, бесән, үҫ, үҫ.
Һыйырҙарға һөт булһын,
Батмандарға май тулһын[5].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген, үҫ, үҫ, үҫ.
Игендәре күп булһын,
Бураларға ныҡ тулһын[6].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау.
Беҙ йәшәрбеҙ һау, һау[7].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иген үҫһен тау, тау,
Арыштан, бойҙайҙан,
Беҙ һорайбыҙ хоҙайҙан[8].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу,
Иләкләп, силәкләп,
Илгә лә бир, көнгә лә бир,
Күберәгеи беҙгә лә бир[9].

Сырҡ-сырҡ, ҡарлуғас,
Ҡыйғас ҡойроҡ ҡарлуғас,
Ергә тейеп ос әйҙә,
Ямғыр яуҙыр бар ергә,
Ямғырым, яу, яу, яу[10].

* * *

Ямғыр, яу, яу, яу!
Ҡара һарыҡ һуярмын,
Ботон һиңә ҡуярмын,
Тәтәй ҡашыҡ бирермен,
Тәтәй ҡашыҡ баҙарҙа,
Майлы бутҡа ҡаҙанда![11]

* * *

Ямғыр, яу, яу,
Ашлыҡ үҫ тау, тау,
Һыуһаған ер һыу эсһен,
Миләүшә бейек үҫһен[12].

* * *

Яу, яу, ямғырым,
Шаулап ашлыҡтар уңһын.
Башаҡтарҙың остары
Ас булмаһын, тос булһын.
Ырҙындарҙа игендәр
Аҙ булмаһын, күп булһын![13]

## АҢЛАТМАЛАР

Китапҡа ингән балалар фольклоры үрнәктәре асылда Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре (ғилми етәксеһе филология фәндәре докторы И. Ғ. Ғәләүетдинов), Башҡорт дәүләт университеты (ғилми етәксеһе филология фәндәре докторы Ә. М. Сөләймәнов), Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты (ғилми етәксеһе филология фәндәре кандидаты М. Ә. Мәмбәтов) һәм Сибай педагогия училищеһы (ғилми етәксеһе Р. М. Ураҡсина) студенттары тарафынан яҙып алынған. Уларҙың күбеһе Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының Ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Йыйынтыҡҡа башҡа сығанаҡтарҙан да өлгөләр алынды. Китапта әҫәр паспортын күрһәтеүсе һылтанма һан текст башында йәки аҙағында бирелә. Паспорттың тулылығы информаторҙар биргән мәғлүмәттәрҙән сығып билдәләнә.

Шартлы ҡыҫҡармалар: а — акт; БФП — балалар фольклоры папкаһы; й. т.— йылда тыуған; ҠФ — Ҡулъяҙмалар фонды; СҠФ — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында һаҡланған Стәрлетамаҡ педагогия институтының балалар фольклоры буйынса ҡулъяҙмалар фонды; ТТӘИ — Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.

# БАЛАЛАР ӨСӨН ОЛОЛАР ТАРАФЫНАН ТЫУҘЫРЫЛҒАН АУЫҘ-ТЕЛ ИЖАДЫ ҮРНӘКТӘРЕ

## ТЫУЫР БАЛАҒА ҺӘМ БАЛА ТЫУҒАС ӘЙТЕЛГӘН ТЕЛӘКТӘР, ЮРАУҘАР

### Кендек әбейе әйтемдәре

[1] Баймаҡ районы Байыш ауылы Әхмәтова Ғилминур Әйүп ҡыҙынан (1936 йылда тыуған) Әхмәтова Бибинур Мирас ҡыҙы яҙып алған.— ТТӘИ., СҠФ., № 7.

[2, 3] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында йәшәүсе Ханнанов Йәғәфәрҙән Гөлназ Ғиззәтуллина яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 13.

[4, 13, 19] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Иәмил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., шифры 886720.

### Бала һатып алыу

[5] Сибай педагогия училищеһында уҡып сыҡҡан Ҡунаҡкилдина Розалия, Латипова Миңлегөл үҙҙәре белгәнде яҙғандар.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 60-сы бит.

[6] Баймаҡ районы Күсей ауылында Асҡарова Салиха Шөкөрйәр ҡыҙынан (1900 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1983 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 61-се бит.

### Бала тыуғас теләгән теләктәр

[7, 16] Дәүләкән районы Көрмәнкәй ауылында Римма Булатованан Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 61-се бит.

[8] Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан М. Дәүләтбирҙина үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 62-се бит.

[9] Йылайыр районы Бәләкәй Юлдыбай (Һынташ) ауылынан Фатима Дәүләтсурина үҙ белгәнен яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 63-сө бит.

[10—12] Баймаҡ районы Күсей ауылында Асҡарова Салиха Шөкөрйәр ҡыҙынан (1900 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1983 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 117-се бит.

[13] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

[14, 15] Хәйбулла районы Турат ауылында Бәҙерниса Рәхмәтованан Миләүшә Рәхмәтова 1984 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 59-сы бит.

### Баланы йыуындырғанда, майлағанда

[16] Ҡарағыҙ 7-се һылтанманы.

[17] Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылында Сәйфетдинова Альбинанан (1978 й. т.) Лилиә Сәйфетдинова яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 332-се бит.

### Бишек туйы

[18] Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең архивы. М. Бураңғоловтың «Башҡорт туй йолалары»нан, шифры 36215 А.1939.

### Ҡолаҡ тешләтеү

[19] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

## Юрауҙар

[20–27] Сибай ҡалаһында Иәрмөхәмәтова Ҡотлобикә Хәсән ҡыҙынан (1905 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1985 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 117-се бит.

## Бишек йырҙары

[1] Нуриман районы Байгилде ауылында Мостафин Зөфәр Мостафа улынан (1887—1969) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк». Төҙөүсеһе Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов. Өфө, 1991, 4-се бит.

[2] Учалы районы Сораман ауылында Ғәләүетдинова Жөүәйрә Йосоп ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 3-сө бит.

[3–4] Сибай ҡалаһында Вәкилә Ғатаулла ҡыҙы Ҡалмантаеванан (1949 й, т.) Р. М. Ураҡсина 1981 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 104-се бит.

[5] Баймаҡ районы Байыш ауылынан Маликова Көнһылыу Әхмәт ҡыҙы (1973 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 74-се бит.

[6–7] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Йыһанур ҡыҙы Иәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 104-се бит.

[8–9] Учалы ҡалаһынан Ильясова Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙы (1980 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 106, 107-се биттәр.

[10] Дәүләкән ҡалаһында Шәйхетдинова Вәсилә Миңлебулат ҡыҙынан (1952 й. т.) 1982 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 104-се бит.

[11] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылынан Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[12] Ауырғазы районы Үтәймулла ауылында Үтәйев Шәрифулла Фәйзулла улынан (1910 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 4-се бит.

[13] Учалы районы Науруз ауылында Кәримова Мөшәрифә Зәйнулла ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 3-сө бит.

[14] Учалы районы Сораман ауылында Ғәләүетдинова Жөүәйрә Йосоп ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 3-сө бит.

[15] .Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Фәриҙә Ғәзизованан Ғиззәтуллина Гөлназ яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 13.

[16–17] Белорет районы Уҫманғәле ауылында Хәлилова Ғилминур, Салауатова Хәсбиямал әбейҙәрҙән Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №2.

[18–20] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) үҙе белгәнде һәм әсәһе Минсара апайҙан яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[21] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Йәмил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[22] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Йыһанур ҡыҙы Иәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 106-сы бит.

[23–24] Учалы ҡалаһынан Ильясова Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙы 1980 йылда яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 107-се бит.

[25] Хәйбулла районында Кәбирә Таулыҡаева яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Совет Башҡортостаны», 1988 йыл, 11 декабрь. «Аллыһыу, баллыһыу» вариантын Ейәнсура районы Ибрай ауылында Клара Вәлиеванан (65 йәштә) Ғәбитова Гөлсөм 1984 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ., а101—№13.

[26] Учалы районы Илсе ауылында М. Т. Сәғиҙуллинанан (1902 й. т.) Розалия Солтангәрәева яҙып алған. 1968 йылда. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 3-сө бит.

[27] Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылында Мәмбәтова Гөлсөмдән 1981 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 105-се бит.

[28] Белорет районы Шығай ауылынан С. Ихсанова 1989 йылда яҙып ебәргән.— «Совет Башҡортостаны», 1989 йыл, 8 ғинуар.

[29] Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының студенты Саҙриева Рәмилә 1988 йылда үҙе белгәндәрҙе яҙған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 22.

[30] Ейәнсура районы Ибрай ауылында Клара Вәлиеванан (65 йәштә) Ғәбитова Гөлсөм 1984 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ., а101—№13, 5-се бит.

[31—32] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерғолова Асия Сәйфулла ҡыҙы (1973 й. т.)яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

[33—34] Баймаҡ районы Йомаш ауылында Ниғәмәтова Кинйәбикә Хәйбулла ҡыҙынан Ниғәмәтова Рита 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 107-се бит.

[35] Учалы ҡалаһынан Ильясова Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙы 1980 йылда яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 106-сы бит.

[36] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Иыһанур ҡыҙы Йәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 104-се бит.

[37] Баймаҡ районы Иҫәнбәт ауылында Миңнур Туҡтамышеванан И. А. Исрафилова яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП.

[38] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Иәғәфәр Ханнановтан Лира Ғиззәтуллина 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., №13.

[39] Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылында Мәмбәтова Гөлсөмдән 1981 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 105-се бит.

[40] Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында С. М. Исхаҡованан (1924 й. т.) Р. Ә. Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП.

[41] Учалы районы Илтабан ауылында Ғ. Н. Лотфуллинанан (1913 й. т.) Р. Ә. Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 5-се бит.

[42] Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында В. И. Минһажетдинованан (1907 й. т.) Р. А. Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 6-сы бит.

[43] Учалы районы Ураҙ ауылында В. Ф. Әбдрәзәҡованан (1980 й. т.) Р. Ә. Солтангәрәева яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 5-се бит.

[44] Иглин районы Ләмәҙтамаҡ ауылында Шакирова Сания Насип ҡыҙынан (1912 й. т.) Ғ. Боҫҡонова, Д. Ильясова 1985 йылда яҙып алғандар. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 5-се бит.

[45] Нуриман районы Нимесләр ауылында Фәттәхова Зәйтүнә Ибраһим ҡыҙынан (1922 й. т.) Румия Әфләтунова 1987 йылда яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 5-се бит.

[46] Учалы районы Науруз ауылында Кәримова Мөшәрифә Зәйнулла ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 5-се бит.

[47] Учалы районы Юлдаш ауылында Мәғәсүмова Зөбәржәт Камил ҡыҙы әсәһе Әхмәтвәлиева Ғәлиә Әхмәҙулла ҡыҙынан 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП.

[48] Хәйбулла районында Кәбирә Таулыҡаева 1986—1988 йылдарҙа яҙып алған.— «Совет Башҡортостаны», 1988 йыл, 11 декабрь.

[49] Сибай ҡалаһында Вәкилә Ғатаулла ҡыҙы Ҡалмантаеванан (1949 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1981 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 104-се бит.

[50] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Иыһанур ҡыҙы Йәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 106-сы бит.

[51] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерғолова Асия Сәйфулла ҡыҙы (1937 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

[52] Хәйбулла районы Байғуҫҡар ауылынан Дәүләтбаева Гүзәл Зәйнетдин ҡыҙы (1973 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 77-се бит.

[53] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) әсәһе Миңсара Ҡасим ҡыҙынан (1928 й. т.) яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., №23.

[54] Белорет районы Уҫманғәле ауылында Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы Хәлилова Ғилминур апайҙан 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 2-се папка.

[55] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылынан Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., №23.

[56—57] Йылайыр районы Үрге Ғәле ауылынан Ғәниева Гөлнара Дәминдәр ҡыҙы (1973 й. т.) яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 100-сө дәфтәр.

## УЯТКЫСТАР

[1–2] Ейәнсура районы Үргә Муйнаҡ ауылында 1982 йылда Мусина Зәбирәнән Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 115-се бит.

[3–4] Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында Мәғәсүмова Ғәйшәнән 1979 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 115-се бит.

[5–6] Сибай ҡалаһында Вәлиева Миңһылыуҙан 1983 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 115-се бит.

[7–8] Сибай ҡалаһында Х. З. Йәнтилинанан 1978 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[9] Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылында Дәүләтбаева Роза Исмәғил ҡыҙынан 1984 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[10] Сибай ҡалаһында 60 йәштәге Мостафина Маһиранан Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[11] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылынан Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) үҙ белгәндәрен яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[12] Өфө ҡалаһында Мәсәлимова Рәйхана Ғайса ҡыҙынан (төп сығышы — Учалы районы Кәрим ауылы, 1925 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[13] Әбйәлил районында («Ҡыҙыл Башҡортостан» совхозы) А. Ш. Иәғәфәрованан 1986 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[14] Өфө ҡалаһында Мәсәлимова Рәйхана Ғайса ҡыҙынан (1925 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[15] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған (1968 й. т.), Яңы Аҡколай ауылында эшләүсе Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

Шул уҡ уятҡысты Белорет районы Уҫманғәле ауылында Хафиза Вәли ҡыҙы Исламова 1988 йылда Хажиәхмәтова Әсмә апайҙан яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №2.

[16] Өфө ҡалаһында Мәсәлимова Рәйхана Ғайса ҡыҙынан (1925 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[17] Сибай ҡалаһында 60 йәшлек Мостафина Маһиранан Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[18] Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында Әхмәтйәнова Нәфисә Ахун ҡыҙынан (1909—1985) 1979 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[19] Нуриман районы Яңы Күл ауылында Хәмит Һаҙыев әсәһенән яҙып алған.— «Совет Башҡортостаны», 1988, 20 ноябрь.

[20] Баймаҡ районы I Эткол ауылында Ишйәрова Әнисә Муса ҡыҙынан 1979 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 115-се бит.

[21] Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында Я. Х. Ҡорбанғәлинанан (1920 й. т.) З. Х. Фәйзуллина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 104-се дәфтәр.

[22] Ейәнсура районынан Ғәлимова яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №11.

## ҺӨЙГӨСТӘР, ҺИКЕРТКЕСТӘР

[1] Учалы районы Юлдаш ауылында Ғ. Х. Минһажеванан (1916 й. т.) Розалия Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Балалар фольклоры үрнәктәре. Төҙөүсеһе Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов. Өфө, 1991, 7-се бит.

Шул уҡ һөйгөстө Дәүләкән районы Яңы Аҡколай ауылынан Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[2] Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылынан Моратшина Зинфира үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 109-сы бит.

[3] Сибай ҡалаһында Вәкилә Ғатаулла ҡыҙы Ҡалмантаеванан (1949 й. т.) 1983 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 108-се бит.

[4] Баймаҡ районы Байыш ауылынан Маликова Көнһылыу Әхмәт ҡыҙы үҙе белгәнен яҙған (1973 й. т.).— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 75-се бит.

[5] Баймаҡ районы Буранбай ауылында Үтәбаева Гөлшат Шәфҡәт ҡыҙы (1973 й. т.) Үтәбаева Зөләйха апайҙан яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 81-се бит.

[6] Күгәрсен районы Мәҡсүт ауылында Ҡиясова Фирҙәүестән яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[7] Учалы ҡалаһында Ильясова Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙынан 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 111-се бит.

[8–9] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Йыһанур ҡыҙы Йәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 108-се бит.

[10] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған (1968 й. т.) Яңы Аҡколай ауылында эшләүсе Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[11] Сибай ҡалаһында Вәлиева Миңһылыуҙан Р. М. Ураҡсина 1985 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 116-сы бит.

[12] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған (1968 й. т.) Яңы Аҡколай ауылында эшләүсе Ғәббәсова Гүзәл үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №23.

[13–14] Ейәнсура районынан Ғәлимова яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №21.

## ҺИКЕРТКЕСТӘР

[15] 1986—1988 йылдарҙа Хәйбулла районында Кәбирә Таулыҡаева яҙып алған.— «Совет Башҡортостаны», 1988 йыл, 11 декабрь.

[16] Ейәнсура районы Ибрай ауылында 65 йәшендәге Клара Вәлиеванан Ғәбитова Гөлсөм 1984 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., а101—13, 5—6-сы бит.

[17] Баймаҡ районы Байыш ауылынан Маликова Көнһылыу Әхмәт ҡыҙы үҙе белгәндәрен яҙған (1973 й. т.).— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 74-се бит.

[18–20] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерголова Асия Сәйфулла ҡыҙы (1973 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

[21] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында йәшәүсе Ханнанов Иәгәфәрҙән Ғиззәтуллина Лира яҙып алған (1988 й.).— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 13.

[22] Баймаҡ районы Иҫәнбай ауылында Туҡтамышева Миңнур апайҙан И. А. Исрафилова яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[23] Ейәнсура районы Юлдаш ауылында Сарағолова Әнисәнән Р. М. Ураҡсина 1982 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 108-се бит.

[24] Дәүләкән районы Көрмәнкәй ауылында Булатова Римманан Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 61-се бит.

[25] Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылынан Мусина Зәбирә 1982 йылда яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[26] Архангель районы Ҡыҫымды ауылынан Хажиәхмәтова Фәтхиә үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №29.

[27–28] Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты студенткаһы Саҙриева Рәмилә 1988 йылда үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 22.

[29–31] Белорет районы Уҫманғәле ауылында Салауатова Хәсбиямал апайҙан Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., №2.

[32] Баймаҡ районы Ярат ауылынан Ишембәтова Гөлдәр (1973 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 96-сы дәфтәр.

[33] Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылынан Моратшина Зинфира үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 109-сы бит.

[34] Сибай ҡалаһында Хөмәйрә Йыһанур ҡыҙы Йәнтилинанан (1923 й. т.) 1980 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 111-се бит.

[35] Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында Миңнеәхмәтова Рәйсә Миңлебулат ҡыҙынан (1948 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1980 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 111-се бит.

[36] Дәүләкән районы Үрге Муйнаҡ ауылында Мусина Зәбирәнән 1982 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 110-сы бит.

[37–38] Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылынан Әхмәтйәнова Нуридә 1980 йылда яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[39–40] Өфө ҡалаһында Ғүмәрова Лиә Ғайса ҡыҙынан (төп сығышы — Учалы районы Кәрим ауылы. 1935 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[41–42] Өфө ҡалаһында Бүләкова Ғәҙилә Мөҙәрис ҡыҙынан (төп сығышы — Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы, 1957 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[43–44] Өфө ҡалаһында Суфиянова Нәсимә Фәтих ҡыҙынан (төп сығышы —

Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы, 1949 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 7-се бит.

[45] Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында Миңнәхмәтова Рәйсә Миңлебулат ҡыҙынан (1948 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1980 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 110-сы бит.

[46] Өфө ҡалаһында Хөсәйенова Гөлнур Рәүил ҡыҙынан (төп сығышы — Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы, 1959 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 110-сы бит.

[47] Ейәнсура районынан Ғәлимова яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 21.

[48] Өфө ҡалаһында Исҡужина Риә Ғайса ҡыҙынан (1939 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 113-сө бит.

## ӘҮРӘТКЕСТӘР, ИЫУАТҠЫСТАР, ШАЯРТҠЫСТАР

[1] Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылында Мусина Фәүзиә Сәлимйән ҡыҙынан (1958 й. т.) 1982 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 108-се бит.

[2] Учалы районы Учалы ауылында Батыршина Хәтифә Ғайса ҡыҙынан (1921 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Балалар фольклоры үрнәктәре. Төҙәүсеһе Иҙмөхәммәт Ғәләүетдинов. Өфө, 1991, 8-се бит.

[3—5] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерголова Асия Сәйфулла ҡыҙы (1973 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

[6] Сибай ҡалаһында Вәкилә Ғатаулла ҡыҙы Ҡалмантаеванан (1949 й. т.) 1983 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 111-се бит.

### Баланы мунса индергәндә

[1] Нуриман районы Нимесләр ауылында Фәттәхова Зәйтүнә Ибраһим ҡыҙынан (1922 й. т.) Румия Әфләтунова 1987 йылда археографик экспедиция ваҡытында (етәксеһе И. Ғ. Ғәләүетдинов) яҙып алған.—«Аҡ тирәк, күк тирәк», Өфө, 1991, 9-сы бит.

[2—3] Учалы районы Учалы ауылында Батыршина Хәтифә Ғайса ҡыҙынан (1921 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк», 9-сы бит.

[4] Учалы районы Сәфәр ауылында Янзаҡова Нәфисә Әбделғази ҡыҙынан (1909 й. т.) Розалия Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған.—«Аҡ тирәк, күк тирәк», 9-сы бит.

[5] Учалы районы Илтабан ауылында Ғ. Һ. Лотфуллинанан (1913 й. т.) Розалия Солтангәрәева 1986 йылда яҙып алған.—«Аҡ тирәк, күк тирәк», 9-сы бит.

[6] Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылында йәшәгән Нафиҡова Садиҡа Шәйәхмәт ҡыҙынан (1910 й. т.) Р. М. Ураҡсина 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 362-се бит.

[7] Нуриман районы Яңы Күл ауылында Хәмит Һаҙыев әсәһенән яҙып алған.— «Совет Башҡортостаны», 1988 йыл, 20 ноябрь.

[8] Архангель районы Аҙау ауылында Ғүмәрова Лира Риф ҡыҙы (1972 й. т.) 1988 йылда үҙе белгәнен яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 2-се бит.

[9] Учалы районы Юлдаш ауылында Мәғәсүмова Зөбәржәт Камил ҡыҙы әсәһе Әхмәтвәлиева Ғәлиә Әхмәҙулла ҡыҙынан 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 1-се бит.

[10] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хәлилова Ғилминур апайҙан Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 2.

[11] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Иосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) 1988 йылда Мәжитова Мәйсәрә Иәмил ҡыҙы (1961 й. т.) яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., шифры 886720.

[12] Баймаҡ районы Байыш ауылында Әхмәтова Ғилминур Әйүп ҡыҙынан (1936 й. т.) Әхмәтова Бибинур Мирас ҡыҙы яҙып алған.

Шул уҡ әүрәткесте Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Ханнанов Иәгәфәрҙән Ғиззәтуллина Лира 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 13.

[13] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Ғәзизова Фаризанан Ғиззәтуллина Гөлназ 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 13.

[14] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы 196 йылда әсәһе Ғәббәсова Миңсара Ҡасим ҡыҙынан (1928 й. т.) яҙып алған.— ТТЭ ҠФ. БФП., № 23.

[15] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хәлилова Ғилминур инәйҙән Исл мова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[16] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хажиәхмәтова Әсмә инәйҙән И ламова Хафиза Вәли ҡыҙы яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[17] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Салауатова Хәсбиямал инәйҙ Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[18] Баймаҡ районы II Эткол ауылында Сиргалина Фатима инәйҙән Р. И. М житова яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 5.

[19] Ейәнсура районынан Ғәлимова яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 21.

## Бала тәпәй баҫҡанда

[1] Өфө ҡалаһында Исҡужина Риә Ғайса ҡыҙынан (төп сығышы — Уча районы Кәрим ауылы, 1939 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТЭИ. Ҡ БФП., 114-се бит.

[2] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙын (1936 й. т.) 1988 йылда Мәжитова Мәйсәрә Йәлил ҡыҙы (1961 й. т.) яҙып алған. ТТЭИ. ҠФ. БФП., шифры 886120.

[3–4] Өфө ҡалаһында Хөсәйенова Гөлнур Рәүил ҡыҙынан (төп сығышы Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы, 1959 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 8-се бит.

[5] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хажиәхмәтова Әсмә апайҙан Ис мова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., №2.

[6–7] Баймаҡ районы II Эткол ауылында Сиргалина Фатима апайҙан Р. И. М житова яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 5.

[8] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (19 й. т.) әсәһе Ғәббәсова Миңсара Ҡасим ҡыҙынан (1928 й. т.) яҙып алған.— ТТЭ ҠФ. БФП., № 23.

[9] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хажиәхмәтова Әсмә апайҙан Ис мова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[10] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Салауатова Хәсбиямал апайҙан І ламова Хафиза Вәли ҡыҙы яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[11] Баймаҡ районы Татлыбай ауылында Ҡарасова Альбина (1972 й. т.) И бирҙина Хәбирә Зәйнулла ҡыҙынан яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 87-се бит.

[12] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерғолова Асия Сәйфулла ҡыҙы (19 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

## Баланы кейендергәндә

[1] Өфө ҡалаһында Бүләкова Ғәҙилә Мөҙәрис ҡыҙынан (төп сығышы — Б йән районы Әбделмәмбәт ауылы, 1957 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— « тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 11-се бит.

[2] Мәсетле районы Юныс ауылында Батталова Гөлсирә Мәҙһар ҡыҙы (19 й. т.) 1988 йылда үҙе белгәнен яҙған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 6-сы бит.

[3] Сибай ҡалаһында Зинфира Зәки ҡыҙы Ғөзәйерованан (1948 й. т.) 1983 йы да Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 108-се бит.

[4] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙы (1936 й. т.) 1988 йылда Мәжитова Мәйсәрә Йәлил ҡыҙы (1961 й. т.) яҙып алған ТТЭИ. ҠФ. БФП., шифры 886720.

## Баланың телен астырғанда

[1] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған (1968 й. т.), Яңы Аҡкүлай а лында эшләүсе Ғәббәсова Гүзәл үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., №

[2] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хәлилова Ғилминур инәйҙән Исла ва Хафиза Вәли ҡыҙы яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[3] Белорет районы Уҫмаңғәле ауылында Хажиәхмәтова Әсмә инәйҙән Ис мова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., № 2.

[1-2] Учалы районы Учалы ауылында Батыршина Хәтифә Ғайса ҡыҙынан (1921 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 11-се бит.

[3-4] Өфө ҡалаһында Бүләкова Ғәҙилә Мөҙәрис ҡыҙынан (төп сығышы — Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы, 1957 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 97-се бит.

[5] Ғафури районы Ҡотлоғужа ауылында Рәйсә Ғәлиева яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ, а101—17, 14-се бит.

[6] Ҡарағыҙ: «Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр». Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Нәҙершина. Өфө, 1980, 61-се бит.

[7] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) 1988 йылда Мәжитова Мәйсәрә Йәлил ҡыҙы (1961 й. т.) яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., шифры 886720.

[8] Дәүләкән районы Мерәҫ ауылында тыуған (1968 й. т.), Яңы Аҡкүлай ауылында эшләүсе Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 23.

[9] Хәйбулла районы Турат ауылында Рәхмәтова Бәҙерниса инәйҙән (80 йәш) Рәхмәтова Миләүшә 1984 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 59-сы бит.

[10] Йылайыр районы Үргә Ғәле ауылынан Ғәниева Гөлнара Дәминдәр ҡыҙы (1973 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 100-сө дәфтәр.

[11] Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты студенткаһы Саҙриева Рәмилә 1988 йылда үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 22.

[12] Дәүләкән районы Көрмәнкәй ауылында Булатова Римманан Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 61-се бит.

[13] Өфө ҡалаһында Ильбулдин Фәсхей Фәтхлислам улынан (1930 й. т.) 1988 йылда Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП.

[14] Баймаҡ районы Йомаш ауылында Барлыбаева Зәбирә Зәкәрйә ҡыҙы яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 18.

[15] Йылайыр районы Ҡыпсаҡ ауылынан Бәйғужина Миләүшә 1985 йылда үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 116-сы бит.

[16] Баймаҡ районы Байыш ауылында 1984 йылда Аширбаева Зөлхизәнән Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 66-сы бит.

[17] Өфө ҡалаһында Исҡужина Риә Ғайса ҡыҙынан (төп сығышы — Учалы районы Кәрим ауылы, 1939 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— «Аҡ тирәк, күк тирәк». Өфө, 1991, 8-се бит.

[18] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Йәлил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., шифры 886120.

[19] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Ғәзизова Фаризанан Ғиззәтуллина Гөлназ 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., № 13.

## АРБАУҘАР, ИМЛӘҮҘӘР

### Күҙ тейеүҙән

[1] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Ханнанов Йәғәфәрҙән Лира Ғиззәтуллина 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ. БФП., № 13.

[2] Баймаҡ районы I Этҡол ауылынан Ғәтиә Хисмәтуллина үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 67-се бит.

[3] Баймаҡ районы II Этҡол ауылында Фатима Сиргалинанан Р. И. Мәжитова яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 5.

### Бала сирләһә

[4] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Йәмил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., шифры 886720.

[5] Сибай ҡалаһында Ғәбитова Фәниә Фәхрислам ҡыҙынан Р. М. Ураҡсина 1982 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 152-се бит.

[6–9] Ейәнсура районы Юнай ауылында Вәлиева Нәфисәнән Р. М. Урақсина 1985 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 152-се бит.

[10] Ҡарағыҙ 3-сө һылтанманы.

[11] Сибай ҡалаһында Мостафина Маһиранан Р. М. Урақсина 1981 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 152-се бит.

### Ҡурҡыуҙан. Ҡот ҡойоу

[12] Ҡарағыҙ 3-сө һылтанманы.

[13] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.

[14] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

[15] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылында Ғәзизова Фаризанан Ғиззәтуллина Гөлназ 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 13.

[16] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

[17] Ҡарағыҙ 6-сы һылтанманы.

[18] Өфө ҡалаһында Бүләкова Фәҙилә Мөҙәрис ҡыҙынан (1957 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған. Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 8-се бит.

[19–20] Ҡарағыҙ 6-сы һылтанманы.

[21] Бөрйән районы Бәйгазы ауылында Римма Баязитованан Р. М. Урақсина 1986 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 153-сө бит.

### Һөйәлде арбау

[22] Ҡарағыҙ 3-сө һылтанманы.

[23] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

[24] Архангель районы Аҙау ауылынан Ғүмәрова Лира Риф ҡыҙы (1972 й. т.) үҙе белгәнде 1988 йылда яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 3-сө бит.

[25] Ҡарағыҙ 21-се һылтанманы.

[26] Ҡарағыҙ 6-сы һылтанманы.

[27–28] Учалы районы Науруз ауылында Кәримова Мөшәрифә Зәйнулла ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 67-се бит.

[29] Учалы районы Сораман ауылында Ғәләүетдинова Жөүәйрә Йосоп ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 114-се бит.

[30] Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Ҡәҙерғолова Асия Сәйфулла ҡыҙы (1973 й. т.) үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 90-сы дәфтәр.

[31] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.

[32] Ейәнсура районынан Ғәлимова үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. СҠФ., № 21.

[33] Ҡарағыҙ 6-сы һылтанманы.

[34] Ҡарағыҙ 30-сы һылтанманы.

### Тимерәүгә әйтеү

[35] Ҡарағыҙ 24-се һылтанманы.

### Теш ҡортона өндәшкәне

[36] Учалы районы Науруз ауылынан Гөлнур Заһирова яҙып ебәргән.— «Совет Башҡортостаны», 1989 йыл, 3 сентябрь.

## БЕЙЕҮ ТАҠМАҠТАРЫ

### Баланы сәпәкәй иттергәндә

[1–3] Белорет районы Уҫманғәле ауылында Ғилминур Хәлилованан Исламова Хафиза Вәли ҡыҙы 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 2.

[4] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Йәмил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., шифры 886720.

[5–6] Дәүләкән районы Яңы Аҡҡолай ауылынан Ғәббәсова Гүзәл Муллағәле ҡыҙы (1968 й. т.) үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. СҠФ., № 23.

[7] Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылында Ғәзизова Фаризанан Ғиззәтуллина Гөлназ 1988 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 13.
[8] Бүздәк районы Шланлыкүл ауылынан Салихова Лариса яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 93-сө бит.
[9] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.

## Бейеү таҡмаҡтары

[10] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[11] Ишембай районы Ишәй ауылынан Зәһиҙуллина Фирҙәүес үҙе белгәнде яҙып ебәргән.— ТТӘИ. СҠФ., а101—№ 35.
[12] Учалы районы Сораман ауылында И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 9-сы бит.
[13] Ҡыйғы районы Ибрай ауылынан Ильясова Зәһиҙа яҙып ебәргән.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 23-сө бит.
[14] Ҡарағыҙ 11-се һылтанманы.
[15–16] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[17] Ҡарағыҙ 8-се һылтанманы.
[18] Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында Ә. С. Кирәйеванан (1920—1990) З. Х. Фәйзуллина яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 104.
[19] Учалы ҡалаһында Ильясова Хәтимә Сәлимгәрәй ҡыҙынан Р. М. Ураҡсина 1980 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 111-се бит.
[20] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[21] Зәйнәб Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» әҫәренән.
[22] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[23] Ишембай районы Арлар ауылында Мәрзиә Ноғоманованан Баймурзина Рәмзилә 1987 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., а101—№ 8.
[24] Йылайыр районы Ҡыпсаҡ ауылында Бәйғужина Миләүшәнән Р. М. Ураҡсина 1986 йылда яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 120—121-се биттәр.
[25] Ҡарағыҙ 7-се һылтанманы.
[26] Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Мөстәхетдинова Зөлфиә Мөхтәр ҡыҙы (1973 й. т.) үҙе белгәнде 1989 йылда яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 340-сы бит.
[27] ТТӘИ. ҠФ., а101—№ 21, 10—15-се биттәр.
[28] Баймаҡ районы Татлыбай ауылынан Кирасова Альбина (1972 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 89-сы дәфтәр.
[29] Йылайыр районы Һултантимер ауылында Атанбаева Әлифә Йомагужа ҡыҙынан яҙып алынған.— ТТӘИ. СҠФ., № 23.
[30] Ейәнсура районы Башҡорт Самаҙыһы ауылынан Байгилдина Гөлфара Кинйәғәле ҡыҙы (1972 й. т.) үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ., 93-сө дәфтәр.
[31] Ҡарағыҙ 27-се һылтанманы.
[32] Хәйбулла районы Сәғит ауылынан Ҡәипова Зинира 1987 йылда үҙе белгәнде яҙған.— ТТӘИ. ҠФ., а101—№ 33, 1-се бит.
[33] Ҡарағыҙ 27-се һылтанманы.
[34] Ҡарағыҙ 23-сө һылтанманы.
[35] Учалы районы Сораман ауылында И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 4-се бит.
[36] Ҡарағыҙ 23-сө һылтанманы.
[37–38] Ҡарағыҙ 27-се һылтанманы.
[39–42] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[43] Ҡарағыҙ 5-се һылтанманы.
[44] Ҡарағыҙ 18-се һылтанманы.
[45] Хәйбулла районы Турат ауылында Бәҙернисә Рәхмәтованан Миләүшә Рәхмәтова яҙып алған.— ТТӘИ. ҠФ. БФП., 59-сы бит.
[46–47] Ҡарағыҙ 4-се һылтанманы.
[48] Баймаҡ районы Йомаш ауылында Барлыбаева Зәбирә Зәкәрйә ҡыҙы яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., № 18.
[49–50] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.
[51] Ҡарағыҙ 27-се һылтанманы.
[52] Ғафури районы Үтәк ауылында Еремеев Мостафанан Р. Ғәниева яҙып алған.— ТТӘИ. СҠФ., а101—№ 10.
[53–54] Ҡарағыҙ 23-сө һылтанманы.

[55] Ҡарағыҙ 29-сы һылтанманы.

[56] Мәләүез районы Эткәсәк ауылында яҙып алынған.— ТТЭИ. ҠФ., а101— № 19, 11-се бит.

[57] Баймаҡ районы Ярат ауылында Анастасия Исмәғилеванан (1924 й. т.) Исмәғилева Альбина Рауил ҡыҙы (1973 й. т.) яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 94-се дәфтәр.

[58] Ҡарағыҙ 1-се һылтанманы.

[59] Ҡарағыҙ 27-се һылтанманы.

[60] Салауат районы Арҡауыл ауылында Саяпов Марат Хәйрулла улынан (1953 й. т.) Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 363-сө бит.

[61] Ҡарағыҙ 23-сө һылтанманы.

[62] Күгәрсен районы Мәҡсүт ауылында Ҡыясова Фирҙәүестән яҙып алынған. — ТТЭИ. ҠФ., а101—№ 25.

## ҠОТЛАУҘАР

[1] Йылайыр районы Ҡаҙырша ауылында Юламанова Фәнүзә Әхмәтсәғит ҡыҙы 1985 йылда үҙе белгәнде яҙған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., а101— № 30, 16-сы бит.

[2] Баймаҡ районы Аҡморон ауылында М. А. Абдразаҡованан 1988 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 118-се бит.

[3] Хәйбулла районы Сәғит ауылында Нафиҡова Фәниләнән Р. М. Ураҡсина 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 118-се бит.

[4] Йылайыр районы Ҡыпсаҡ ауылында Байғужина Миләүшәнән 1986 йылда Р. М. Ураҡсина яҙып алған.— ТТЭИ. ҠФ. БФП., 118-се бит.

[5] Бөрйән районы Нәби ауылында Хисаметдинова Зәйтүнә Йосоп ҡыҙынан (1936 й. т.) Мәжитова Мәйсәрә Йәмил ҡыҙы (1961 й. т.) 1988 йылда яҙып алған.— ТТЭИ. СҠФ., шифры 886720.

[6] Учалы районы Сораман ауылында Ғәләүетдинова Жәүәйрә Йосоп ҡыҙынан (1918 й. т.) И. Ғ. Ғәләүетдинов яҙып алған.— Ҡарағыҙ: «Аҡ тирәк, күк тирәк», 11-се бит.

